ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискə Өфө

4-10 июль (майай) 2020

№27 (913)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Минең уйлауымса, кешеләр һәм халыҡтар араһында дошманлыҡты, күрә алмаусылыҡты ойошторорға мөмкин, ә мөхәббәтте, дуҫлыҡты ойоштороу мөмкин түгел. Улар юғарынан йәки көсләп тағыуға буйһонмай. Тормош һәм йөрәк ҡушыуы буйынса барлыҡҡа килә улар.*

**Мостай КӘРИМ.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аллы-гөллө баллы мәл...**



3

**"Киләсәк территорияһы. Евразия йөрәгенән ҡараш"**



6

**Урман байлығы...**

әҙәмдәр мәнфәғәте өсөн яратылған



8-9

**Булдыҡлы, егәрлегенең...**

фекере киң, теле лә бай



12-13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Сығарылыш класы уҡыусыларының имтихандары бара. Киләсәктә улар өсөн тормош һынауҙары күп буласаҡ әле. Балалар уға әҙер булып сығамы мәктәптән?

***Рафиҡ ӘБҮЛӘЕВ, 1-се һанлы Стәрлебаш дөйөм белем биреү мәктәбе директоры, БР мәғариф отличнигы:*** 17 июндә улыбыҙ Уралдың Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия интернатында 9-сы класты тамамлауы тураһында аттестат алыуы айҡанлы ҙур ҡыуаныс кисерҙек. Әлбиттә, уға әле мәктәпте тамамлау өсөн уҡырға ла уҡырға, шулай ҙа был ваҡиға улымдың тормошондағы яуаплы баҫҡыстарҙың тәүгеһе, йәғни баласаҡ осоронан өлкән һәм яуаплы тормошҡа аяҡ баҫыуы булды тип әйтергә мөмкин. Шуныһы ла икеләтә ҡыуаныс тыуҙыра: ҡасандыр мин үҙем дә ошо мәктәпте тамамланым һәм Рәми Ғарипов мәктәбе уҡыусыһы исемен ғорурлыҡ менән йөрөтәм. Үҙем эшләгән мәктәпте иһә быйыл 33 бала тамамлай. Уларҙың бөтәһенә лә бөгөн рәхмәт һүҙҙәремде еткергем килә, сөнки һәр береһе беҙ, уҡытыусыларҙың, күҙ алдында үҫте, ҡанат нығытты, шәхес булараҡ формалашты - ҙур, татыу мәктәп ғаиләһенең лайыҡлы ағзалары булды. Мәктәп тормошон уларһыҙ күҙ алдына килтереп тә булмаҫ ине: олимпиадаларҙа, ярыштарҙа, конкурстарҙы һәр саҡ алғы сафтарҙа барҙылар.

Был мәктәптә мин 1998 йылдан бирле директор булып эшләгән осорҙа, ғөмүмән, балалар бик ныҡ үҙгәрҙе. Улар был донъяға, замандарына күрә яраҡлашып йәшәйҙәр. Уларҙың уй-фекерҙәре башҡасараҡ. Ҡайһы ваҡыт: "Ә бит улар бик дөрөҫ фекерләй", - тип уйлап ҡуям. Киләсәктә улар алдына тормош үҙенең сираттағы имтихандарын, бик күп һынауҙарын ҡуясаҡ әле, ләкин мин уларҙы уҡытыуға күп йылдар сарыф иткән педагог булараҡ, һис икеләнмәй әйтә алам: үҙебеҙ тәрбиә биреп үҫтергән балаларға ышанысым бар, улар тормош һынауҙарына бирешмәйәсәк. Ни өсөн тигәндә, бөгөнгө балалар бик аҡыллылар, улар яҡшы мәғәнәлә үҙ һүҙлеләр, ҡуйған маҡсаттарына ынтылыусандар. Уларҙың тап ана шундайҙарҙан булыуына Берҙәм дәүләт имтихандарының да йоғонтоһо барҙыр тип уйлайым. Сөнки имтихандың был төрө күптәргә оҡшап етмәһә лә, балалар ике-өс йыл алдан киләсәккә маҡсаттар ҡуя башлай - шуныһы мөһим. БДИ барыбер ҙә үҙаллылыҡҡа өйрәтә, дәреслектәген ятламайынса, уҡыусыға үҙ фекерен белдерергә мөмкинлек бирә. Теге йәки был предметтан имтихан тапшырып, ул алдан үҙенең һайлаған һөнәренә әҙерлек башлай. Быйыл был бигерәк тә асыҡ күренәсәк, сөнки коронавирус арҡаһында юғары уҡыу йортона уҡырға инергә теләгәндәр генә имтихан тапшыраcаҡ. Шуныһы ла мөһим: был уларға ата-әсәһе теләге буйынса түгел, ә үҙҙәре теләгәнсә ҡарар ҡабул итергә ихтыяр ҡуя. Мин шуға ышанам: балалар туған мәктәптәренән белем генә түгел, ә ошонда үткәргән баласаҡ йылдары иҫтәлектәрен дә, ныҡлы дуҫлыҡ хистәрен һәм, ихтимал, ҡайһы берҙәре тәүге мөхәббәт тойғоларын да алып сығасаҡ. Шуға ла улар менән мәктәп араһындағы бәйләнештәр һис ҡасан өҙөлмәйәсәк, мәктәп, уҡытыусылар коллективы уларға теләгән ваҡыттарында кәңәш бирергә, ярҙамға килергә әҙер буласаҡ. Хәйерле юл һеҙгә, ҡәҙерле балалар!

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ...

# ТОРНАЛАР БЕЙЕЙ...

**30 июнь Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең торлаҡ-коммуналь хужалығы министры урынбаҫары Максим Егоров менән Өфөнөң Орджоникидзе районындағы "Имәнкәй" скверында урынлашҡан иҫтәлекле "Бейеүсе торналар" фонтанын асыу тантанаһында ҡатнашты. Сарала Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин да ҡатнашты.**



Үткән быуаттың 70-се йылдары башында төҙөлгән "Бейеүсе торналар" фонтаны 2008 йылда яңыртып эшләү өсөн ябылғайны. Парк территорияһын модернизациялау эштәре былтыр көҙ айҙарында республика етәксеһе инициативаһы буйынса башланып китте. Скверҙы төҙөкләндереү сиктәрендә яңы ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртылды, граниттан юлдар һалынды, эскәмйә һәм велосипедтар өсөн туҡталыштар ҡуйылды, спорт һәм балалар майҙансыҡтары төҙөлдө, яҡтыртыу һәм видеокүҙәтеү системалары ҡуйылды. Яңырған фонтан йәйғор төҫтәре менән балҡып, баш ҡала халҡын йыр-моң ағылдырып ҡаршылай хәҙер.

- "Бейеүсе торналар" студент саҡтарҙан хәтерҙә ҡалған. Йылдар үтеп, бер аҙ онотолоп та торҙолар. Әммә беҙ был композицияны тергеҙергә булдыҡ һәм бөгөн ҡалаға төҙөкләндерелгән сквер менән һоҡланғыс фонтан бүләк итәбеҙ. Өфө ҡала-паркка әүерелһен өсөн артабан да шулай эҙмә-эҙлекле эш алып барасаҡбыҙ, - тип белдерҙе Радий Хәбиров фонтанды асыу тантанаһында. Уның һүҙҙәрен Рәсәйҙең торлаҡ-коммуналь хужалығы министры урынбаҫары Максим Егоров та күтәрмәләне, тантаналы сарала ҡатнашҡан өфөләр өсөн шатланыуын белдерҙе һәм ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе.

12+

✔ *Ауылда башланғыс мәктәптәрҙе тергеҙергә кәрәк. Бала олатаһы, өләсәһе менән әңгәмәләшеп, уларҙың өгөт-нәсихәтен тыңлап, ата-әсәһе менән бергәләп йорт эштәрен башҡарып, ғаилә тәрбиәһендә үҫеп етәсәк.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# БӨТӘ БАЛАЛАР ҘА...
## урта мәктәп тамамлаһын

**Совет власы урынлашҡас, илдә хәйерселек хөкөм һөргәндә лә, 1918-1919 йылдарҙа һәр ауылда мәктәп асҡандар. Ә һуңғы үҙгәртеп ҡороу мәлендә иһә етәкселәр "оптимизация-яптимизация" һылтауы менән, халыҡ фекеренә ҡолаҡ та һалмайса, төпкөл һәм бәләкәй ауылдарҙағы мәктәптәрҙе яптылар ҙа, үгәйһетелгән ауылдарҙың балаларын мәктәп автобустары менән ҡасаба йәки үҙәк ауылдарҙағы уңайлыҡтар тыуҙырылған мәктәптәргә йөрөтөп уҡыта башланылар. Йәнәһе, ундай мәктәптәрҙә юғары квалификациялы уҡытыусылар эшләй һәм улар балаларға төплө белем бирә, Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырғанда ла юғары балл йыя аласаҡтар, тигән һығымта яһайҙар.**

Ундай һығымта өсөн төплө генә фәнни анализ яһалғанмы икән? Был турала ишеткәнем дә, уҡығаным да юҡ. Ләкин был хәлдең зыянлы мәлдәрен күҙаллайым. Мәҫәлән, башланғыс һәм юғары синиф уҡыусыларының ауылдан иртә таң менән мәктәпкә бер автобусҡа тейәлеп юлға сығыуына һәр саҡ көйөнөп ҡарайым: сәләмәтлектәренә зыян килмәй ҡалмаясаҡ. Башланғыс синиф балалары 4 йәки 5 дәрес, ә юғары синифтағылар 7-8 дәрес уҡый, өйҙәренә киске сәғәт 4-5-тә генә ҡайтырға сығалар. Башланғыс синиф уҡыусылары 3-4 сәғәт буйы автобус көтөп, ваҡыттарын бушҡа уҙғара. Улар өйҙәренә йоҡларға ғына ҡайта...

Бынан 20 йылдар самаһы элек Инйәр ҡасабаһынан ике саҡрым алыҫлыҡтағы Уҫманғәле ауылында өс ҡатлы мәктәп төҙөнөләр ҙә, Арышпар, Айыс, Ноҡат ауылдарындағы мәктәптәрҙе оптимизация һылтауы менән ябып, уҡыусыларҙы автобус менән Уҫманғәле мәктәбенә ташый башланылар (ә бит республикала танылған Вәкил Хажин, Рәмил Хөснөтдинов кеүек ғалимдар Арышпар мәктәбендә уҡыған, тимәк, унда көслө уҡытыусылар эшләгән). Һөҙөмтәлә, әлеге ауылдарҙан уҡыусы балалары булған йәш ғаиләләр башҡа яҡтарға күсеп китте. Ауылдар һүнде. Уларҙа ҡарт-ҡоролар ғына тороп ҡалды, 60-70 процент өйҙәр буш тора. **Ҡала һәм ҡасабаларҙа торлаҡ етешмәй, ә ябылған мәктәптәр, клубтар, юлдар арҡаһында ауылдарҙа хужаһыҙ өйҙәр, ҡороған нигеҙҙәр күбәйә...**

Уҡыусыларҙың белем кимәлен Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса билдәләү бик үк дөрөҫ түгел, белем кимәле мотлаҡ баланың һәләтенә бәйләнгән. Тормошта бөтәһенә лә юғары белем һәм диплом кәрәкмәй. Дипломһыҙ ябай эшселәр ҙә кәрәк. **Бөгөн беҙгә һәр балаға урта мәктәпте тамамларға мөмкинлек тыуҙырырға кәрәк.** Әлеге ваҡытта күптәр Берҙәм дәүләт имтиханынан ҡурҡып, 9-сы синыфтан һуң 10-сыға килмәй, башҡа уҡыу йорттарына китәләр. Берҙәм дәүләт имтиханы балаларҙа белем алыуға кире ҡараш тәрбиәләй һымаҡ килеп сыға түгелме? Был имтихан булһын ул, тик уны әлегесә юғары уҡыу йорттарына инергә теләүселәр өсөн ҡалдырһындар. Урта мәктәпте тамамлау тураһындағы аттестатты Берҙәм дәүләт имтиханы сертификатынан тыш бирергә кәрәк. Урта мәктәпте үҙ ауылында, ҡасабаһында (йәшәгән урынында) ата-әсә күҙәтеүендә тамамлау мөмкинлеге бирһәк, әллә күпме йәштәрҙе яңылыш аҙымдан, насар юлдан ҡурсалап ҡалыр инек. Урта мәктәпте тамамлағансы уҡыусыларҙың аҡыл кимәле лә үҫешә, холоҡ-фиғеле лә тотороҡлана. **Ата-әсә күҙәтеүе һәм тәрбиәһе һөҙөмтәһендә ул тәмәке тартыу, наркотиктар ҡулланыу, алкоголь эсемлектәргә ылығыу һәм йәмғиәт өсөн башҡа зарарлы ағымдарға бирелмәйәсәк, йорт тирәһендә эшләп, күрше-күләнгә ярҙам итеп, хеҙмәт тәрбиәһе лә аласаҡ.** Юғиһә, һуңғы ваҡытта балаларҙың уҡыуына, белеменә генә иғтибар биреп, тәрбиәне онотттоҡ шикелле. Шуға ла һуңғы арала аҡса иҫәпләүселәр, бурҙар үрсене, ә етештереүселәр, эшсе профессияларының ҡәҙере китте. Замана балалары телефон, компьютер һәм планшет кнопкалары менән генә уйнай белә, теүәл фәндәрҙән мәсьәлә сисергә бирһәң, уйларға ла теләмәйҙәр, интернеттан әҙер яуап эҙләйҙәр.

Һәм тағы. Һәр ауылда кәмендә 4-5 уҡыу йәшендәге бала булһа, башланғыс мәктәптәрҙе тергеҙергә кәрәк. Бала олатаһы, өләсәһе менән әңгәмәләшеп, уларҙың өгөт-нәсихәтен тыңлап, ата-әсәһе менән бергәләп йорт эштәрен башҡарып, хеҙмәт сынығыуы алып, ғаилә тәрбиәһендә үҫеп етәсәк. Был турала ни уйлай башҡалар?

**Ҡасим ӘЛИБАЕВ,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Сығарылыш класы уҡыусыларының имтихандары бара. Киләсәктә улар өсөн тормош һынауҙары күп буласаҡ әле. Балалар уға әҙер булып сығамы мәктәптән?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Нурзилә ИҘЕЛБАЕВА, Баймаҡ районы, Ишбирҙе ауылы:*** Балалар өсөн генә түгел, беҙ, өлкәндәр өсөн дә яуаплы, тулҡынландырғыс осор ул уҡыусыларҙың мәктәп тамамлау көндәре. Быйыл да шулай булды. Бер яҡтан, коронавирус арҡаһында 9-сы кластарҙы Төп дәүләт имтихандарынан азат итеү хәлде күпкә еңелләштерҙе, ә бына 11-се кластар өсөн, аттестаттар алдан тапшырылһа ла, юғары уҡыу йортона инергә теләгәндәр өсөн Берҙәм дәүләт имтихандары башланды. Күптән түгел минең ике ейәнсәрем менән ике ейәнем ҡулдарына аттестаттар алып, бөтөн туғандарҙы ҡыуандырҙылар. Иң беренсе шатлығым менән уртаҡлашайым: Баймаҡта йәшәүсе Эльвира ҡыҙымдың ҡыҙы Диана мәктәпте алтын миҙалға бөтөрҙө. Был бөтәбеҙ өсөн дә ҙур ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ. Ул Баймаҡтың 2-се һанлы урта мәктәбендә белем алды. Уның ҡустыһы, ейәнем Ильяс ошо уҡ мәктәптә 9-сы класты тамамланы һәм шулай уҡ аттестатҡа эйә булды. Илнур улымдың да ғаиләһе Баймаҡта йәшәй. Уларҙың өлкән улдары - ейәнем Альберт 1-се һанлы Баймаҡ урта мәктәбендә 11-ҙе бөтөрҙө, уның һеңлеһе - ейәнсәрем Камила, Ильяс кеүек үк, 9-сы класты тамамлауы тураһында аттестат алды. Бына шулай миңә уларҙың дүртеһе өсөн дә бер аҙ борсолорға тура килһә лә, ейәндәрем йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне, рәхмәтлемен уларға һәм киләсәктә лә фәҡәт уңыштары менән генә һөйөндөрөп торорҙар тип ышанам, сөнки мәктәп йылдарынан беләм: улар һәр ваҡыт уҡыуға етди ҡаранылар, тик яҡшы билдәләргә генә ынтылдылар, тырыштылар.

Ояһында ни күрһә, оҫҡанында шул булыр, тигәндәй, киләсәктә лә тормош ҡуйған һынауҙар алдында ейәндәремдең юғалып ҡалмаҫтарына ышанам, сөнки уларҙың тәрбиә нигеҙендә ғаилә менән мәктәптән тыш, өләсәй-олатай мәктәбенең дә өлөшө бар. Шәхси күҙәтеүҙәремә нигеҙләнеп, шуны әйтә алам: бәләкәйҙән ауыл тормошо менән таныш булып, ошо мөхиттә ҡайнап, олатай-өләсәй йоғонтоһонда үҫкән балалар эш һөйөүсән, тырыш булалар, туған телдәрен дә онотмайҙар. Ейәндәремә мин был тормошта үҙ урындарын табыуҙарын теләйем. Бының өсөн улар яратҡан һөнәрҙәренә эйә булырға, уның өсөн иһә уҡыуҙы дауам итергә тейеш буласаҡтар. Тик шуныһы: минең фекеремсә, балаларҙы теге йәки был һөнәргә мәжбүрләп уҡытыу - ҙур хата һәм ул киләсәктә йәш кешегә тормош йүнәлешен үҙе теләгәнсә ҡорорға мөмкинлек бирмәйәсәк. Ул күңеле ятмаған эштә ғүмерен заяға үткәрергә, шул арҡала көсөргәнеш кисерергә, уңышһыҙлыҡтарға дусар булып йәшәргә мәжбүр ителәсәк. Мин ейәндәремә бындай яҙмыш теләмәйем, үҙ яҙмыштарын үҙҙәре һайлаһындар.

***Айгөл САФИНА, менеджер:*** Бына шундай бик уңайлы һүҙ барлыҡҡа килде әле әлдә лә: алған белемең, һөнәреңдең эшләп йөрөгән өлкәгә яҡын да килмәүен, исмаһам, шул бер вазифа - менеджер төшөнсәһе артына йәшереп йөрөргә мөмкин. Мәскәүҙең педагогик йүнәлешле бер вузында мәктәпкәсә йәштәге учреждение педагогы һөнәренә уҡып сыҡтым. Баш ҡалала уҡыуы үҙенсә бер мәртәбә күренһә лә, һайлаған специальность миңә бер ваҡытта ла оҡшаманы. Уны һайлау ҙа осраҡлы килеп сыҡты. Мәктәп тамамлағас, ҡайҙа барырға, ни эшләргә тигән һорау килеп баҫты. Үҙемдең киләсәктә ниндәй һөнәргә тартылыуымды аңларға теләү өсөн берәй йыл эшләп алыу ине, ләкин атайым да, әсәйем дә быға ҡырҡа ҡаршы килделәр һәм мин оҙаҡ та уйлап тормаҫтан, ҡайҙа конкурс әҙ, шунда документтарҙы ебәрҙем, шулай ҙа өс урынға ебәрелгән документтар балдар һаны буйынса әлеге вузда ғына үтеп китте. Уҡып сыҡһам да, һөнәрем буйынса бер генә көн дә эшләмәнем, сөнки минең өлкә түгел ине был. Икенсенән, эш хаҡы бик әҙ булып сыҡты. Шулай итеп, миңә "Макдональдс" компанияһында эшемде касса артынан башлап ебәрергә тура килһә лә, кадрҙар менән эшләү буйынса менеджер вазифаһына күтәрелә алдым. Эшем оҡшай, хеҙмәт хаҡы ла арыу ғына сыға. Хәҙер мин үҙемдең ниндәй эшкә һәләтле булыуымды аңланым, тик бөтөнләй икенсе һөнәргә уҡып ваҡыт үткәргән биш йылым әрәм.



Шуға күрә мәктәп тамамлаусы йәштәргә әйтер инем: һөнәр һайлауға яуаплыраҡ ҡарағыҙ, атай-әсәйегеҙ менән ошоға ҡағылышлы мәсьәләлә уртаҡ тел табырға, кәрәк икән, уларҙы үҙ теләгегеҙгә ышандырырға тырышығыҙ. Бының өсөн иһә, әлбиттә, имтихандарҙы мөмкин тиклем яҡшыраҡ тапшырырға, кәрәк икән, тәжрибәле репетитор менән шөғөлләнергә лә тартынмағыҙ. Уңыштар юлдаш булһын һеҙгә, хыялығыҙға өлгәшеүҙә ныҡышмаллыҡ теләйем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Юғары әҙерлек режимы индереү тураһында"ғы указға төҙәтмәләр индерҙе. Документ буйынса, 65 йәштән өлкән граждандар өсөн 12 июлгә тиклем үҙизоляция режимы һаҡлана. Йәмәғәт транспортында, дәүләт һәм муниципаль учреждениеларҙа, күп функциялы үҙәктә, магазинда, ябыҡ бинала битлек кейеү мотлаҡ. Хәҙер абитуриенттар уҡыу йорттарына документтарын үҙе илтә ала.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров мәктәп яны лагерҙарын асыу көнөн күсерергә хәл итте. Бынан алда республика Хөкүмәте 1 һәм 3 июлдә балаларҙы мәктәп яны лагерҙарына ялға ебәрергә йыйынғайны. "Әйҙәгеҙ, үҙебеҙгә гонаһ алмайыҡ. Роспотребнадзор ярамай тип әйтә икән, тимәк, ярамай, сөнки сир таралһа, бының енәйәт эҙәрлекләүе булыуы мөмкин, - тине Радий Хәбиров. - Яҡынса 13-15 июлгә билдәләйбеҙ. Күҙәтеп барырбыҙ".

✔2020 йылдың 1 мартында Рәсәй Президенты Владимир Путин "Рәсәй Федерацияһында "Хеҙмәт батырлығы ҡалаһы" маҡтаулы исемен биреү тураһында" 41-се федераль законға ҡул ҡуйҙы. Бындай исем Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында халҡы ҡаланың сәнәғәт предприятиеларында туҡтауһыҙ хәрби һәм граждандар продукцияһы етештереп, хеҙмәт батырлығы, фиҙаҡәрлек күрһәткән Рәсәй ҡалаларына бирелә. 4 июндән Өфөгә "Хеҙмәт батырлығы ҡалаһы" исемен биреү өсөн ҡултамға йыйыу башланды.

✔2 июлгә Башҡортостанда коронавирус инфекцияһының рәсми раҫланған осрағы - 5 450. Тәүлек эсендә республикала 45 кеше сир йоҡторған. Коронавирустан вафат булғандар - 18 кеше. Был һан һуңғы бер нисә аҙна дауамында үҙгәрмәй. Мәғлүмәткә ярашлы, хәҙерге ваҡытта сирлеләр 2 288 кеше тәшкил итә, һауығып сыҡҡандар - 3 144.

✔Рәсәйҙә тәүлек эсендә 6 750 яңы коронавирус осрағы раҫланған. Бөтәһе 661 165 сирле асыҡланған. Бөтә осорҙа илдә 9 683 кеше коронавирустан вафат булған, 147-һе - һуңғы тәүлектә. Һуңғы тәүлектә илдә 9 220 кеше дауахананан сығарылған. Илдә һауыҡҡан пациенттар һаны 412 650-гә еткән.

БЫЛ АЙҘА...

# АЛЛЫ-ГӨЛЛӨ БАЛЛЫ МӘЛ...

**Йәй аллы-гөллө сәскәләр менән биҙәлгән аҫыл тажын кейҙе. Ниһайәт, йәйҙең генә түгел, йылдың иң матур, бай, йылы, йомарт, күңелле айҙарының береһе, халыҡса әйткәндә, майай тыуа.**



Йәй уртаһы ҡыҙыу эш мәле лә ул, ауыл халҡы, коллектив хужалыҡтар бесәнгә төшә. Майай, әйтерһең дә, ҡара тирен һыпырып эшләгән хеҙмәт кешеһенә мәрхәмәтлек итә: был ай, гәҙәттә, эҫе һәм ҡоро тора. Яуынлы йыл булмаһа, һирәкләп кенә көслө йәшенләп ҡыҫҡа ямғыр ҡойоп үтеүе ихтимал, унан ҡояш апай тағы үҙ эшенә тотона. Ауыл халҡы өсөн был бик ҡулай: сапҡан бесәнең ынғайы бер кибеп бара, иртәгәһенә йыйырға эшкинә. Элек кенә ул беҙ бесәнде ҡул салғыһы менән сабып, йәйге селләлә арманһыҙ була инек. Үлән үҫкән йылдарҙа бесән ҡайырып сапҡыһыҙ ауыр, бакуйҙар ҡалын була, оҙаҡ кибә ине. Унан һәнәктырма менән йыйыу, күбәләү, ҡойоу... Хәҙер халыҡ, афарин, рәхәткә сыҡты: машина саба, йыя, өйә. Ә шулай ҙа Хоҙай ярҙам бирһен уларға: ҡул көсө һалмай ҙа булмай - машина шыпшыма итеп, ҡупшы һәм осло кәбәндәр һала алмай барыбер. Унан бит бесәндән башҡа хәстәрлектәре лә муйындан эш кешеһенең: мал-тыуар, ҡош-ҡорт, баҡса... Ҡала халҡы ла дача-баҡсаларында ята, йәшелсә, картуф үҫтерә уңғандары. Ҡалғандар өсөн июль отпуск мәленең ҡыҙыу сағы... була торғайны коронавирусҡа хәтлем: биштәрҙәрен төйнәп, сумаҙандар һөйрәп, аэропортҡа килеп тула ине халыҡ. Кем - Төркиәгә, кем - Египетҡа, тормош ҡайнап торор ине. Хәҙер нисектер...

Хәйер, туристар аҡсаһына йәшәп өйрәнгән байтаҡ илдәр күптән үк ял итеүселәр өсөн сиктәрен асыҡ тип иғлан итә лә башланы инде: шул уҡ Төркиә, Египет, Тунис, Мексика, Болгария, Германия, хатта ки Испания менән Италия һәм башҡалар. Ә бына Кипр, Греция, Таиланд, Ғәрәп Эмираттары, Бөйөк Британия илдәрендә туристар өсөн бер ни тиклем сикләүҙәр булып торһа ла июлдә уларҙың да был йүнәлештә эшләй башлауы көтөлә. Туристар ҡаршыларға йыйынған илдәрҙә ҡунаҡханалар, кафе, рестарандар элиталы хеҙмәт күрһәтергә әҙерләнә, пляждар тәртипкә килтерелә. Ә шулай ҙа беҙҙең Рәсәй ялһөйәрҙәре сит тарафтарға бигүк ашыҡмай шикелле был юлы, бына мәслихәт! Шулай булмай, аңы, башы бар кеше күрҙе бит: коронавирус арҡаһында ниндәй хәлгә ҡалды ситкә йөрөргә яратыусылар. Ҡайта алмай ҡамалып, күрмәгәндәрен күреп, дәүләт ярҙамында саҡ-саҡ ҡайтып йығылдылар ҙа баһа! Әҙ булдымы шул? Бөтөн Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге (ВЦИОМ) мәғлүмәттәре буйынса, һорау бирелгән кешеләрҙең 80 процентҡа яҡыны быйыл йәй ялын өйҙә йә дача-баҡсаларында үткәрергә ниәтләй, имеш. Коронавирус уларҙы аҡылға ултыртҡандыр, тип уйлаһағыҙ, яңылышаһығыҙ, уларҙың аҡсаһы юҡ. Сит илдәрҙә ял итергә ни бары 4-5 процент ҡына "ҡыйыуҙар " теләк белдерә. Рәсәйҙең "Тату-ру" сәйәхәт сервисы компанияһы үткәргән опроста ҡатнашҡандарҙың иһә 46 проценты йәйге ялдан баш тартһа, 14 процент кеше Рәсәйҙә ял итеүгә, ватан туристик маршруттарына өҫтөнлөк бирә. Күптән кәрәк ине, үҙебеҙҙә лә бына тигән ял һәм туризм объекттары бихисап. Рәсәй һәм Башҡортостанда туризмды үҫтереүгә лә тос өлөш булыр ине был, юғиһә, күпме аҡса ситкә китә! Шул уҡ ваҡытта РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы был айҙа ла коронавирустан һаҡланыу саралары күрергә, әллә ни иркенләп китмәҫкә, сит илдәргә сығырға ашыҡмаҫҡа кәңәш бирә. Ысынлап та, йәйҙең йәмле көндәрендә үҙ ерендә, үҙ илеңдә, тәбиғәт ҡосағында ғаиләң менән булырға, ял итергә ҡасан форсат тейә әле? Ҡайһы бер психологтар әйтеүенсә, пандемия осоронда үҙизоляцияла ултырыу, яҡын һәм ҡәҙерле кешеләрең өсөн борсолоу, уларҙы хәстәрләү ғаиләләрҙе берҙәмерәк итте, яҡынайтты. Үкенескә, оҙаҡ ваҡыт тар мөхиткә бикләнеүҙе бәғзе берәүҙәр, киреһенсә, күтәрә алманы, эш айырылышыуҙарға барып етте. Улар хаҡында бынан алдағы һанда яҙғайныҡ инде. Тимәк, бындай ғаиләләрҙең нигеҙе ысын тойғоларға - мөхәббәткә ҡоролмаған тигән һығымтаға килгәйнек.

Нисек кенә булмаһын, теләгәр өсөн дә, былар өсөн дә тағы бер йыйылып ултырып, бер-береһенә изге теләктәр әйтеп, мөнәсәбәттәрҙе нығытып алыр өсөн ваҡытлы һәм урынлы сәбәп - Бөтөн Рәсәй ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө **(8)** бар әле алда. Ауыр сирҙән яфаланған урыҫ кенәзе Петр менән уны дауалап, аяҡҡа баҫтырған, аҙаҡ һөйөклө ҡатыны булып киткән ябай урман эшсеһе ҡыҙы Феврония хөрмәтенә булдырылған был иҫтәлекле дата. Ниндәй генә хәлдәрҙә лә бер-береһенә тоғролоҡтарын, һүрелмәҫ мөхәббәттәрен һаҡлай алған һәм ҡәҙерләй белгән, хатта икеһе бер көндө - 8 июлдә вафат булған был ике ғашиҡтың исемдәре 1547 йылда изге шәхестәр исемлегенә индерелгән һәм халыҡ хәтерендә мәңгелеккә ҡалған. Был көндө бөтөн Рәсәй халыҡтары ла үҙ итеп билдәләй, байрам итә, яңы никахтар теркәлә, изге урындарға барып, ғаиләләр именлеге хаҡына теләктәр теләнә, доғалар уҡыла, мәҙәни саралар үткәрелә, 25 йыл буйы бергә ғүмер иткән өлгөлө ғаиләләр - "Мөхәббәткә тоғролоҡ өсөн" миҙалы һәм тәртипле, тырыш балалар тәрбиәләгәндәре өсөн "Атаәсә даны" ордены менән бүләкләнә.

Балалар тәрбиәләп, уларҙы ысын кешеләр итеп үҫтереү, әйе, ғаиләләрҙең төп бурысы. Һуңғы ваҡытта дәүләт тарафынан да был мәсьәләгә етди иғтибар һәм матди ярҙам саралары бүленә, сөнки илебеҙҙә демография менән бәйле киҫкен хәл килеп тыуҙы. Рәсәй буйынса 2002 йылғы халыҡты иҫәпкә алыу һөҙөмтәһе буйынса илдә 145,2 млн кеше йәшәһә, тағы 8 йылдан 2010 йылғы перепись буйынса был күрһәткес 2,3 миллионға кәмеп, 142,9 млн тәшкил итте. Ә донъя күләмендә, киреһенсә, парадоксаль хәл күҙәтелә: ер йөҙөндә халыҡ һаны йылдан-йыл йылдам рәүештә арта ғына бара. 1987 йылдың 11 июлендә Хорватияның баш ҡалаһы Загребта планетала 5 миллиардынсы бала - Матей Гашпар тыуһа, тағы ла 12 йылдан - 1999 йылда Сараевола 6 миллиардынсы малай Аннан донъяға килде. Тағы 12 йылдан - 2011 йылда донъяла халыҡ һаны 7 миллиардҡа барып баҫты. Халыҡ һанының артыуы менән бәйле планетала климат, экология, тәбиғи ресурстар һәм аҙыҡ-түлек наҡыҫлығы йәһәтенән киҫкен проблемалар барлыҡҡа килә башланы. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы (БМО) мәғлүмәттәренә ҡарағанда, тағы ла 30 йылдан, йәғни 2050 йылға ер шарында кеше һаны 11 миллиардҡа етәсәк. Шуға күрә лә БМО ер йөҙөндә тыуымды контролгә алыу программаһын эшләп, барлыҡ илдәр халыҡтарының, етәкселәренең, донъя йәмәғәтселегенең иғтибарын халыҡ һанын көйләү мәсьәләһенә йүнәлтеү маҡсатында 1989 йылдан Бөтөн донъя халыҡтар көнөн **(11)** иғлан итте һәм уның төп маҡсаты итеп тыуған планетабыҙ именлеген, таҙалығын, тәбиғи ресурстарын һаҡлау, киләсәк быуындар алдында яуаплылыҡ мәсьәләләрен көн тәртибенә ҡуйҙы.

Был айҙа тағы ла Хәрби хәрәкәттәр ветерандары **(1)**, Халыҡ-ара спорт журналистары **(2)**, Бөтөн донъя уфолог **(2)**, Рәсәй Эске эштәр министрлығының ЮХХДИ көнө **(3)**, Халыҡ-ара кооперация **(4)**, Диңгеҙ һәм йылға флоты хеҙмәткәрҙәре **(5)**, Башҡорт авиацияһының тыуған көнө **(7)**, Бөтөн донъя аллергия менән көрәш **(8)**, Бөтөн донъя шоколад **(11)**, Рәсәй почтаһы, Балыҡсы, Бөтөн донъя граждандар авиацияһы бортпроводнигы **(12)**, Металлург **(19)**, Халыҡ-ара шахмат **(20)**, РФ Тикшеренеү органдары хеҙмәткәрҙәре, Сауҙа хеҙмәткәрҙәре **(25)**, Хәрби-диңгеҙ флоты, Парашютсы **(26)**, PR белгесе, Бөтөн донъя гепатит **(28)**, Халыҡ-ара юлбарыҫ **(29)**, Халыҡ-ара дуҫлыҡ **(30)** көндәре һәм айҙың ахырғы көнө Ҡорбан байрамы **(31)** буласаҡ.

**Майайҙа тыуғандар:**

**2 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Абдулхаҡ Игебаевтың тыуыуына - 90 йыл** (1930-2016).

**18 -** сәнғәт эшмәкәре, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының режиссер-ҡуйыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Салауат Итбаевҡа - 75 йәш** (1945).

**20 -** БАССР-ҙың тәүге халыҡ шағиры, башҡорт әҙәбиәте классигы **Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына - 140 йыл** (1880-1934).

**22 -** педагог, 1948-1972 йылдарҙа М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры режиссеры, РСФСР һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, "Почет билдәһе " ордены кавалеры **Шәүрә Мортазинаның тыуыуына - 95 йыл** (1925-2002).

**26 -** йырсы, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Алһыу Бәхтиеваға - 50 йәш** (1970).

**28 -** дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 2004-2013 йылдарҙа РФ Федераль Йыйылыштың Федерация Советы ағзаһы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордены кавалеры **Рудик Исҡужинға - 70 йәш** (1950).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда синоптиктар эҫе һауа торошон фаразлай. Температура +31 градусҡаса күтәрелә. Фаразға ярашлы, 5 июлдә термометр бағанаһы 28 градус билдәһенә тиклем күтәрелә. Урыны менән ҡыҫҡа ваҡытлы ямғыр яуа. Киләһе аҙнала ла ошондай һауа торошо һаҡлана. Эҫе, ҡоро һауа торошо көтөлә, һауа температураһы 27-31 градус була.

✓Башҡортостанда кешеләрҙең урманда юғалыу осраҡтары йышайҙы. Был еләк, бәшмәк йыйыу миҙгеле менән бәйле. Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Республикаһының Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров әйтеүенсә, уҙған аҙнала Система-112-гә урманда юғалыусылар тураһында туғыҙ хәбәр килгән. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарына ошо хәлгә иғтибар итергә кәңәш бирҙе.

✓15 июлдә Рәсәй кинотеатрҙарында фильмдар күрһәтә башлауҙары ихтимал. Был хаҡта 25 июндә Волгоградҡа эш сәфәре барышында Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Ольга Любимова белдерҙе. Ул кинотеатрҙарҙы асыу хаҡында ла Роспотребнадзор менән даими эш алып барылыуын билдәләне. Ҡәтғи ҡарар комплекслы, илдең ҙур ҡалаларындағы эпидемиологик хәлдән сығып ҡабул ителә.

✓2019 йылдың төп ҡаҙаныштарының береһе - халыҡтың ғүмер оҙайлығы артыуы, тине Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Андрей Назаров Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары алдындағы сығышында. Көтөлгән ғүмер оҙайлығы бер йылда 6,5 айға артып, 72,64 йәш (2018 йылда - 72,06) тәшкил иткән. Ошондай динамика һаҡланһа, республика биш йылда тәүге унау иҫәбенә инеүе ихтимал, тип билдәләне вице-премьер.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ултырышында билдәләнеүенсә, барлыҡ сәбәптәрҙән үлем коэффициенты 1000 кешегә 12,1 тәшкил иткән һәм 2018 йыл менән сағыштырғанда 2,4 процентҡа кәмегән. Былтыр миграция иҫәбенә кәмеү - 4 216 кеше. 2018 йылда ул яҡынса 1,5 тапҡырға күберәк булған һәм 6 648 кеше тәшкил иткән.

✓Былтыр "Демография" милли проекты сиктәрендә 16 мең ғаилә 2 миллиард 240 миллион һум суммаһына беренсе бала тыуыуға бәйле һәм өсөнсө йәки артабанғы тыуған һәр балаға айлыҡ түләү алды. Бынан тыш, балалы ғаиләләргә социаль ярҙамды финанслау күләме 2019 йылда 6,7 миллиард һум тәшкил итте.

✓ *Яңы законда Башҡортостанда баҡсасылыҡ ширҡәттәрен йылылыҡ, электр энергияһы, һыу, газ, ҡаты яғыулыҡ менән тәьмин итеүҙе ойоштороу күсәк башҡарма власть органдары яғынан баҡсасылыҡҡа ярҙам саралары яҙылған.*



*ҠЫҪҠАСА*

# БАҠСАСЫҒА...

✓ **Дәүләт Йыйылышы депутаттары "Башҡортостанда граждандарҙың үҙ ихтыяждары өсөн баҡсасылыҡ алып барыуы тураһында" закон ҡабул итте, уға ярашлы баҡсасыларға республика яғынан ярҙам саралары ҡаралған.** Яңы законда Башҡортостанда баҡсасылыҡ ширҡәттәрен йылылыҡ, электр энергияһы, һыу, газ, ҡаты яғыулыҡ менән тәьмин итеүҙе ойоштороу, һыу бүлеү, комплексы кадастр эштәрен финанслау күсәк башҡарма власть органдары яғынан баҡсасылыҡҡа ярҙам саралары яҙылған. "Башҡарма власть органдары ошо законды үтәү барышында үҙҙәренең документтарын әҙерләүгә тотонһон өсөн ҡарарҙы мөмкин тиклем оператив ҡабул итергә тырыштыҡ. Төп маҡсат - законда ҡаралған нормалар мөмкин тиклем тиҙерәк эшләй башлаһын, халыҡ баҡсасылыҡ тармағына реаль ярҙамды тойһон", - тип белдерҙе Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Уның һүҙҙәренсә, Башҡортостанда - 500 мендән ашыу баҡсасы ғаилә, был бөтә халыҡтың 40 проценты самаһы тигән һүҙ.

✓ **1 июлдән Башҡортостан биләмәһендә алкоголде ваҡлап һатыуҙың яңы тәртибе ғәмәлгә индерелде. Депутаттар июндәге пленар ултырышта ошо продукцияны һатыу тураһында законға үҙгәрештәрҙе хупланы.** "Алкоголде ваҡлап һатыуҙы көйләгән закон һығылмалыраҡ була бара, - тип белдерҙе Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Әлегә тиклем беҙҙә киске сәғәт 10-дан иртәнге 10-ға тиклем алкоголь һатылмай ине. 1 июлдән федераль кимәлдә билдәләнгән сикләү генә ғәмәлдә була: төнгө 11-ҙән иртәнге 8-гә тиклем. Кәрәк булған осраҡта Башҡортостан Республикаһының Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты режимға төҙәтмәләр индерә һәм урындағы сикләүҙәр билдәләй ала. Был закон ведомствоға тейешле вәкәләттәр бирҙе. Йәмәғәт туҡланыуы предприятиеларына тыйыуҙар, элекке күсәк үк, ҡағылмай".

✓ **2019 йыл менән сағыштырғанда, Башҡортостанда бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа федераль ярҙам күләме өс тапҡырға артып, 992 миллион һумға еткән, тип белдерҙе Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты рәйесе Римма Бойцова хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә.** Ведомство башлығы һүҙҙәренсә, ошо күрһәткес буйынса Башҡортостан, Мәскәүҙән тыш, илдең ошондай әһәмиәтле федераль аҡса алған берҙән-бер төбәге. Бәләкәй эшҡыуарлыҡ субъекттарына ярҙам буйынса милли проектты тормошҡа ашырыу барышы тураһында һөйләгәндә, Римма Бойцова быйыл аҡса индустриаль парктарҙы үҫтереүгә, эшмәкәрлектең социаль әһәмиәтле төрҙәренә менән шөғөлләнгәндәргә, шулай уҡ "Минең бизнесым" консультация үҙәктәрен ойоштороуға йүнәлтелеүен билдәләне. Әйтәйек, 2020 йылда ғына Салауатта, Октябрьскийҙа һәм Сибайҙа эшҡыуарҙар өсөн өс яңы үҙәк булдырыу планлаштырылған.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ТАУЫШ БИРҘЕК!




**Эпидемиологик хәлде һәм халыҡтың хәүефһеҙлеген иҫәпкә алыу кәрәк булғанлыҡтан, рәсәйҙәр аҙна буйына - 25 июндән 1 июлгә тиклем тауыш бирергә мөмкин тигән ҡарар ҡабул ителгәйне. 1 июлдә Рәсәй Конституцияһына төҙәтмәләр буйынса тауыш биреүҙең төп һәм һуңғы көнө тамамланды. Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһында Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына төҙәтмәләр өсөн тауыш биреү йомғаҡтары буйынса яңы мәғлүмәттәр иғлан ителде.**

Республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Илона Макаренко һүҙҙәренсә, 2 июлгә иртәнге сәғәт 9-ға 2 миллион 763 кеше тауыш биреүҙә ҡатнашты, был 90,83 процент тәшкил итә. Ҡалаларҙа һайлаусыларҙың килеүе - 88,28 процент, районларҙа 93,73 процент тәшкил итте. Республиканың баш ҡалаһында әүҙемлек - 86,85 процент. Шулай уҡ республикала һайлаусыларҙың Конституцияға төҙәтмәләр буйынса тауышы нисек бүленеүе билдәле булды. Илона Макаренко әйтеүенсә, 2 миллион 448 мең кеше, йәғни 88,68 процент "эйе" тип тауыш бирҙе. Өфөлә тауыш биреүселәрҙең 83 проценты, ҡалаларҙа - 86,73 проценты, районларҙа 91,95 проценты илдең Төп законына үҙгәрештәр өсөн үҙ фекерен әйтте. Яҡынса 293 мең кеше, 10,6 процент, "юҡ" тип тауыш бирҙе. Өфөлә һайлаусыларҙың 16 процентҡа яҡыны Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына төҙәтмәләргә ҡаршы булыуын белдерҙе.

Торған урыны буйынса ғаризалар буйынса 30 мендән ашыу кеше тауыш бирҙе, йәки был - "Мобиль һайлаусы" механизмын ҡулланыусыларҙың дөйөм һанынан 78,8 процент. Тауыш биреү өсөн бинанан ситтә йәки өйҙә тауыш биреүҙә ҡатнашыусылар һаны тауыш биргәндәр һанынан 15 проценттан ашыу тәшкил итте. Шулай уҡ һаулыҡ мөмкинлектәре сикле граждандарҙың 84,77 проценты тауыш бирҙе.

"Беҙҙең республика һәр саҡ юғары сәйәси һайлау мәҙәниәте һәм әүҙем аңлылығы менән айырылып торҙо. Был юлы ла шулай булды, - тине республика Башлығы Радий Хәбиров. - Өҫтәүенә, беҙ хатта коронавирус инфекцияһы шарттарында ла халыҡ тауыш биреүгә килһен өсөн өҫтәмә дәртләндереү саралары күрҙек. Мәҫәлән, фермерҙар ҡалаларға килеп, ҙур йәрминкәләр ойоштороҙо..." Радий Фәрит улы махсус рәүештә Үҙәк һайлау комиссияһынан ялыуҙар тураһында белешмә әҙерләүен һораны, әммә ундай осраҡтар булмай. "Һигеҙ мөрәжәғәт бар, улар ялыу түгел. Ҡайҙалыр тауыш биреү үҙенсәлектәре менән ҡыҙыҡһыналар, ҡайҙалыр консультация алалар. Йәғни мөрәжәғәттәр аҙ була. Тауыш биреү асылы ла - үҙгәрештәрҙең йөкмәткеһе, миненсә, бик һыңғай. Тауыш биреүҙең өс көнгә һуҙылыуы ла бик мөһим булды. Был санитар-эпидемиология ҡағиҙәләрен үтәүгә ярҙам итте, сөнки беҙ әле һаман да ауыр шарттарҙа йәшәйбеҙ", - тине республика Башлығы.

# ҺЕҘ БЫНДА КӘРӘК!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Йәштәр көнөнә бағышланған "Беҙ бергә" байрам фестивалендә ҡатнашты. Беренсе тапҡыр был сара Ағиҙелдең төҙөкләндерелгән яр буйында үтте.**

Төбәк башлығы фестивалдең интерактив, атап әйткәндә, спорт, музыка, шиғриәт һәм башҡа тематик майҙансыҡтарында булды, парашюттан һикереүселәрҙең авиашоуын ҡараны. Республика Башлығы йәштәр байрамына буш ҡул менән килмәгәйне: был көндө бер нисә йыл докта тороп тор-




лай башлаған "Чайка" теплоходы ҡабаттан халыҡ мәнфәғәтендә эшләй башланы - ирекмәндәр беренселәрҙән булып теплоходта өс сәғәт Ағиҙелдә иңләне. Шулай уҡ Радий Фәрит улының Өфөнөң тарихи үҙәгендә - Пушкин урамы, 86 адресы буйынса урынлашҡан бинаның Йәштәр һәм ирекмәндәр йорто буласағы тураһындағы белдереүен дә йыйылыусылар шатланып ҡабул итте. Билдәләнеүенсә, бынан һуң Йәштәр көнөн Ағиҙел яры буйында уҙғарыу ҙа традицияға индереләсәк. Радий Хәбиров коронавирус осоронда әүҙемлек күрһәткән йәштәргә һәм ирекмәндәргә дәүләт наградалары, рәхмәт хаттары тапшырып: "Ысынлап та, беҙҙең йәштәр - иң шәбе. Мин һеҙҙең менән ғорурланам. Эшемдең мәғәнәһе - тап һеҙҙең өсөн, һеҙҙең үҫешегеҙ, Рәсәйҙең алдынғы юғары уҡыу йорттарында белем алып, һуңынан ҡабаттан кире ҡайтыуығыҙ өсөн шарттар булдырыу. Сөнки был - тыуған ил, сөнки бында һеҙҙе һәр саҡ көтәбеҙ. Иң мөһиме - һеҙ бында кәрәк. Минең теләгем - беҙ Башҡортостанда йәшәүебеҙ менән ғорурланырға өйрәнергә тейеш".

Бүләкләү тантанаһынан һуң "Башҡортостан йәштәре - Рәсәйҙең киләсәге" девизы аҫтында импровизацияланған токшоу ойошторолдо. Төбәк Башлығы һорауҙарға яуап бирҙе, ә ирекле микрофонға һәр кем килеп, теләгән һорауын бирә алды. Йәштәрҙе ҡыҙыҡһындырған өлкәләр киң ҡырлы булып сыҡты: КВН уйындары аша башҡорт телен үҫтереү, ауылда йәштәр хәрәкәттәрен реформалау, уҡыусыларҙың актив ялын үткәреүгә ярҙам итеү, аэроклубтар системаһын тергеҙеү һәм парашют спортын пропагандалау, Өфөлә велосипед юлдарын булдырыу өсөн инвесторҙар эҙләү һәм башҡалар.

# БЕР ЙӘШТӘН БАШЛАП...

**Рәсәй Премьер-министры Михаил Мишустин 16 йәшкә тиклемге балаһы булған ғаиләләргә бер тапҡыр бирелә торған 10 мең һумлыҡ түләү тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы.**

Июндә түләү алғандарға ул июлдә автоматик рәүештә күсерелә. "Өс йәшкәсә балаларға айлыҡ түләүҙәр йәки 3 йәштән 16 йәшкә тиклемге балаларға бер тапҡыр бирелә торған түләү алған ата-әсәләргә яңынан ғариза бирергә кәрәкмәй. Уларға аҡса Пенсия фонды ҡарамағында булған мәғлүмәттәр нигеҙендә күсерелә", - тип билдәләнә Министрҙар кабинетының матбуғат хеҙмәте белдереүендә. Кемдәр быйыл пособие алып өлгөрмәгән, 1 октябргә тиклем ғариза тапшырырға тейеш. Улар июнь-июль өсөн түләүҙәрҙе бер юлы ала.

Рәсәй Президенты Владимир Путин балалы ата-әсәләргә апрелдән июнгә тиклем өс йәшкә тиклемге һәр балаға 5 мең һум түләргә тәҡдим иткәйне. Өс йәштән 16 йәшкәсә бала тәрбиәләгән ғаиләләр өсөн 10 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү ҡаралды. 23 июндә Владимир Путин рәсәйҙәргә телемөрәжәғәтендә икенсе тапҡыр 10 мең һум күләмендә пособие түләү тураһында әйтте. 16 йәшкә тиклемге балаһы булған бөтә ғаиләләргә лә ошондай финанс ярҙамы күрһәтелә.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Республика Хөкүмәтендә үткән сираттағы "Транспорт сәғәте"ндә Өфөнөң юл-транспорт инфраструктураһы объекттары төҙәлешө тикшерелде. Әлеге ваҡытта иң ҙур проекттарҙың береһе булып Салауат Юлаев проспектының Жуков урамынан алып Сельская Богородская урамына тиклемге араунаҡ тора. Альтернатив вариант - Ватутин урамынан алып Интернационал урамына тиклем. Белгес-проектлаусылар проспекттың икенсе вариант буйынса оҙонайтыу өҫтөнлөгөн билдәләй.

✓Башҡортостанда 25 июндән "Мотоцикл" иҫкәртеү операцияһы башланды. Сара мотоцикл, скутер һәм мопед водителдәренең юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген боҙоуын асыҡлауға йүнәлтелгән. Быйыл биш айҙа мототранспорт водителдәре ҡатнашлығында 33 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, уларҙа ике кешенең ғүмере өҙөлгән, 38-е төрлө йәрәхәттәр алған. Мотоцикл водителдәре ғәйебе менән 28 юл фажиғәһе булған.

✓Регина Мөәрисова Өфө балалар филармонияһы директоры итеп тәғәйенләнде. Филармонияның 53 ижади коллективында һәм клуб ойошмаларында 3-тән 24 йәшкә тиклемге 1100-ҙән ашыу ҡатнашыусы шөғөлләнә. Балалар филармонияһы төрлө жанр йүнәлешендәге бейеү коллективтарын (эстрада, халыҡ, бал), йыр студияларын, "Сулпан" өлгөлө цирк коллективын, "Тылсымлы рампа" халыҡ театрын һәм башҡа коллективтарҙы берләштерә.

✓Өфөлә Йәһүд милли-мәҙәни үҙәге территорияһында "Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәләк булған яугирҙар һәм Холокост ҡорбандары иҫтәлегенә" һәйкәле асылды. Һәйкәл 3,5 метрлыҡ өс таш колоннанан һәм ватылған мемориал (йәһүд шәмдәле) торған монументаль композицияны тәшкил итә. Мемориал Башҡортостан йәһүдтәре инициативаһы буйынса һәм йәһүд общинаһы аҡсаһына төҙөлгән.

✓Был миҙгелдә "Айғыр" турпоезының составы пассажирҙар хәүефһеҙ дистанцияны һаҡлай алһын өсөн өҫтән биш вагонға тиклем арттырыла, тип хәбәр иттеләр Куйбышев тимер юлының Башҡортостан бүлексәһенән. Миҙгелле "Айғыр" поезы 30 майҙан ял һәм байрам көндәрендә йөрөй.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Һәр имтихан алдынан бина дезинфекция саралары ҡулланып йыуыла. Барлыҡ ойоштороусылар шәхси һаҡланыу сараларын ҡуллана, температураһы юғары һәм респиратор ауырыу билдәләре булғандар имтиханға индерелмәй.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ТҮҘЕРБЕҘ. КҮНЕГЕРБЕҘ. ӨЙРӘНЕРБЕҘ.

**Тормош битлектәр артына йәшеренеп булһа ла дауам итә. Был ҡәһәрле тажлы вирус сигенергә уйламай, шуға ҡарамаҫтан, ҡыҫҡа ғына миҙгел осоронда барлыҡ планлаштырылған эштәрҙе лә атҡарып сығырға, пандемия индергән үҙгәрештәрҙе күҙ уңында тотоп, барлыҡ йүнәлештәргә лә үҙгәрештәр индерергә кәрәк. Өфө ҡала хакимиәтенең сираттағы видеобәйләнеш форматындағы кәңәшмәһе лә ошо арала мөһим булған тармаҡтарға иғтибар йүнәлтте.**

Мәҫәлән, әлеге ваҡытта сығарылыш синыфы һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн иң мөһим мәл етте - юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә теләүселәр Берҙәм дәүләт имтиханы тапшыра. Был өлкәләге хәл-торош менән Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова таныштырҙы. Быйыл мәктәпте 5205 11-се синыф уҡыусыһы тамамлаған. 25-26 июндә уҡыусылар ҡатнашлығынан тыш төбәк күнекмә имтихандары үткәрелгән, шулай уҡ видеокүҙәтеү системаһы, техника һәм белгестәрҙең әҙерлеге, имтихан тапшырыу пункттарының эш алгоритмы ойошторолоуы, 29 июндә һәр пунктта эпидемиологик хәүефһеҙлек сараларын үтәү тикшерелгән.Сығарылыш синыфы уҡыусыларының имтихан тапшырыу предметтарын һайлауында артыҡ үҙгәрештәр юҡ. Математиканы - 3395, йәмғиәтте өйрәнеү фәнен - 1993, физиканы 1456 уҡыусы һайлаған. Мәктәптәр базаһында 25 БДИ ҡабул итеү пункты әҙерләнгән. Улар тейешле йыһаздар менән тәьмин ителгән. Һәр имтихан алдынан бина дезинфекция саралары ҡулланып йыуыла. Барлыҡ ойоштороусылар һәм йәмәғәт күҙәтеүселәре шәхси һаҡланыу сараларында буласаҡ, имтиханға ингәндә уҡыусыларҙың тән температураһы үлсәнеп, температураһы юғары һәм респиратор ауырыу билдәләре булғандар имтиханға индерелмәй.

Йәй - сығарылыш синыфы уҡыусылары өсөн генә түгел, коммуналь хеҙмәттәр өсөн дә ҡыҙыу осор, сөнки ошо бер нисә ай эсендә юлдарҙы ремонтлап, соҡор-саҡырҙы ямап, тирә-яҡты төҙөкләндереп һәм башҡа ремонт эштәрен башҡарып өлгөрөргә кәрәк. Өфө ҡалаһының Заказсы һәм ҡаланы төҙөкләндереү буйынса техник күҙәтеү хеҙмәте директоры Артур Мирзоев юлдағы соҡорҙарҙы ремонтлауҙың барышы менән таныштырҙы. Быйыл 15 февралдән төҙөкләндереү менән шөғөлләнеүсе муниципаль учреждениелар 27169 тонна асфальт-бетон ҡатнашма алып, 163284 квадрат метр майҙанды ремонтлаған. Ошо осорҙа ҡатнашма 22 тапҡыр тикшерелгән, уларҙың 15-е ГОСТ талаптарына тура килгән, 7-һендә тап килмәгән. Сифатһыҙ тауар һәм хеҙмәт күрһәтеүселәргә ҡарата протоколдар төҙөлгән. Бындай контроль техник күҙәтеү хеҙмәткәрҙәре тарафынан тәүлек әйләнәһенә алып барыла. ГОСТ талаптарына тап килмәгән һәм технологияны боҙоп башҡарылған эштәр ҡабул ителмәй.

Быйыл шул тажлы зәхмәт арҡаһында байрам саралары ла, мәҙәни саралар ҙа туҡтатылды. Әммә был мәҙәниәт эшмәкәрлеге һүнеп ҡалды тигәнде аңлатмай. Хакимиәттең Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы начальнигы Шамил Абдраҡовтың сығышы ла ошо фекерҙе раҫланы. Баш ҡалала "Мәҙәниәт" милли проекты тормошҡа ашырылыуын дауам итә. Уның сиктәрендә балалар музыка мәктәптәре музыка ҡоралдары менән тулыландырыла. Бынан тыш, йылдың тәүге яртыһында Өфө балалар филармонияһында капиталь ремонт эштәре дауам иткән. "Ижад кешеләре" проектын тормошҡа ашырыу барышында мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениелары белгестәре белемен камиллаштырған. Бөгөнгә 109 кеше өҫтәмә һөнәр алған. Заман менән бергә атлайым тиһәң, тормошобоҙҙоң һәр өлкәһенә цифрлы технологияларҙың үтеп инеүен ҡабул итергә кәрәк. "Цифрлы мәҙәниәт" проекты ҡурсаланыу осоронда үҙенең әһәмиәтлелеген күрһәтте лә инде. Шуға ла артабан да мәҙәниәт өлкәһенә цифрлы технологиялар индереү дауам итәсәк. Әлегә тиклем "Мәҙәниәт" интернет порталына инеү өсөн 5 нөктә булһа, тағы ла өс нөктә булдырылған. Бынан тыш, бер нисә онлайн сара үткәрелгән, киләсәктә шулай уҡ музей сараларын да онлайн күрһәтеү планлаштырыла. Киләһе йылда иһә Йәш тамашасы театры "Мәҙәниәт" милли проектының "Реновация" йүнәлеше буйынса конкурста ҡатнашырға ниәтләй.

Барыһына ла түҙербеҙ, күнегербеҙ, өйрәнербеҙ, тик коронавирус зәхмәте генә һәр ҡайһыбыҙҙы урап үтһен.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҠЫҪҠАСА*

## ПОЧЕТЛЫ ГРАЖДАНДАР...

✓ **Ҡала советының 62-се ултырышында Өфө ҡалаһының яңы Почетлы граждандарына таныҡлыҡтар тапшырылды.** Улар - Өфө һәм Стәрлетамаҡ Митрополиты Никон (Николай Васюков), Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған төҙөүсеһе Рәбис Сәлихов, РСФСР-ҙың халыҡ артисы, актер Фидан Ғафаров. Тантана һуңында бүләкләнеүселәргә мөрәжәғәт итеп, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин: "Фидан Сафа улы беҙҙе тағы ла ижады менән ҡыуандырыр, Рәбис Сәлих улы тағы ла бик күп уңайлы йорттар төҙөр, ә рухани һәр саҡ беҙҙе рухи йәһәттән нығытып, беҙҙең барлыҡ сараларыбыҙҙа ла әүҙем ҡатнашыр тип өмөтләнәм. Рәхмәт һеҙгә", - тине. "Өфө ҡалаһының почетлы гражданины" исеме 1969 йылдан бирелә. Әлеге ваҡытта уға 44 кеше лайыҡ булған, шуларҙың 18-е - иҫән.

✓ **Бөгөн парковка булараҡ ҡулланылған Совет майҙанында реконструкция эштәре башланыуға бәйле, эргә-тирәлә альтернатив парковка урындары булдырыу эше башланған.** Ул Ленин, Октябрь Революцияһы, Цюрупа, Пушкин урамдары менән сиктәш кварталда урынлаштырыласаҡ. Проектҡа ярашлы, яңы парковка 1010 машина һыйҙырышлы буласаҡ. Әлеге ваҡытта проект ҡала хеҙмәттәре менән килешеү этабын үтә. Тәүҙә парковка Совет майҙанының аҫтында буласаҡ тип планлаштырылһа ла, һуңынан был идеянан баш тартып, ер өҫтөндәге күп ҡатлы паркинг вариантына өҫтөнлөк бирелә. Өфөлә бындай объекттар сауҙа үҙәктәре, бизнес-үҙәктәр эргәһендә төҙөлә һәм үҙенең һөҙөмтәлелеген күрһәтә.

✓ **Коронавирус эпидемияһы һәм уға бәйле сикләүҙәр иҡтисадҡа кире йоғонто яһаны, һөҙөмтәлә хеҙмәт баҙары ла зыян күрҙе.** Өфө ҡалаһының Халыҡтың мәшғүллек үҙәгенән белдереүҙәренсә, әгәр йыл башында баш ҡалала бер эшһеҙгә 4 вакантлы урын тура килһә, бөгөн 2 эш урынына 3 кеше дәғүә итә. Йыл башынан эшһеҙҙәр һаны 21535 кешегә артҡан, мәшғүллек үҙәгендә 26587 кеше иҫәптә тора. Вакансиялар һаны 1334 урынға кәмегән һәм әлеге ваҡытта хеҙмәт биржаһында 19544 эш урыны бар. Хеҙмәт баҙарындағы хәл-торошто тотороҡландырыу маҡсатында Рәсәй һәм Башҡортостан хөкүмәттәре, муниципалитеттар предприятиеларҙың һәм эшҡыуарҙарҙың эшмәкәрлегенә ярҙам итеү буйынса көрсөккә ҡаршы саралар булдыра. Улар финанс, кредит һәм башҡа ярҙам. 1 марттан һуң эш урынын юғалтҡан граждандарға юғары күләмдә пособие билдәләнә. Шулай уҡ эшкә урынлаштырыу, уҡытыу һәм һөнәри йүнәлеш биреү буйынса саралар күрелә.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## АҠСАҺЫ БУЛМАҺА НИ...

**Башҡортостан водителдәренә юл хаҡын түләргә аҡсаһы булмаған балиғ булмаған пассажирҙарҙы юлда төшөрөп ҡалдырыу тыйыла.**

Был туралағы закон проекты беренсе уҡыуҙа ҡабул ителгән. Был хаҡта РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров хәбәр итә. "Был закондың ҡабул ителеүе балаларҙы юл уртаһында, хәүеф аҫтында ҡалыуына, туңыуҙан, психологик стресҡа дусар булыуҙан һаҡлаясаҡ. Шулай уҡ пассажирҙарҙы туҡталҡа булмаған урында төшөрөп ҡалдырыу ҙа тыйыла", - ти ул. Түләү мөмкинлеге булмаған пассажир юл уртаһында түгел, ә яҡындағы туҡталышта төшөрөлөргә тейеш. Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодекстың 11.33-сө, РФ Енәйәт кодексының 125-се статьяһында ла бындай ғәмәл өсөн яуаплылыҡ ҡаралған. Быға тиклем Рәсәй Хөкүмәте билетһыҙ балаларҙы транспорттан төшөрөп ҡалдырыу тыйылыуы тураһындағы закон проектын хуплағайны.

## КҮП БАЛАЛЫЛАР...

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары Рәсәй Дәүләт Думаһына Хеҙмәт кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында инициатива менән сығырға уйлай.**

Атап әйткәндә, улар өс йәки унан күберәк балиғ булмаған балалы ата-әсәләргә йыл һайын үҙҙәре теләгән ваҡытта түләүле ялға китеү мөмкинлеге биреүҙе законлаштырыуҙы тәҡдим итә. "Хәҙер бындай норма 12 йәшкә тиклемге балиғ булмаған балалы ғаиләләр өсөн генә ғәмәлдә. Беҙ быны өлкән балаға 18 йәш тулғанға тиклем оҙайтырға тәҡдим итәбеҙ, - ти парламент рәйесе Константин Толкачев. - Бик йыш кешеләр үҙҙәренә уңайһыҙ ваҡытта ял алырға мәжбүр. Был уларҙы ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлауҙағы мөһим факторҙан - балалары менән бергә ял итеүҙән мәхрүм итә. Рәсәй ҡануниәте балаға 12 йәш тулғандан һуң уның статусы нисек буласағын бер нисек тә күҙалламай. Әгәр күп балалы ғаиләнең статусы өлкән бала 18 йәшкә еткәнгә тиклем һаҡланһа, бындай ғаиләләргә дәүләт тарафынан булдырылған өҫтөнлөктәр ҙә һаҡланасаҡ".

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Быуындарға тоҙ ултырһа

❖ Үт ҡыуығы, бөйөр һәм быуындарға ултырған тоҙҙарҙы сығарыу өсөн шифалы ромашка, бәпкә үләне (спорыш), һары мәтрүшкә, баҫыу ҡырҡбыуыны (хвощ полевой) үләндәрен, фасоль ҡабығы (створки фасоли), гөлйемеш емешен тигеҙ миҡдарҙа алырға. Йыйылманың бер ҡалағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм һығырға. Таҙа быяла һауытҡа бушатып ҡойоп алырға. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда йылы көйөнсә эсергә. Дауаланыу мөҙҙәте 1 ай, шунан 1 айға туҡтап тороп, ҡабатларға.

### Күҙ ҡабағы себореяһы

❖ Икенсе төрлө уны "чешуйчатый блефарит" тип тә йөрөтәләр. Күҙ ҡабағының сите шешеп, ҡысыта һәм керпек тирәһендә ҡауаҡҡа оҡшаған ҡабыҡтар барлыҡҡа килә. Был ауырыуҙан кейәү үләненән (чабрец) әҙерләнгән төнәтмә менән күҙҙе йыуыу ярҙам итә. 1 ҡалаҡ киптерелгән кейәү үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Күҙҙе йылы төнәтмә менән йыуырға. Кискеһен күҙҙе йыуғас, мамыҡлы таяҡса ярҙамында күҙ ҡабағының осона дегәнәк майы һөртөргә. Бынан тыш, түбәндәге рецепт буйынса календула төнәтмәһе яһарға: 1 ҡалаҡ календула сәскәһенә 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Мамыҡ дискыларҙы йылы төнәтмәлә сылатып, күҙ ҡабағына баҫырға һәм 3-5 минут тоторға. Ауырыу тиҙерәк бөтһөн өсөн 1 ҡалаҡ гөлйемеште термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә һәм төнгөлөккә ҡалдырырға, иртәнсәк һөҙөргә. Төнәтмәгә йүкә балы ҡушып, көн дауамында йотомлап эсеп бөтөрөргә.

### Йөрәк ауырыуҙары

❖ Йөрәк ауырыуҙарынан шайтан таяғының (татарник колючий) кипкән сәскәлектәрен ваҡлап (2 ҡалаҡ), 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ябып 3 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Килеп сыҡҡан төнәтмә бер тәүлеккә етә, йөрәк сирҙәрен дауалағанда уны дүрткә бүлеп көн дауамында яртышар стаканлап эсергә. Өҫтәп, иртәнсәк һайын бер теш һарымһаҡ ашарға була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Башҡортостандың туризм буйынса комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов белдереүенсә, республикала 1 мең мәмерйәләрҙең ни бары 30 проценты ғына өйрәнелгән. Йыл һайын 1-2 яңы мәмерйә асыҡлана.*

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

ХХ быуат дауамында оҫтабикәләрҙең стилләштерелгән орнаменттан ысынға тап килгәнерәк, күп төҫлө биҙәктәргә күсә барышы күҙәтелә. Ҡала мәҙәниәте йоғонтоһон Н. В. Бикбулатов башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ҡатлап шыма ҡайыу һәм сүпләп сигеү (стебельчатый шов) алымдарын үҙләштереүе менән аңлата. Шул уҡ ваҡытта, хатта ХХ быуат уртаһында ла, бер ҡат элмә сылбыры менән ҡайылған әйберҙәр осраған (ғәҙәттә, таҫтамалдар): ҡыҙыл ерлектә ҡайманың сикте билдәләгән тар ғына һыҙаттары араһында стилләштерелгән, йыш ҡына бер төҫтәге (аҡ, һары), киң биҙәк һыҙаты урынлашҡан.

Силәбе башҡорттарының ҡабартма ҡайыу һәм тығыҙ ҡыя селтәр ҡулланып яһалған нағыштарында, көнкүреш әйберҙәрендә һәм орнаменттың үҙәктәш композицияһында ҡаҙаҡтар менән бик күп уртаҡлыҡтар күҙәтелә. Һүҙ ареал йәһәтенән яҡынлыҡ тураһында барыуы мөмкин, унын артында һуңғы быуаттарҙа күршеләш йәшәгән халыҡтарҙың ижади бәйләнеше тора. Биҙәктең үрем рәүешендә ситтәр буйлап, тауар уртаһына түңәрәк йәки венок булып урынлашыуы, сәскә һәм япраҡтарҙы сағылдырыу алымы (йоморо йәки осло, асыҡ йәки ябыҡ тажлы), кәкерсәк һәм оя биҙәктәрҙән торған өҫтәмә элементтар ҡаҙаҡтарҙан тыш, ҡырғыҙ, үзбәк, төркмәндәрҙең ҡабартма ҡайыуында күҙәтелә.

Шулай итеп, Урал аръяғы башҡорттары көнсығыш төркөмдәренең бөтә төр ҡабартма ҡайыуҙары теге йәки был дәрәжәлә Урта Азия һәм Ҡаҙағстандың иртә йәки һуңғы осор ҡайыу традициялары менән уртаҡлыҡ барлығын күрһәтә.



*Кейәү яҫтығы тышындағы биҙәк (Силәбе өлкәһе). 1972*



*Шаршауҙағы үҫемлек биҙәге (Силәбе өлкәһе) Автор фотоһы. 1972*



*Ашъяулыҡтағы нағыш. Киң һәм ҡуш элмәле ҡайыу (Силәбе өлкәһе, Арғаяш районы, Дәүләтбәй ауылы). Г.И. Мөхәмәтшин һүрәте. 1959*



*Ҡабартма ҡайыулы ашъяулыҡтағы зооморф орнамент (Силәбе өлкәһе). 1972*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*КӨНАУАЗ*

**Был аҙнала Өфө ошо атамалы Халыҡ-ара урбанистика форумы үҙәгенә әүерелде. 800-гә яҡын теркәлеүсенең яртыһы форумда - шәхсән, ҡалғандар онлайн, шул иҫәптән донъяның 13 иленән 25 сит ил спикеры ҡатнашты. Спикерҙар: РФ фән һәм юғары белем министры Валерий Фальков, РФ Дәүләт Думаһы Рәйесе урынбаҫары Ирина Яровая, абруйлы эксперттарҙың береһе Сергей Капков һ.б. булды. Форумды ҡала территорияларын төҙөкләндереү һәм туризм өлкәһе буйынса - 5, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһы менән Мәскәү ҡалаһының туризм комитеты һәм Мәскәү урбанистика үҙәге менән килешеү төҙөлдө.**

# "КИЛӘСӘК ТЕРРИТОРИЯҺЫ.

## Евразия йөрәгенән ҡараш"




Төшкә тиклем форумда төрлө төбәктәр һәм илдәр вәкилдәре ҡатнашлығындағы тематик ултырыштар үтте. "Ҡала үҫеше драйверы булараҡ фәнни-белем биреү үҙәге" секцияһында Радий Хәбиров сарала ҡатнашыусыларҙы тәбрикләне. "Тирә-яҡ мөхитте нисек формалаштырыуыбыҙ, граждандар өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыуыбыҙ тураһында фекер алышырға саҡырыуыбыҙҙы ҡабул иткәнегеҙ өсөн рәхмәт", - тине Радий Фәрит улы һәм ошо тематик секцияның иң ҡыҙыҡлы булыуын билдәләне: "Әгәр өс милли проектты - "Мәғариф", "Фән", "Уңайлы мөхит" - университеттар, фән усаҡтары тирәһендә туплarға мөмкин икән, был бик ҡыҙыҡлы. Университеттар, ғөмүмән, ҡалаларҙың үҫеш драйверы булып тора. Университет фәне, уларҙың архитектураһы ҡаланың гармониялы үҫешен билдәләй". Башлыҡтың былай тип белдереүе лә юҡҡа түгел, сөнки форум алдынан Рәсәйҙең фән һәм юғары белем министры Валерий Фальков Республика Башлығы менән бергә Дим районында 5 мең кешегә иҫәпләнгән заманса вуз-ара студенттар кампусы төҙөләсәк майҙанды ҡараны, мәғариф учреждениелары менән танышты. Министр юғары белем системаһын камиллаштырыуҙа төбәктәрҙең ролен көсәйтеү трендын билдәләне: "Төбәктә фән һәм юғары мәктәпте үҫтереүҙең мөһим шарты - Федерация субъекты башлығының шәхсән иғтибары. Был йүнәлеш һеҙҙең өсөн өҫтөнлөклө булыуын күрәм. Башҡортостанда, ысынлап та, ҡеүәтле фәнни-мәғариф комплексы һәм ҙур көс бар, - тине министр һәм республикала Евразия фәнни-мәғариф үҙәге төҙөү идеяһына ыңғай фекер белдерҙе. Осрашыу ваҡытында етәкселәр шулай уҡ республика вуздарына бюджет урындарын арттырыу, быйыл юғары уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙы эшкә урынлаштырыуҙа ярҙам итеү мәсьәләләрен ҡараны.

Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары Андрей Назаров белдереүенсә, форум йыл һайын үтәсәк, был хаҡта РФ Төҙөлөш министрлығы менән килешеүгә өлгәшенгән. Сессияларҙа тәҡдим ителгән практик ҡарарҙар РФ Хөкүмәтенең иҡтисади курсына ярашлы бөгөн үк ҡайһы бер проекттарҙы әҙерләп тормошҡа ашырыу мөмкинлеге бирә. Белгестәр белдереүенсә, форум донъяның һәм Рәсәйҙең иң яҡшы тәжрибәләрен йәмәғәт киңлектәрендә, урындағы проекттарҙа, федераль программалар кимәлендә ҡулланыуға этәргес һәм ҡала именлеге өсөн стимул булыр, тип көтөлә. Ошо күҙлектән баһалағанда, ул Башҡортостан өсөн генә түгел, Рәсәй Федерацияһы өсөн дә мөһим әһәмиәткә эйә.

Форумда ҡала үҫеше төрлө аспекттарҙан ҡаралды. Сарала ҡатнашыусылар коронавирус таралыуы һөҙөмтәһендә илдә эске туризмдың үҫешәсәген күҙаллай. Халыҡ-ара туризм 60-80 процентҡа кәмеүе мөмкин, ә рәсәйҙәрҙең 50 проценты самаһы яңы хис-тойғолар, яңы тәьҫораттар тыуҙырған урындарҙы эҙләй. Башҡортостандың туризм буйынса комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов белдереүенсә, республикала 1 мең мәмерйәләрҙең ни бары 30 проценты ғына өйрәнелгән. Йыл һайын 1-2 яңы мәмерйә асыҡлана. Республиканан ситтә лә яҡшы билдәле Һабантуй байрамы, башҡорт ҡымыҙы, "Урал батыр" эпосы ла туристарҙы ылыҡтырырға, йәғни Башҡортостандың мәҙәни мираҫы халыҡ-ара һәм эске туримзды үҫтереүгә ярҙам итергә тейеш. Был йәһәттән Бөрйән районында "Шүлгәнташ" музей комплексының төҙөлөүе лә бик тә әһәмиәтле.

Форумда Плес ҡала биләмәһе советы рәйесе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ейәне Тимербулат Кәримов та ҡатнашты һәм Октябрь революцияһы урамын заманса йәмәғәт киңлегенә әйләндереү концепцияһын тәҡдим итте. "Мин Өфөлә тыуҙым һәм унын юғалып барған тарихи йөҙөн һаҡлап ҡалыу һәм терегеҙеү мөмкин тип уйлайым", - тине ул. Йәғни ағас һәм таш архитектура һәйкәлдәренә бай был урамда Университет ихатаһын, айырым йорттар аллеяһын, сиркәү ихатаһын, Сауҙа рәттәрен үҙ эсенә алған үҙенсәлекле туристик кластер эшләргә мөмкин.

РФ төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Максим Егоров Башҡортостандың уңайлы ҡала мөхитен булдырыу буйынса эшмәкәрлеген юғары баһаланы. Быны ул Өфө урамдары буйлап шәхсән йөрөп, алып барылған төҙөкләндереү эштәре менән танышҡандан һуң белдерҙе.

- Рәсәйҙең барлыҡ субъекттарына ла Башҡортостан тәжрибәһен ҡулланырға тәҡдим итәм, - тине ул. - Был - территорияларҙы төҙөкләндереүгә комплекслы ҡараш. Эш эҙмә-эҙлекле алып барыла: ҡыйыҡтар ҙа, фасад та, юлдар һәм тротуарҙар ҙа ремонтлана, балалар һәм спорт майҙансыҡтары урынлаштырыла. Парковкаларға айырым иғтибар бүленә. Мин барлыҡ сараларҙа ла Башҡортостан һәм Өфө тәжрибәһен алдынғы тәжрибә булараҡ тәҡдим итергә әҙермен.

Шулай уҡ форум сиктәрендә М. Егоров йәштәр менән осрашып, уларҙың проекттарын ҡараны, фекерҙәрен тыңланы һәм ҡәнәғәт ҡалды: проекттар унда ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы һәм ул уларҙы тормошҡа ашырғанда халыҡтың фекеренә ҡолаҡ һалыу һәм ҡалаларҙың тарихи йөҙөн һаҡлап ҡалыу мөһимлеген белдерҙе.

Өфө ҡалаһы мэры Өлфәт Мостафин халыҡ-ара форумда баш ҡалала ғәҙәти булмаған стадион төҙөү тәҡдиме менән сығыш яһаны. Йәғни ул "швед өҫтәле" кеүек буласаҡ - унда бик күп дисциплиналар булырға һәм кеше үҙенә теләгәнен һайлап алыу мөмкинлегенә эйә булырға тейеш. Төҙөлөш өсөн бер нисә майҙансыҡ һайланған да инде. Ә әлегә Өфөлә иң популяр спорт төрҙәре булып футбол, хоккей, волейбол тора. Тиҙҙән волейбол, көрәш һәм гимнастика үҙәктәре төҙөү планлаштырыла.

Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Урмансылар паркын үҙгәртеп ҡороу буйынса халыҡ фекерен белеү буйынса тикшереү ойошторолғайны. Мәғлүм булыуынса, ул - ҡала уртаһындағы урман. Унын буйынса төп фекерҙе лә ошо форумда әйтергә тейештәр ине. Хәйер, уға тиклем ҡала мэры паркта төҙөлөштәр булмаясағын белдергәйне. Әлегә парк федераль ер булып иҫәпләнә, Өфөнө үҫтереү буйынса Генплан эшләнгәс, федераль үҙәк был территорияны ҡалаға биреү буйынса эш башлаясаҡ. МДУның Иҡтисад факультетының Урбанистика үҙәге директоры, Мәскәү урбанистика үҙәгенә нигеҙ һалыусы эксперт Сергей Капков белдереүенсә: "Башҡортостан урмансылары исемендәге парк - республика өсөн уникаль урын. Ул гармонияла һаҡланырға тейеш. Бында иң мөһиме - баланс. Урман территорияһы балансы: бында бер нисек тә мәҙәниәт һәм ял паркы була алмай, ул урман территорияһы булырға, кеше унда ҡала шау-шыуынан, тормош ағышынан ҡасырға тейеш. Унда кеше, йәшенә ҡарамаҫтан, үҙен уңайлы тойорға тейеш".

Ҡыҫҡаһы, урбанистика форумы Башҡортостан өсөн һөҙөмтәле булыр һәм был майҙанды үҙ мәнфәғәтебеҙҙә - ҡалаларҙың милли йөҙөн һәм милли ерлеккә бәйле туристик маршруттар булдырыуҙы тормошҡа ашырыу өсөн ҡулланырға яҙһын, тип ышанайыҡ.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

*✓ 1771-1172 йылғы Польша походында Башҡорт ғәскәре составында Йәнәй олоҫо старшиналары Шәрип Айҙаров һәм Ғәли Йәрмөхәмәтов командаларынан яуҙарҙа ҡатнашҡан 130 башҡорт яугирының исемлеге табылды.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - ЙӘНӘЙ,

## асылыбыҙ - көнбайыш башҡорттары



Монгол баҫҡынсылары 1241 йылда Батый хан етәкселегендә Венгрияға баҫып инә. Дунай башҡорттары Венгрия короле армияһында хеҙмәт иткәнлектән, венгрҙар һәм уларҙың союздаштары - австриялылар һәм франктар менән бер сафта монгол яуына ҡаршы сыға. Ибн Сәйет әл-Мәғриби былай тип яҙа: "... әл-Хункар иле. Улар - төркиҙәр, башкурдтарҙың туғандары... Һәм татарҙар уларға барып етте, һәм уларға ҡаршы хункарҙар, башкурдтар һәм алмандар йыйылды. Һәм улар тегеләргә (татарҙарға) еңелеү килтерҙе..." Бында Хорватияның Сибених ҡалаһы эргәһендә булған бәрелеш хаҡында һүҙ бара, был алышта монгол отрядтарының береһе тар-мар ителә. Әммә һуңынан Шайо йылғаһы буйындағы ҡан ҡойғос һуғышта Батый хан ғәскәре венгрҙарҙың союздаш армияһын еңеүгә өлгәшә. Монгол-татар баҫҡынсылығына ҡаршы һуғыштарҙа Венгрия башҡорттары бик күп юғалтыуҙар кисерә, ә уларҙың иҫән ҡалғандары тора-бара венгрҙар тарафынан тулыһынса ассимиляциялана.

Был тарихи сәхифәләр тағы ла бер тапҡыр башҡорт этносының килеп сығышында күп төрлө, бай тарихлы ырыу-ҡәбиләләр ҡатнашҡанына бер дәлилдер. Хатта ки боронғораҡ осорҙарҙа уларҙың телдәре лә бер үк булмайынса, тарихи процестар барышында ғына тулыһынса төркиләшкәне ысынбарлыҡҡа тап килә. Алтай - Урта Азия тарафтарында йәшәгән төрлө сығышлы ата-бабалар башҡорт исемен аҙағыраҡ алһа (русса - прабашкиры), боронғо Көньяҡ Урал башҡорттары ла мотлаҡ төрки сығышлы булмай. Өҫтәүенә, тәү Ватандарынан бик алыҫ ерҙәргә китеп, ханлыҡ төҙөп, йә иһә башҡа бер батша-солтандарға хеҙмәт иткән көнбайыш башҡорттары - тарихи ысынбарлыҡ ул. Юҡҡамы ни урта быуаттарҙың бөйөк географы әл Иҙриси үҙенең донъя климаттарына (географик зоналарына) арналған хеҙмәтендә бер юлы ике Башҡорт илен һүрәтләй: береһе Эске Башҡорт иле булһа, икенсеһе - Тышҡы Башҡорт иле.

Шулай итеп, тарихсы Салауат Хәмиҙуллин иҫбатлағанса, Көньяҡ Уралда бер ҡасан да боронғо мадъярҙарҙың ватаны булмаған. Уның фаразлауынса, Көньяҡ Урал башҡорттары урындағы ерле мәҙәниәтле ҡәүемдәрҙән (кушнаренко, ҡара яҡуп мәҙәниәттәре) формалашып, тарихи этник үҫеш барышында юрматы, йәнәй, юрмый, ғәйнә ырыуҙары формаһын алған, улар берләшмәһенә, шулай уҡ уртаҡ башҡорт автоэтнонимын алып, иртә урта быуаттарҙа уҡ бөрйәндәр килеп ҡушылған. Бөрйәндәрҙең боронғо ата-бабаларынан беҙҙең ерлектә турбаҫлы археологик комплексы ҡомартҡылары ҡалған булыуы бик мөмкин. Атаҡлы тарихсы-археолог, академик Н.А. Мәжитов та IX-X быуат башҡорттарының мәҙәниәте күп компонентлы булып, уның формалашыуында боронғо кушнаренко һәм турбаҫлы ҡәбиләләренең (шартлы атамалар) әүҙем ҡатнашыуы тураһында яҙҙы. Тимәк, бөгөнгө йәнәй ырыуы башҡорттары вариҫтары ла, һис шикһеҙ, үҙҙәренең боронғо тарихи сығышын яҡшы белгән хәлдә, этник берҙәйлектәрен (идентичность), ябай тел менән әйткәндә, ниндәй милләт вәкилдәре булыуҙарын төплө аңларҙар ине.

Йәнәйҙәрҙең башҡорттар Рус подданствоһы алғанға тиклемге тарихы буйынса документаль сығанаҡтар юҡ тиерлек. 1909 йылда "Шура" журналында "Жәнәй бабай" исемле риүәйәт баҫыла, унда элекке замандарҙа йәнәйҙәрҙең ата-бабалары Әй йылғаһы буйында көн итеүе хаҡында бәйән ителә. Ошо риүәйәткә ярашлы, 300 йылдар элегерәк Жәнәй баба исемле кеше, уҡ-һаҙаҡ һәм һөңгө менән ҡоралланып, тыуған илен ташлап, яңы ерҙәр эҙләп табам тип, көнбайышҡа табан сәфәргә сыға. Ул бик оҙаҡ бара торғас, Ағиҙел һәм Чулман (Кама) йылғалары ярҙарына етеп, барлығы 100 мең дисәтинә тәшкил иткән ерҙәргә һәм урмандарға хужа була. Уның биләмәләрен һуңынан Йәнәй олоҫо йә иһә Йәнәй түбәһе, тип атайҙар. Тик XVII быуат башында йәнәйҙәрҙең Урал аръяғынан Кама буйҙарына күсеп килеүен тарихи факт тип ҡарап булмай. Был риүәйәттә, күрәһең, йәнәй ырыуы башҡорттарының көнсығыш башҡорттары ерҙәрендә припущенник сифатында күпмелер йәшәп, элекке биләмәләренә кире ҡайтыуы сағылыш тапҡандыр. Ошоно раҫлаусы тарихи документтар ҙа табылған. Мәҫәлән, Себер даруғаһының Ҡошсо олоҫо башҡорто Баҡый Аҡбулатов 1685 йылда үҙенең Әй һәм Өфө (Ҡариҙел) йылғалары буйындағы аҫаба еренә Йәнәй олоҫо Шабыз ауылы (хәҙерге Татарстандың Аҡтаныш районында урынлашҡан) башҡорттары Мәскәү (Москова) һәм Әтекәй (Атака) Козелаевтарҙы припущенник итеп индергән.

Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң башҡорт ырыуҙары вәкилдәре батша хөкүмәтенән үҙҙәре биләгән ерҙәргә аҫаба биләмәләренең сиктәре күрһәтелгән махсус (подтвердительный) грамоталар ала. Бына Йәнәй олоҫо башҡорттарына бирелгән грамоталарҙың береһендә шулар теркәлгән: "Лета 7148 (то есть 1640 г.) марта в 3 день били челом государю царю и великому князю Михаилу Федоровичу всея Руси, а воеводе Ивану Ивановичу Салтыкову подали челобитную Уфимскаго уезду, Енейския волости, ясашные башкирцы Янбахтычко Кудабахтин сын, Магозячко Байбахтин сын с товарищи, а в челобитной их написано: вотчина де дедов и отцов их вниз по Ику реке по обе стороны бортныя ухожия и всякие звериные ловли и с озеры, а межи де той вотчине по Ику реке вверх Тадума озера исток, да нижняя межа той вотчине по Ику реке вниз завод Уртаря, дав той вотчине озера Таралы и с ыстоками и со всякими угодьи".

Йәнәй олоҫо территорияһына Ыҡ йылғаһының түбәнге ағымындағы, Ағиҙел һәм Чулман (Кама) йылғалары буйҙарындағы ерҙәр ингән. Үҙенең бик уңайлы географик урыны арҡаһында был яҡтарҙа рус крәҫтиән колонизацияһы бик тиҙ башлана, байтаҡ ерҙәр тартып алына башлай. Шул сәбәпле йәнәй ырыуы башҡорттары ла бер-бер артлы тоҡанып торған башҡорт ихтилалдарында бик әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, Алдар һәм Күсем батырҙар етәкләгән 1704-1711 йылғы ихтилалда Йәнәй олоҫо муллаһы Мөхәммәт Яҡупов ҙур әүҙемлек менән сығыш яһай.

Шул уҡ ваҡытта йәнәйҙәр Башҡорт ғәскәре составында рус армияһының байтаҡ ҡына хәрби походтарында ҡатнаша. Мәҫәлән, 1771-1172 йылғы Польша походында Башҡорт ғәскәре составында Йәнәй олоҫо старшиналары Шәрип Айҙаров һәм Ғәли Йәрмөхәмәтов командаларынан яуҙарҙа ҡатнашҡан 130 башҡорт яугирының исемлеге табылды.

Йәнәй ырыуы башҡорттарының эске бүленешендә бер нисә түбә булыуы билдәле: Йәнәй түбәһе үҙе, Оло, Урта, Кесе Йәнәй, Терпеле, Сығыр (Чигир), Туғыҙлар (Туғыҙбай), Боғады һәм Камбар түбәләре. Хәҙерге топонимияла ошо түбә исемдәре сағылыш тапҡан торлаҡ пункттары бар: Девятерня ауылы (Татарстан Республикаһының Агрыз районы), Боғады ауылы (Татарстан Республикаһының Аҡтаныш районы һәм Башҡортостан Республикаһының Бүздәк районы), Камбарка ҡалаһы (Удмурт Республикаһы). Туғыҙлар (Тугузбуй, тип теркәлгән) түбәһе П.И. Рычковтың "Башҡорт халҡының олоҫтарға һәм ырыуҙарға бүленеше" исемле яҙмаларында айырым олоҫ итеп күрһәтелә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

Был көндө 313-сө полк яугирҙары корпустың танк резервы менән Александровка һәм Бибиково ауылдары йүнәлешендә немецтарға һөжүм башлай. Полк батареяһы командиры Сәйфулла Хәлил улы Хәбиров артиллеристары дошман позицияларын утҡа тота, уларға баш күтәрергә лә мөмкинлек бирмәй. Һөҙөмтәлә Александровка һәм Бибиково ауылдары дошмандан азат ителә.

Әммә немец командованиеһы, барлыҡ көстәрен туплап, Воронежды төньяҡтан ҡамау маҡсатынан төңөлмәгән була әле. 8-се атлы корпустың һул флангыһында көсөргәнешле хәл килеп тыуа. Икенсе Тербуны (документтарҙа - Тербуны-2) һәм Бурдино йүнәлешендә немецтарҙың яңы һөжүме беҙҙең фронтты йырып сығыу хәүефен тыуҙыра. Фронт командованиеһы ошо хәл иткес рубежға 112-се Башҡорт атлы дивизияһын йүнәлтеүҙе хуп күрә: был саҡта дивизия үҙен бар фронтҡа танытып өлгөргән була. Был хәрби идарасыларҙың башҡорт яугирҙарына ниндәй ҙур ышаныс һәм ихтирам менән ҡарауының асыҡ дәлиле ул. Эйе, 1942 йылдың 2 - 8 июль арауығында, ни барыһы 7 көн эсендә, башҡорт атлылары, тиңһеҙ батырлыҡ күрһәтеп, дошман һөжүмен туҡтатыуға өлгәшә. Алешки - Малые Борки - Святоша рубежында дошмандың 320 һалдаты һәм офицеры юҡ ителә, 2 боеприпастар склады яндырыла, 57 ҡул һәм станковый пулеметы стройҙан сығарыла, 12 орудиеһы, 2 танҡыһы, 10 йөк автомобиле емертелә, штаб документтары ҡулға төшөрөлә, немецтар бик күп боеприпастарынан һәм башҡа хәрби мөлкәтенән яҙҙырыла.

Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай: беҙҙең яугирҙарыбыҙ ҙа үҙҙәренең инде дуҫлашып бөткән яуҙаштарын юғалтыу әсеһен татый ошо көндәрҙә. Әммә был уларҙың йөрәктәрендә дошманға ҡарата булған нәфрәт һәм үс алыу тойғоһон көсәйтеп кенә ебәрә. Урта рус далаһы киңлектәренең урманлы ҡалҡыулыҡтарында барған тиңһеҙ алыштарҙа 76 башҡорт атлыһы батырҙарса һәләк була, 191 кеше хәбәрһеҙ юғала, 295 кеше яралана.

"Красная Звезда" гәзитенең 1942 йылдың 8 июлендә баҫылған һанында Брянск фронтында барған алыштар хаҡында баҫманың хәрби хәбәрсеһе П. Крайнов былай тип яҙа: "...Хәҙер яңы плацдармда аяуһыҙ ҡаты һуғыштар башланды. Беренсе көндө үк 45 немец танкыһы ҡыйратылды. Был бәрелештәрҙә, танк частарынан тыш, атлылар ҙа ҡатнаша. Улар дошман пехотаһына уңышлы һөжүм итә. Кавалерия часы танкылар менән дә ҡыйыу көрәшә. Улар бер нисә танкыны һәм 2 пехота батальонын юҡ итте. Һәм кавалерист башҡорттар ҙа иптәш Шайморатов етәкселегендә дошман пехотаһына ҡыйыу һөжүмдәр ойоштора".

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Урмандарҙа туҙан булмай. Ҡарама, йүкә, сирень ағастары туҙанды башҡаларға ҡарағанда күберәк йота - 1 йылға 35 килограмм тирәһе. Урман һауаны төрлө зарарлы ҡатнашмаларҙан таҙарта, уны кислород менән туйындыра.*



# УРМАН БАЙЛЫҒЫ...

## әҙәмдәр мәнфәғәте өсөн яратылған

**Башҡортостан урмандары, урман хужалығы, халыҡтың урманға ҡарата мөнәсәбәте һәм бөгөнгө урмандарҙың хәле тураһында һөйләштек Башҡорт дәүләт аграр университетының урманды өйрәнеү һәм ландшафт дизайны кафедраһы доценты, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты Заһир Зәбир улы РӘХМӘТУЛЛИН менән. Заман етеҙ тиҙлектә алға елдергәндә, ҙур ҡалалар ҡалҡытыу өсөн йөҙ төрлө төҙөлөш материалдары барлыҡҡа килгәндә һәм кеше инде "тәбиғәт балаһы" булыуҙан алыҫлашҡанда урмандарҙың ҡиммәте юғалып китмәнеме? Һәм нимә ул кеше өсөн урман? Ошо һорауҙарға белгес яуаптарын алдыҡ.**

**Башҡортостан урмандарына ҡыҫҡаса характеристика биргәндә, ниндәй улар? Беҙҙә бит әле урмандарҙан тыш, ялан, дала, һаҙлыҡ, тауҙар ҙа бар...**

- Республикабыҙ һәм, ғөмүмән әйткәндә, башҡорт халҡының борон-борондан төйәк иткән ерҙәре - иҫ киткес гүзәл тәбиғәт мөйөшө. Беҙҙә урман-тауҙар ҙа, йылға-күлдәр ҙә, далалар ҙа, үлән-сәскәле болондар ҙа етерлек. Ә инде фәнни яҡтан аңлатҡанда, Башҡортостан урмандары имән, йүкә, йыла, уҫаҡ өҫтөнлөк иткән киң япраҡлы ағастарҙан тора. Ағас араларындағы төп үләндәр - улар еҫле балтырған, төньяҡ райондарҙа - турғай борсағы, еҫле һырмауыҡ, тайтояҡ, турғай йондоҙҡайы, ә көньяҡтараҡ урынлашҡан райондарҙа торна сырмалсыһы, ҡыуаҡ сейәһе, ҡолонғойроҡ, ноҡот борсағы һәм башҡалар. Киң япраҡлы урмандарҙағы йәш ағастар араһында сәтләүек, миләш үҫә.

Ылыҫлы урмандар Башҡортостандың Урал алдының төньяҡ өлөшөндә осрай, был шырлыҡтар шыршы һәм аҡ шыршынан тора. Ылыҫлы урмандар башлыса таулы райондарҙа. Тауҙарҙың түбәнге өлөшөндә урмандар ҡарағайҙан, ә өҫтәрәк шыршынан тора. Шыршы төптәрендә ҡыҙыл һәм ҡара көртмәленән һәм башҡа ҡуйы тайга үҫемлектәренән торған йәшеллек япмаһы йәйелеп киткән. Башҡортостан (Көньяҡ) Уралының үҙәк райондарында (Ҡыраҡа тау теҙмәһе, Йылайыр яйлаһы) һәм уның көнсығыш тау алдарында (Ҡырҡтытау, Ирәндек) бәләкәйерәк майҙандарҙа ҡарағас урмандары һаҡланып ҡалған. Ҡарағай урмандарының күп өлөшө оҙайлы йылдар ҡырҡылып, уларҙың урынын һөйәлле аҡ ҡайын урмандары баҫып алған. Туғай урмандары тирәк, тал һәм йүкә ағастарынан тора, һаҙлы яр буйҙарында башлыса ҡара ерек үҫә. Тирәклектәр һәм таллыҡтар кешеләр тарафынан тулыһынса йәиһә өлөшләтә юҡ ителгән һәм сабынлыҡ, көтөүлек ерҙәренә әйләндерелгән.

Далалар Башҡортостан территорияһын интенсив рәүештә үҙләштергәнгә тиклем уның тигеҙлек ерҙәренең өстән бер өлөшөн биләгән. Һөрөргә яраҡлы бөтөн ерҙәрҙе үҙләштергәндән һуң далаларҙың майҙаны ҡырҡа кәмене, ә Урал алдында улар бөтөнләй юҡҡа сыҡты. 50-се йылдарҙа сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү Башҡортостандың Урал аръяғы далаларын да юҡ итте, тиергә була. Хәҙер далаларҙың төп массивтары Урал аръяғының тау һәм түбә битләүҙәрендә, шулай уҡ Урал алдының Бөгөлмә-Бәләбәй ҡалҡыулыҡтарындағы тау итәктәрендә һәм Дөйөм Һыртының Төньяҡ армыттарында ғына һаҡланып ҡалған. Далаларҙың өс зона вариантында ла, тау баштарындағы һәм уларҙың иң юғары көньяҡ битләүҙәрендә йоҡа ташлы тупраҡта ташлы ер яратҡан үҫемлектәр (кейәү үләне, ябай оносма, энә япраҡлы ҡәнәфер һәм башҡалар) үҫә. Башҡортостан тигеҙлектәрендә урыны-урыны менән татырлауыҡлы далалар һаҡланып ҡалған.

Һаҙлыҡтар республикала аҙ. Бейек тауҙарҙа (Ирәмәл, Ямантау баштарында) тау тундраларына хас булған күк көртмәле, һаҙ емеше, дриада һәм башҡа үҫемлектәр осрай. Байтаҡ майҙандарҙа әрем, алабута, маҙа киндер, шайтан таяғы, ике өйлө кесерткән, дегәнәк, аҡ ҡандала һәм дарыу ҡандала үләндәре үҫә. Улар ауылдарҙа һәм ҡалаларҙа унайлы экологик шарттар булдырыуҙа мөһим роль уйнай.

**Тәбиғәт, урман бит инде бер беҙҙең республика сиктәрендә генә түгел. Донъя кимәленән ҡарағанда ерҙә ул ниндәй территорияны биләй?**

- Урмандар бик борондан, 380 млн йылдар элек девон осоронда барлыҡҡа килгән тереклек иҫәпләнә. Улар ҡоро ерҙең 27 процентын, 3,4 млрд га майҙанын билән тора һәм 30 проценты - ылыҫлы, 70 проценты япраҡлы ағас. Ә әлегә урмандар ҡоро ерҙең яҡынса өстән бер өлөшөн тәшкил итә.

Урмандағы тереклек - үҫемлектәр, йәнлектәр, бәшмәктәр, микроорганизмдар - үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә тора, бергәләшеп уртаҡ тормошта йәшәй. Шуға күрә урманды тәбиғи берҙәмлек тип атайҙар.

Тәбиғи урман бер нисә ҡатламдан тора. Иң өҫкө ярус - ағастар. Унан түбәнерәк "урман аҫты" - ваҡ ағастар һәм ҡыуаҡтар ярусы урынлашҡан. Ул ҡош-ҡорттоң күп төрҙәренә һыйыныу һәм туҡланыу урыны бирә. Тағы ла түбәндәрәк кескенә ҡыуаҡсыҡтар (мәҫәлән, ҡурай еләге, нарат еләге) һәм үләндәр. Иң аҫҡы ҡатламды мүктәр һәм лишайниктар тәшкил итә. Улар тупраҡты ҡаплап тора. Урман шулай уҡ бәшмәктәрһеҙ йәшәй алмай. Бәшмәк ептәре ағас тамырҙары менән ҡушылып үҫә һәм ағастарға тупраҡтан һыу, унда эрегән тоҙҙарҙы һурырға ярҙам итә. Ни өсөн ултыртылған ағастар һыҙаты йыш ҡына урман көсөнә инеп китә алмай? Сөнки тупраҡта бәшмәк булмай сыға ла, ағастар үҫеп китә алмай.

XVIII быуатта Пруссияла фәнни урмансылыҡ тигән бер ҡыҙыҡлы тәжрибә үткәрәләр. Урманда бер төрлө генә ағас ҡалдырыла, урман аҫты (бейек ағастар аҫтындағы ҡыуаҡтар) бөтөрөлә, тар һуҡмаҡтар урынына тура киң ыҙандар һыҙыла. Бер-ике йылдан урман үлә башлай. Ҡатлаулы биологик сылбырҙар өҙөлгәс, урман табыш сығанағынан дотацияға ҡала, сөнки яһалма урман янғындарға тиҙерәк бирешә, ул минераль ашлама керетеүгә, ҡоротҡостарға ҡаршы сараларға, үҫентеләр ултыртыуға даими мохтаж була.

Беҙгә билдәле булған иң ҙур урмандар улар - тайга. Тайгала ҡышын һалҡын,ә йәйен тундраға ҡарағанда йылыраҡ. Үҫемлектәр бейек, ҡояшҡа бик талапсан түгел, ылыҫлы ағастар. Ылыҫлы урмандарҙың киң таҫмаһы, күлле Карелиянан алып, көнсығышҡа табан һуҙылған, Уралтау һырттарын ҡаплап алған, унан Себер һәм Алыҫ Көнсығыштың икһеҙ-сикһеҙ киңлектәренә йәйелгән. Был - мөһабәт тайга. "Тайга" һүҙе саха телендә "урман" тигәнде аңлата. Тайга зонаһында яҡынса 7 төр ағас һәм бер нисә ҡыуаҡ үҫә. Ылыҫлы урмандарҙың күпселеген ҡарағай тәшкил итә. Ул - иң сыҙам ағастарҙың береһе, эҫегә лә, һалҡынға ла бирешмәй. Уларҙы себер һәм даур тигән ике төргә бүлеп йөрөтәләр. Улар урмандың - 40, ҡарағай һәм кедр - 22, шыршылар - 16, ҡайын менән уҫаҡ 17 процент майҙанын биләй.

Тайганан көньяҡҡа табан ҡатнаш урмандар китә. Бында күп йыллыҡ туңлыҡ юҡ. Ҡыш шаҡтай йылы. Шуға урманда ылыҫлы һәм япраҡлы ағастар, ҡыуаҡтар бергә үҫә. Рәсәйҙә ҡатнаш урмандарҙа ылыҫлы ағастар менән йәнәшә ҡайын, уҫаҡ, имән һәм башҡа төр япраҡлылар ҙа һыйышып ултыра ала. Был тәбиғәттең үҙенсәлеген күрһәтә.

Ҡатнаш урмандар зонаһы тайганан киң япраҡлы урмандарға күсеш зонаһы булып тора. Ҡатнаш һәм киң япраҡлы урмандарҙа тупраҡ һоро һәм көрән төҫтә. Улар тайганың көлһыу тупрағына ҡарағанда серетмәгә байыраҡ.

Тропик һәм субтропиктарҙа үҫә торған ҡуйы, кеше үтеп сыға алмаҫлыҡ ағастар һәм ҡыуаҡлыҡтарҙан торған урман джунгли тип атала. Донъялағы иң ҙур дымлы тропик урман (сельва) Амазонка йылғаһы буйлап 6 миллион квадрат километрға һуҙылған. Был иҡһеҙ-сиҡһеҙ массив аша үтеп сығыу мөмкин булмағанлыҡтан, уны боронғо халыҡ "йәшел тамуҡ" тип атаған. Беҙҙең республика иһә сағыштырмаса урманлы зона иҫәпләнә.140 мең гектар урмандар хужаһыҙ биләмәләр булып тора.

**Урмандың файҙалы зона икәнен беләбеҙ, ә был файҙаны ентекләп өйрәнгәндә нисегерәк итеп һүрәтләп була?**

- Урмандың ни тиклем ҙур хазина икәнен һөйләп тороу ҙа артыҡтыр, шулай ҙа өс төрлө әһәмиәтен атап үтәйек. Беренсенән, көн торошона, һыу менән һауа таҙалығына ҙур йоғонтоло, ауыл хужалығы ерҙәрен ҡурсалай, әҙәмгә йәшәү һәм ял итеү өсөн йәйлы шарттар тыуҙыра, кейек-ҡошҡа бына тигән аулаҡ. Ошонда - уның мөхитте хасил ҡылдырыу йәки экология йәһәтенән көсө. Икенсенән, төҙөлөш өсөн һаман да етди сығанаҡ, уға был яҡлап ихтыяждың яҡын, хатта алыҫ киләсәктә лә бөтөрө нык икеле. Йәгни бында беҙ уның иҡтисади әһәмиәтен күрәбеҙ. Өсөнсөнән, урман - мәҙәни-тарихи урын да бит ул, унда ана күпме халыҡтарҙың булмышы ҡоролған, ул донъя көтөү, көнкүреште алып барыу күҙлегенән ифрат мөһим. Урманлы төбәктәрҙә йәшәгәндәр унһыҙ тормоштарын күҙ алдына ла баҫтыра алмай.



Урман - һауала газ алыштырыу кеүек мөһим процесса әүҙем ҡатнашыусы гигант фильтр ул. Урман үҫемлектәре һауанан кеше һәм хайуандар бүлеп сығарған углекислый газды йотоп бара һәм уны кислород менән байыта. Иҫәпләүҙәр күрһәткәнсә, мәҫәлән, дүрт ҙур ағас бер кешене тәүлек буйына етерлек кислород менән тәьмин итә.

Ағастарҙың тағы бер файҙаһы - һауаны туҙандан һәм завод-фабрикалар бүлеп сығарған зарарлы газдарҙан таҙарталар. Урмандарҙа туҙан булмай. Ҡарама, йүкә, сирень ағастары туҙанды башҡаларға ҡарағанда күберәк йота - 1 йылға 35 килограмм тирәһе. Урман һауаны төрлө зарарлы ҡатнашмаларҙан таҙарта, уны кислород менән туйындыра. Ғалимдар бер кешегә 100-150 квадрат метр йәшел зона тура килергә тейешлеген иҫәпләп сығарған.

Фитонцидтар - күҙгә күренмәй торған урман "санитарҙары". Был матдәләр ауырыу тыуҙырыусы микробтарҙың, бактерияларҙың, бәшмәктәрҙең үҫеш процестарын туҡтатып ҡына ҡалмай, юҡ та итә.

Мәҫәлән, ҡорһаҡ тифы, туберкулез, дизентерия, дифтерит кеүек ҡурҡыныс ауырыуҙар тыуҙырыусы микробтар ҡайын, муйыл, артыш бүлеп сығарған фитонцидтар тәьҫирендә бик тиҙ һәләк була. Имән, осло япраҡлы өйәнкә, ҡайын, уҫаҡ, муйыл, ҡарағай, шыршы һәм башҡа ағастар микробтарҙы 1,5-3 минут эсендә юҡ итә. Ҡарағай һәм кедр ағаслыҡтарындағы фитонцидтар айырыуса көслө була. Улар көндөҙ ҙә, төндә лә һауа ҡатлауын ғәжәйеп ҙур теүәллек менән айҡап сығара, нәтижәлә һауа таҙара. Фитонцидтар ауырыу тыуҙырыусы микробтарға ғына тәьҫир итеп ҡалмай. Муйыл фитонциды, мәҫәлән, инфекция таратыусы талпандарҙы һәм кимереүселәрҙе лә ағыулай. Фитонцидтарҙың был үҙенсәлеген медицинала, аҙыҡ сәнәғәтендә һәм ауыл хужалығында ла файҙаланалар.

**Урмандарға кеше ни тиклем зыян килтерә ала? Кеше менән тәбиғәттең һыйышып йәшәүе мөмкин булған хәлме ул?**

- Тарихҡа күҙ һалһаҡ, һуңғы 10 мең йылда ул осорҙағы урмандарҙың өстән ике өлөшө генә ҡалған, 500 миллион гектар ер ваҡ-төйәк ҡыуаҡтарҙан башҡа бер нәмә лә үҫмәй торған ҡыҫыр сүлгә әүерелгән. Донъя буйынса ҡарағанда, Англияла урман ерҙәренең 95 проценты ҡырылһа, Италия, Франция, Испания кеүек илдәрҙә был тәбиғәт байлығының 10-15 проценты ғына ҡалған. Кешелек йәшәйеше өсөн мөһим булған тропик урмандар минутына 26 гектар тиҙлек менән юҡҡа сыға бара. 25 йылдан һуң уларҙың бөтөнләй булмауы ла мөмкин, ти белгестәр. Урмандар әҙәйгән һайын, һауа сафлығын юғалтып ғына ҡалмай, йылғалар һайыға, күлдәр кибә, ер аҫты һыуҙары төпкә китә бара һәм ер йөҙөнә ҡоролоҡ янай. Ер шарындағы урмандарҙың 22 проценты Рәсәйҙә тура килә. 722 миллион гектар урманда 75 миллиард кубометр ағас запасы бар. Рәсәй урмандарының 42,7 проценты техник яҡтан өлгөргән урманға

керә. Ләкин һуңғы йылдарҙағы ҙур янғындар нәтижәһендә миллион гектар урман юҡҡа сыҡты.

Урмандың иң яуыз дошманы - янғын. Ҡоролоҡло йылдарҙа илдең теге йәки был төбәгендә урман янғындары ҡабына. Урман янғындары сығыуға йыш ҡына кеше сәбәпсе була, сөнки урман янғындарының 95 проценты тораҡ пункттарынан 20 километрға тиклем булған арала ҡабына. Урман янғындары, нигеҙҙә, урманда булған кешеләрҙең һаҡһыҙлығы арҡаһында килеп сыға. Рәсәй буйынса һуңғы йылдарҙа урман яныу йыш күҙәтелде. Әммә урман элек янмаған, ул бөгөн генә кешеләр тарафынан яндырыла йәки ҡырыла тип тә раҫлап булмай. Урман борон да янған. Янғындар йәшен һәм башҡа сәбәптәрҙән сыҡҡан. Был тәбиғәттең тәбиғи йәшәү процесы. Урмандың аңлы рәүештә ҡырҡылыуы ла ҡурҡыныс түгел. Сөнки ағаслыҡ ул тигеҙлекте йәһәт кенә баҫып алыусан. Мәҫәлән, элекке сәсеүлектәр бөгөн йәш сауҡалыҡ менән ҡапланды. Уларҙы хәҙер кемдендер ағастарҙан таҙалап алыуы икеле. Шунлыҡтан, кеше урманды ҡыра, юҡ итә, тигән фекер менән килешеп етмәйем. Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа ағас әҙерләү өс тапҡырға арткан - эйе, әммә урмандарҙы тергеҙеү эше лә әүҙемләшкән. Шуныһы, ағас эшкәртеүсе предприятиеларҙың сеймал базаһы йылап "тарая" бара икән, сөнки уларға кәрәкле ағастарҙан торған урмандар төпкөлдәрҙә ята - сығымдар артыҡ күпкә төшә. Шуға ла был тәңгәлдә файҙалы программалар төҙөлә. Махсус проектлар республика урман комплексы сәнәғәте өсөн бик мөһим. Был өлкә ҡатмарлы - һәр нәмәне уйлап эш итергә, башҡарырға кәрәк: киҫеү, ташыу, продукция етештереү, һатыу...

Урмандар төп байлығыбыҙ булып тора, тинек. Был бит әле ағасты ҡырҡып, продукция етештереүҙе, табыш алыуҙы ғына аңлатмай. Урман - үҙе бер асылмаған серле донъя ул. Халыҡ мул йәшәһен өсөн Хоҙай унда барыһын биргән: үҫемлеген дә, бал ҡорттары өсөн төрлө-төрлө сәскәһен, хайуандар, йәнлек-кейектәрҙе, һанап бөткөһөҙ башҡаһын да. Тик киләсәк быуындар өсөн беҙҙең һаҡ эш итеүебеҙ талап ителә. Һәм, әйтеп үтергә кәрәк, беҙҙә урманға аяулы ҡараш, уны үҫтереү һәм уңышлы ҡуллана белеү алимдары инде оҙаҡ йылдар фәнни нигеҙҙә өйрәнелгән. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт аграр университеты урман хужалығында грамоталы эш алып барырлыҡ, ҡала һәм ауылдарҙа ландшафт дизайндарын программалай алырлыҡ белгестәр әҙерләп сығара. Һәм улар республика ғына түгел, башҡа өлкәләрҙә лә һөнәрҙәре, хеҙмәттәре буйынса юғары баһалана.

**Шулай итеп, белгес менән һөйләшкәндән һуң Башҡортостанда урман тәләфләнә, ҡырыла, яна, тигән ҡурҡыныс ул ҡәҙәре юғары кимәлдә түгел, тигәнгә инандыҡ. "Урмандың яңырып, йәшәреп тороуы тәбиғи һәм кешенең ағасты йәшәйештә ҡулланыуы ла тейешле, ул әҙәмдәр мәнфәғәте өсөн яратылған байлыҡ", тине Зәһир Зәбир улы. Бары был байлыҡты аяй һәм аҡыл менән тотона белеү генә бурыс.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмә ҡорҙо.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

*Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ*



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

Шулай итеп, XVIII быуат аҙағында типтәр һәм татарҙар бары тик Бөгөлмә өйәҙендә генә башҡорттарҙан күберәк була. Бәләбәй, Минзәлә һәм Өфө өйәҙҙәрендә улар ауыл халҡының өстән бер өлөшөн тәшкил итә. XIX быуаттың тәүге сирегендә уларҙың дөйөм һаны арта бара, был 1816 йылғы VII ревизия материалдарында бик асыҡ сағылыш тапҡан. Был ваҡытта Бөгөлмә өйәҙендә бөтә төр припущенниктар (типтәрҙәр, татарҙар, мишәрҙәр, дәүләт һәм удел крәҫтиәндәре) аҫаба башҡорттарҙан 3 тапҡырға, Бөрө өйәҙендә - 2,5 тапҡырға, Бәләбәй өйәҙендә - 2 тапҡырға тиерлек күберәк була. Минзәлә, Өфө һәм Троицк өйәҙҙәрендә лә припущенниктар аҫабалар һанынан күберәк булып китә. Шул уҡ осорҙа Ырымбур, Силәбе, Быҙаулыҡ, Боғорослан өйәҙҙәрендә припущенниктар бик аҙ йәшәһә, Верхнеуральск өйәҙендә улар бөтөнләйгә булмай.

**1816 йылғы VII ревизия буйынса аҫабалар һәм припущенниктар һаны**

| № т/б | Өйәҙҙәр | VII ревизия буйынса (ир енесле) йән иҫәбе | |
|---|---|---|---|
| | | аҫаба башҡорттар | припущенниктар |
| 1. | Бәләбәй | 12 772 | 24 522 |
| 2. | Бөрө | 15 174 | 35 428 |
| 3. | Быҙаулыҡ | 1 603 | 218 |
| 4. | Бөгөлмә | 2 070 | 5 884 |
| 5. | Боғорослан | 588 | 312 |
| 6. | Минзәлә | 11 746 | 12 439 |
| 7. | Ырымбур | 15 745 | 92 |
| 8. | Стәрлетамаҡ | 14 330 | 4 750 |
| 9. | Троицк | 5 636 | 6 800 |
| 10. | Өфө | 4 989 | 5 097 |
| 11. | Силәбе | 6 611 | 177 |
| 12. | Верхнеуральск | 15 909 | - |
| **Бөтәһе** | | **107 173** | **95 709** |

**Алтынсы фактор.** Башҡорттарҙың татарҙар менән бер үк территорияла ҡатнашып йәшәүе ассимилятив процестарҙың көсәйеүенә килтерә.

Яһаҡ түләүсе, хеҙмәти, сумаҙанлы һәм сауҙа итеүсе татарҙарҙың көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары мөхитенә күсеп килеүе башҡорт ауылдарының кәмеүенә һәм этник яҡтан ҡатнаш ауылдарҙың арта барыуына килтерә.

**Етенсе фактор** - башҡорттар, татарҙар һәм типтәрҙәр араһында ҡатнаш никахтарҙың артыуы.

Типтәрҙәр араһында башҡорттар булыуын ҡатнаш никахтар һөҙөмтәһе тип ҡараусылар бар. Йәнәһе, типтәрҙәр башҡорт ҡыҙҙарын кәләш итеп алһалар ҙа, үҙҙәренең ҡыҙҙарын башҡорттарға кейәүгә һирәк биргән. Ҡайһы бер авторҙар фекеренсә, татар типтәрҙәренән сыҡҡан килендәр башҡорт мөхитендә башҡорттарҙы татарҙарға яҡынайтыусы ролен үтәгән. Ә типтәр араһындағы башҡорт ҡыҙҙарына был хас булмаған, тиген уйҙырма ла ошо рәүешле тарала. Был осраҡта шул уҡ Бөгөлмә һәм Минзәлә өйәҙҙәре типтәрҙәренең этник яҡтан башҡорт сығышлы булыуы бөтөнләйгә иҫәпкә алынмай. Социаль ҡатлам сифатындағы типтәрҙәр милләте буйынса башҡорт булғас, ниндәйҙер ассимиляция тураһында һүҙ йөрөтөү дөрөҫ түгел.

Ысынбарлыҡта көнбайыш башҡорттары ерлегендә эндогамия (бер этнос кешеләренең үҙ-ара никахлашыуы) күренеше боҙолғас, милләттең емерелеүенә юл асыла. XVIII быуатта көнбайыш башҡорттары һәм татарҙар араһындағы никахтарҙың махсус закон менән тыйылыуы ошо күренештең киң таралыуын раҫлай. Ошондай никахтар этносҡа "ят элементтар" ҡушылыуының иң радикаль юлы була. Академик Ю.В. Бромлей сит этник мөхиттә йәшәүселәрҙең тәүге быуыны үҙ ғүмере дауамында үҙенең этник сығышын һаҡлауы хаҡында яҙа. Ә бына уларҙың балалары һәм ейәндәре ҡатнаш никахҡа инеү сәбәпле сағыштырмаса тиҙ арала этник яраҡлашыуға һәм ассимиляцияға дусар була. Ошо ғалим киң ҡуләмдәге ассимиляция процестары барышында йотолоусы этноста ҡатнаш никахтар һанының сағыштырмаса дәүмәле этнос-ассимиляторҙыҡына ҡарағанда күпкә ҙурыраҡ булыуын билдәләй. Йотоусы этноста эндогамия һиҙелерлек кимәлдә кәмемәй. Ысынлап та, көнбайыш башҡорттары татар ҡыҙҙарын ҡатынлыҡҡа күпләп алып, үҙ ҡыҙҙарын татарҙарға кейәүгә аҙыраҡ бирә. Ҡатнаш никахҡа инеү бер нисә быуат дауамында барып, көнбайыш башҡорттарында элек күҙәтелгән эндогамияның юҡҡа сығыуына һәм тел ассимиляцияһы менән бергә уларҙын татарҙар тарафынан тулыһынса йотолоуына килтерә. Һөҙөмтәлә заманында 166 мең тәшкил иткән Минзәлә һәм Бөгөлмә башҡорттары үҙҙәренең этник асылын юғалтып, татар халҡы составына инеп китә. Шулай булһа ла, башҡа этник мөхиттә тороп ҡалған бөгөнгө көнбайыш башҡорттары үҙҙәренең этник тамырҙарын белергә тейеш.

Ҡатмарлы этник-ара процестарға ҡарамаҫтан, XVIII-XIX быуаттарҙа башҡорт халҡының арта барыуы күҙәтелә. 1795 йылда башҡорттарҙың дөйөм һаны 250 меңгә етһә, 1816 йылда - 328 мең, 1859 йылда - 545 мең була. 1897 йылғы тәүге Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙа 1 миллион 311 мең кеше башҡорт, тип теркәлгән. Был осраҡта 300 меңләп типтәр һәм мишәрҙең башҡорттар составына индерелеүен иҫәпкә алһаҡ, башҡорттарҙың ысынбарлыҡтағы һанын 1 миллион тирәһе, тип ҡарау дөрөҫөрәк булыр.

1917 йылғы Октябрь революцияһы, граждандар һуғышы, аслыҡ, "продразверстка", крәҫтиән хужалыҡтарының бөлгөнлеккә төшөүе һөҙөмтәһендә һәм башҡа емергес сәйәси һәм иҡтисади шарттарҙа йәшәүгә дусар булған башҡорт халҡы 1926 йылға иң киткес ауыр демографик хәлдә аяҡ баҫа: халыҡ иҫәбен алыу БАССР-ҙа башҡорттарҙың 584,8 меңгә тиклем ҡырҡа кәмеүен күрһәтә. Совет осоронда демографик процестарҙың кире яҡтары халыҡтан йәшерелеп килде, халыҡ иҫәбен алыу барышында тупланған мәғлүмәттәр, уның дөйөм һөҙөмтәләренән башҡа, дәүләт серенә тиңләнеп, дөйөм ҡарамаҡҡа сығарылманы.

Совет осороноң ауыр тормош шарттарына, Бөйөк Ватан һуғышындағы оло юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, 1979 йылға тиклем башҡорт халҡының арта барыуы күҙәтелә. 1939 йылда Башҡортостанда 671,2 башҡорт теркәлһә, 1979 йылда ул 935,9 меңгә етә. Әммә 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса халҡыбыҙ 72,1 меңгә кәмеп, республикала йәшәүсе башҡорттарҙың һаны 863,8 мең генә ҡала. Унан һуң, республиканан сит төбәктәргә китеүсе башҡорттарҙың күбәйә барыуы ла бик хәүефле хәлгә әйләнә: 1926 йылда Башҡортостандан ситтә башҡорттарҙың 12,4 проценты ғына йәшәһә, 1979 йылда ул - 31,8 процент, 1989 йылда - 40,4 процент тәшкил итә. Был һандар башҡорт халҡының этник аҙмышына ниндәй хәүеф янағанын асыҡтан-асыҡ күрһәтеп тора. Ошондай кире демографик күренештәрҙе совет осоронда төбәктәрҙең тигеҙ булмаған социаль-иҡтисади шарттарҙа йәшәүе менән генә түгел, ассимиляцияға илтеүсе факторҙарҙың көслө йоғонтоһо менән дә аңлатыу раҫ. Халыҡтың этник яҡтан көсһеҙләнеүенә ул йәшәгән территорияларҙың административ бүленеш буйынса Рәсәйҙең төрлө өлкәләренә ҡарауы ла кире йоғонто яһаны. Әле лә Башҡортостандан ситтә йәшәгән йөҙәрләгән мең башҡорт кешеһе үҙ милли мөхите менән рухи-мәҙәни бәйләнеше сикләнгән хәлдә булып, теленән дә, милли асылынан да алыҫлаша барыуға дусар.

Башҡорттарҙың бер өлөшө башҡа этностар тарафынан ассимиляцияланыуының башҡа объектив сәбәптәре лә бар. Мәҫәлән, башҡорт халҡының тарихын һәм мәҙәниәтен маҡсатлы рәүештә боҙоп күрһәтеүсе күп тиражлы баҫмаларҙың һәм брошюраларҙың бушлай таратыу кеүек ғәмәлдәрҙе көнбайыш һәм төньяҡ башҡорттарының этник үҙаңына баҫым яһау, тип ҡарарға кәрәк. Үҙҙәренең күршеләре - татарҙар, мариҙар, удмурттар, сыуаштар һәм башҡа халыҡтар менән уртаҡ тарихи яҙмыш кисереп, уҙған быуаттарҙа уларҙың үҙ араларына күсеп килгәндәренә ер һәм йәшәү сығанаҡтарын йомарт өләшкән ерле халыҡ бөгөн үҙе башҡа ҡәүемдәрҙән дөрөҫ аңлау, яҡшы ҡараш һәм мөнәсәбәт булыуға хаҡлы рәүештә дәғүә итә ала.

Заманында көнбайыш башҡорттары диалектының башҡорт әҙәби теленән ситләтелеүе милләтебеҙ берҙәмлеген һаҡлау юлында үтеп сыға алмаҫлыҡ кәртә булды. Был факт бөгөн дә милли консолидацияға ҡамасаулыҡ итә. Күренекле тарихсы-этнолог, академик Р.Ғ. Кузеевтың башҡорт милләтенең халыҡ-ара стандарттар буйынса ике телле булыуы хаҡындағы фекерен иҫәпкә алып, башҡорт милләтенең бөгөнгө конфигурацияһын яңыса билдәләй алыу мөһим. Уның ошо фактты танырға теләмәү Башҡортостанда башҡорт милләтенең башҡа халыҡтар менән сағыштырғанда һан нисбәтенең артабан да кәмей барыуына сәбәп булып, этнос сиктәренең тарайыуына килтерәсәге тураһындағы һығымтаһы менән килешмәйенсә булмай. Милләт киләсәге өсөн үтә мөһим булған ошо проблеманың ыңғай хәл ителеүе өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләү зарур.

**(Аҙағы).**

**✓ Был нимә? Әллә күҙемә күренәме? Юҡ, күренмәй икән, ҡаулан өйөмө ысынлап та китеп бара. Теге сәйер сүмәлә шыуышып, бер туҡтала биреп барҙы ла, ахырҙа, хәрәкәтһеҙ ҡалды. Оҙаҡ көттөрмәй, уның аҫтынан... Кем тиһегеҙ?**





*Иҙрис НОҒОМАНОВ*

# ҺУНАРСЫ ЯҘМАЛАРЫ

## НИ СӘСҺӘҢ...

Ниязбай ағай ауылдаштарын кәрәккәнгә лә, кәрәкмәгәнгә лә төп башына ултыртыу буйынса даны сыҡҡан мут әҙәм, олоно оло тип, кесене кесе тип тормайынса, алдашыуын һаман ташламай. Үҙенсә ул әкәмәт яһамаҡсы була шәт, әммә әкәмәте һәр саҡ тиерлек яман алдыҡҡа әйләнә лә ҡуя. Ҡара һаҡалын ғүмер буйына артынан ҡалмаҫ, тигәндәре ошо булалыр инде. Икенсе мәргән әйтем: "Бөкөрөнө ҡәбер генә төҙәйтер" - ти. Шулай ҙа, ихласлап тотонғанда, төҙәймәҫ бөкөрөнө лә төҙәйтергә була икән...

Бер көн, кисләтеп кенә, эштән ҡайтып барһам, ағайымды осраттым:

- Ҡустым, - тине ул иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡандан һуң, шунан ярым бышылдауға күсте, - ҡусты булғанға күрә генә һиңә әйтәм әле, Ҡырмай буйынан яңғыҙ илек үтеп киткән...

- Үҙең күрҙеңме әҙҙәрен? - Минең ҡолаҡ ҡарп итеп ҡалды. Ярайһы ғына оҫта һунарсымын бит. Бер ҡатлылыҡ та баштан ашҡан.

- Бая ғына. Талға барғанда. Әҙҙәр эп-эсвижий.

Миндә кинәт кенә һунар ҡомары уянды. Уянмай һуң, ҡоралайға рөхсәт ҡағыҙым бар ине. Уны "яндырғы" ла килеп тормай. Бер ыңғай килһә килә бит ул - иртәгә, етмәһә, ял көнө. Һай, Ниязбай ағай, һунарым уңһа, ашҡа саҡырып алырмын, валлаһи! Кәрәкле әйберҙәремде кистән үк барланым, ҡушкөбәгемде майлап, әҙерләп ҡуйҙым.

Мин ағайым өйрәткән урынға барып еткәндә, яңы яҡтыра башлаған ине. Тегеләй үттем, былай барҙым, был тирәнән илек түгел, сысҡан да юрғалап уҙмаған. Шунда ғына ағайымдың насар ҡылығы иҫкә төштө. Ултыртҡан! Ыштанһыҙ малай ише ултыртҡан. Инде бүтәне бөтөп, миңә тотонған икән. Белгән бит әле, хәсис, нимәгә һуҡтырырға. Үҙем дә инде, асыҡ ауыҙ. Аҙ ғына уйлап ҡараһам, ни була? Ҡырмай башындағы шау таштa ниндәй тал үҫһен ти! Әлеге шул бер ҡатлылыҡ инде.

Кеше күҙенә салыныуҙан оялып, кискә генә ҡайтып индем. Иртәнсәк бер ни булмағандай һыҙғыра-көйләп, мал тәрбиәләп йөрөгән булам. Ниязбай ҙа тышҡа сыҡҡан. Аҫтыртын ғына бер-беребеҙҙе күҙәтәбеҙ: бер кемдең дә алдан һыр биргеһе килмәй. Ниһайәт теге түҙмәне:

- Шунан, ҡустыһы, һунар нисек? - тигән була, үҙенең күҙҙәрендә мутлыҡ осҡондары уйнап тора. Мин бер аҙ көттөрөп (йәнәһе, дәрәжә һаҡлайым) ырыя ғына яуап бирҙем:

- Таптым, әй, тегеләрҙе. Икәү булғандар икән, рәхмәт инде, ағый, һиңә.

- Шулай уҡмы ни? - Алдар йән, ышанып етмәгән һымаҡ, йылмайып тора. Шулай ҙа икеләнә кеүек: хәҙер инде күҙҙәре бесәйҙеке кеүек янып китте. Мин уңай мәлдән файҙаланып ҡалырға тырышам

- Ағый, - тием, - беренсе көскә алып ҡайтып еткерҙем, икенсеһен, булмаһа, һин барып ал. Атың да бар, әҙҙәрҙе лә төйләп үҙең шәйләгәнһең. Шуға күрә уртаҡ булһын.

Теге, ышандымы-юҡмы, бер аҙ теклөп торҙо ла ҡайтып китте. Әҙәми затта нәфсе тигән бер яман этәргесме, ҡоторҡосмо бар бит. Ана шул үҙенекен иткән, Ниязбай кискә генә, кеше ағыы һил булғас, атын егеп "өләшөн" алырға киткән. Буштан төшкән һуғымдан кемдең баш тартаһы килһен! Йырып сыҡҡыһыҙ тәрән көртө бата-сума, атын ҡырҡ туғарып, ҡырҡ егеп, иллалла менән, таңға саҡ ҡайтып йығылған. Ике-өс көн ул көртә-күраһы тирәһенә сығып күренмәне: "өләшөн" ныҡ алғандыр.

- Алып ҡайта алдыңмы өләшөңдө? - тип ҡыҙыҡһынған булам теге бер күҙгә салынып ҡалғанында.

- Ныу-у, ҡустым, - тип бошондо ағайым, - һин дә хәтәр шылдыра беләһең икән, ә.

- Ҡунаҡ ашы - ҡара ҡаршы, ағый, - тип йылмайҙым мин, - ни сәсһәң...

Ышанаһығыҙмы-юҡмы, ошо әкәмәттән һуң Ниязбай ағай алама гәҙәтен ташланы ла ҡуйҙы. Белеп кенә ҡулланғанда һәр ауырыуҙың үҙ дауаһы була шул...

## ЙҮНСЕЛ

Ай-һай, еңелдән түгел тура тартып Ирәндек артылыуҙары. Быны үҙ иңендә һынап ҡарағандар ғына беләләр. Ә мин әлеге гәмәлдә күп тапҡырҙар һынаным. Ул һынауҙың тирә әсе булһа ла емеше татлы: Ирәндек һыртына менеп баҫтыңмы - һинең өсөн бөтөнләй икенсе мөхит асыла. Һин ирекле кейек кеүекһең! Бында һинең өҫтөңдән бер кем дә хакимлыҡ итеп тормай, бер кем уйҙарыңа ҡамасауламай һәм үҙ ихтыярын тағып маташмай. Хөрриәт! Бар донъя ошоноң ише булһа икән.. Сиратын көткән күпме хыялдар тормошҡа ашыр, күпме асылмаған асыштар яһалыр, яҙылмаған күпме әҫәрҙәр яҙылыр ине. Ә тегендә, Ирәндек аҫтында, ҡапма-ҡаршылыҡлы башҡа йәшәйеш. Унда аҙым һайын йәпәтәйҙәр, унда ялған менән ике йөҙлөлөк тулып ята, унда яһалмалыҡ хөкөм һөрә. Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө "демократиябыҙ" шулайыраҡ...

Әле бына ҡара тиргә батып тағы Ирәндек үрҙәренә үрмәләйем. Был юлы маҡсатым - мәғрур Кәбәнташ ҡаяһын буйһондороу. Унда күтәрелһәң, ярты Ер ус төбөндәгеләй күренеп ята. Ер генәме, һинең ҡаршыңда барлыҡ донъя асыла! Бар донъя һәм бөтөн йыһан! Шуның өсөндөр, форсаты сыҡҡанда, йәнем дә, тәнем дә Ирәндек буйҙарына тартыла ла тора. Тик ул форсат тигәне һирәгерәк тәтей. Шулай ҙа үҙем өсөн генә уны йышыраҡ булдырырға тырышам. Сөнки мин осар ҡош бейеклегенән ана шул донъя менән йыһанға ҡарап торорға яратам. Ҡарап торам, торған һайын ниндәй ҙә булһа асыш яһайым. Әлбиттә, ул асыштар ҙа тик үҙем өсөн генә була. Бәндәләрҙең күпселегенә ул асыштарҙың иҫ киткес мәғәнәһе менән илаһи матурлығын да, гүзәл асылын да аңлау бәхете бирелмәгән. Йәл...

Бына, ниһайәт, мин ҡыразлы сусаҡ түбәһендәмен. Ҡая тәне ғәжәп шифалы артыш, мамыҡ ише йомшаҡ таш мүге, башҡа һәр төрлө ваҡ-төйәк үҫенте менән ҡапланған. Ҡара, ошо түгелме һуң йәшәү өсөн көрәштең асыҡ миҫалы! Сая йәшәү көсөң самалы икән, бар, шыр яланғас таш өҫтөндә үҫеп ҡара. Күҙ алдымда күренештең таң ҡалдырғысы ғына түгел, һоҡландырғысы!

Бында мәңге ыжғыр-ныҡыш ел иҫә. Тиҫкәре ел. Шунлыҡтан, ағастары ла ғәжәп ҡиәфәткә кереп бөткән. Уларҙың һәммәһе зәғиф һәм кәгез. Шулай, самаһыҙ ҡаты, шыҡһыҙ һауа шарттары хатта әрһеҙ ағастарҙы ла танымаҫлыҡ итеп үҙгәртә: ҡайыны - ҡайын, ҡарағасы - ҡарағас түгел. Улар фантастик киноларҙағы сәйер мәхлүктәргә оҡшап ҡалған. Өшөмһәктәргә бында урын юҡ. Был урынға ҡырағай йәнлек-ҡоштар ҙа һирәк һуғыла. Һуғылһа әле. Ни өсөн тигәндә, бында көс түгеп, ваҡыт сарыф итеп күтәрелеүҙең кәрәге юҡ: ышыҡланыр урын, ашар ризыҡ таба алмаҫһың. Хатта ҡояш та бында икенсерәк һымаҡ - һаранырак. Үҙе ана йылмайып тора, ә тамсы йылыһы тойолмай.

...Иғтибарымды башым осондағы зәңгәр төпһеҙлектә талғын ғына әйләнгән ҡош йәлеп итә. Ирәндек бөркөтө икән. Уның тирәһендә, һәр ваҡыттағыса, бушайыюыҡҡа сарғалап ала ҡарға бутала. Ул ҡарға ҡорбанын йыҡҡан арыҫлан янында темеҫкенгән сүл бүреһе кеүек: үҙе ҡурҡаҡ, өркәк, үҙе биҙҙергес. Ләкин бөйөк ҡоштар батшаһы яғынан уға тамсы ла иғтибар тойолмай. Бөркөткә ҡарған бар ни, юҡ ни. Хәйер, шулай кәрәктер ҙә: батша һинлы батша тоҡомона ниндәйҙер бер йолҡош затҡа ваҡыт әрәм итеп тормаға! Бүтән мөһимерәк тә, ашығыҫыраҡ та, етдиерәк тә эштәре бөткәнме батшаның...

...Уйҙарымды ҡая таш аҫтынан ишетелеп ҡалған сәйер ҡыштырлау бүлдерҙе. Әлеге, ҡанға һеңешкән һунарсы алымы: үҙем дә һиҙмәҫтән, сүгә бирҙем дә, тауыш килгән яҡҡа ҡараш ташланым. Ҡараным һәм... башта аңлай алмай торҙом, унан шаҡҡаттым. Ҡатмаҫлыҡмы! Оҫта ҡул менән ҡупшы итеп әүәләнгән йәтеш кенә ҡалан сүмәлә үҙенән-үҙе... тау түбәнәнә шыуыша! Был нимә? Әллә күҙемә күренәме? Юҡ, күренмәй икән, ҡаулан өйөмө ысынлап та китеп бара. Күҙәтә башланым. Теге сәйер сүмәлә ун-ун биш аҙымдар тирәһе бер шыуышып, бер туҡтала биреп барҙы ла, ахырҙа, хәрәкәтһеҙ ҡалды. Оҙаҡ көттөрмәй, уның аҫтынан... Кем тиһегеҙ? Бәхәс ҡорам, тәбиғәтте үҙ итмәгән был һорауға бер ваҡытта ла дөрөҫ яуап бирә алмаясаҡ. Үҙем дә тәүҙә баҙап ҡалдым: һунарсымын, тип йөрөү менәнме... Сүмәлә аҫтынан ебәк йөнө ҡояшта йылҡылдап торған ғәләмәт һимеҙ бурһыҡ килеп сыҡты. Мин шунда ғына төшөнөп алдым: йүнсел кейектең ҡышҡылыҡҡа әҙерләнеп йөрөгән көнө икән. Уның әлеге эшен һунарсылар үҙҙәренсә: "Бурһыҡ ҡаулан тарта", - тиҙәр. Ысынлап шулай ҙа баһаң! Бурһыҡ ҡаулан тарта башлаған икән, тимәк, һалҡындар яҡынлаша.

Бурһыҡтың әҙер сүмәләләрен күп күргәнем бар, ә бына шул ҡыу үлән өйөмөн нисек итеп, ни рәүешлә өңөнә ташыуын әлегәсә күҙ алдына килтерә алмай инем. Баҡһаң, яп-ябай ғына икән дә! Ана, уңған хужа, сүмәлә аҫтына ятып-ятып алды ла, еңел генә, килбәтле генә итеп артҡа ҡарай һөйрәп алды ла китте. Һай, афарин! Шул килеш ул ҡарайып торған өң ауыҙына инеп юғалды. Ә ҡоро бесән өйөмө тыңлаусан ғына уның артынан эйәрҙе. Ғәжәп бит! Ҡапыл ҡарағанда, ысынлап та, йәнһеҙ сүмәлә үҙе китеп бара кеүек.

Байтаҡ ваҡыт йәйенке таш аҫтында юғалып торғандан һуң, "йүнсел" йәнә күренде. Әллә ҡасан әҙерләнеп, ярайһы ғына арауыҡта ятҡан икенсе сүмәләне баяғы ысул менән ҡарманы ла тағы өҫтөрәп алды ла китте. Шулай ҙа быныһын эскә индермәйенсә, өң алдында ҡалдырҙы. Тимәк, бурһыҡ уныһы менән, ҡышҡылыҡҡа ихласлап ятҡандан һуң, өң ауыҙын ҡаплап ҡуясаҡ. Быныһына ғына минең дә баш етте. Егәрле кейектең "өйө" йылы, түшәге йомшаҡ булырға шик юҡ. Үҙе хозур, үҙе йомарт йәй тураһында матур төштәр күрә-күрә йөклә ла йөклә аҡыллы баш. Беҙҙең яҡтарҙа ҡыш бауыры оҙон ул.

## ҠОРҘАР ХӘЙЛӘ ҠОРА

Монолит тигән төшөнсәнең ни аңлатҡанын күптәр белмәйҙер әле. Эйе, үҙебеҙҙең телгә ауҙарғанда ул берҙәмлек һүҙенә яҡын тора һәм сәйәсәттән башҡа агрономик мәғәнәгә лә эйә. Ни өсөнмә? Сөнки тупраҡтың өҫкө ҡатламы, ужым культураларының ҡышҡы хәл-торошон, яҙҙы нисек ҡаршылауын белер өсөн мотлаҡ монолит алырға һәм билдәле бер шарттарҙа үҫтереп ҡарау кәрәк. Монолитҡа ҡарап ашлыҡтың киләһе уңышын күҙалларға була, яҙғы эштәргә, ғөмүмән, планға үҙгәрештәр индерелә. Монолит ала торған мәл - февраль урталары. Өф итеп кенә үҫтергән ужымдың һәләк булыу ихтималлығы ошо осорҙа ҡырҡа арта. Ни өсөн тигәндә, йоҡлап ялыҡҡан ужым инде уянырға әҙерләнә, ә һыйыр мөгөҙөн һындырырлыҡ һалҡындар әле үтмәгән. Сыуаҡ көн үҙәгендә шөйлә йылыта биреп ҡуйыуға ҡарамаҫтан, төндәрен һаман шаҡырайтып туңдыра. Ужым өсөн бына ошо иң ҡурҡынысы. Алдаҡсы йылы менән тиҫкәре һалҡындың уны харап итеүе бар. Әйткәндәй, миңә, монолит һылтауы менән һунарға йөрөйһөң дә ятаһың, тиеүселәр ҙә бар. Әйтһендәр әйҙә, минең өсөн барыбер: беренсеһе икенсеһенә ҡамасауламай. Көнсөлдәр һәр ваҡыт булған, барҙар һәм буласаҡ. Киң күңеллелек тигән илаһи тойғонан мәхрүм ителгәндәрҙе мин һәр саҡ йәлләйем. Улар Тәңре тарафынан йәберләнгән меҫкендәр...

Йәтеш кенә балтамды билгә ҡыҫтырҙым да, биштәремде артмаҡлаған көйө, тура тартып, ете саҡрым алыҫлыҡта ятҡан арыш баҫыуына юл тоттом. Ат менән йөрөгәндәй түгел, ҡар ифрат көслә. Ә балта нимәгәме? Уныһы туң ерҙе тумырыр өсөн.

Яҙҙы тойған ихлас көн йылмайып-көлә генә, саңғылар еңел шыуа. Саңғысыға шунан башҡа ни кәрәк: йәнгә лә, тәнгә лә рәхәт. Ошондай мәлдәрҙә һин ерҙә йәшәп ятҡанлығыңа ысынлап ҡыуанаһың һәм йәшәгән һайын йәшәгең килеп тора. Аланғырт тау һыртына артылыу менән ҙур аҡланға килеп сыҡтым. Сыҡтым да һағайып ҡалдым. Бында, аҡландың бер кем теймәгән ҡалын һырынтыһы ҡосағында, ҡорҙар төн үткәргән. Ана, ҡар өҫтөндә өңөрәйешкән "оя ауыҙҙары" тап шул хаҡта һөйләй. Улар байтаҡ ҡына. Иртән осоп киткәндәрендә урман тауыҡтары һыҙылған ҡанат эҙҙәрен дә ҡалдырған. Һәр буш ояның төбөндә һарғылт "ҡарышлауыҡтар" өйөмө күренә. Уларға ҡарап ҡоштоң йәшен генә түгел, хатта енесен дә билдәләргә була. Әммә ләкин бының өсөн "юғары урман белеме" һәм ҙур гәмәли оҫталыҡ кәрәк.

Күп тә барманым, ҡорҙар үҙҙәре лә күренде. Аулаҡ төпкөлдәрҙә төйәк итер ҡоштар, сағылда үҫкән яңғыҙ ялбыр ҡайынға ҡунып, туҡлыҡлы бөрө менән һыйлана ине. Ғәжәп, ни сәбәптәндер барыһы ла әлеге ҡарт ҡайынды һырып алған. Бәлки, уның бөрөләре эрерәктер ҙә, тәмлерәктер ҙә. Тәү ҡарашҡа ҡорҙар миңә бөтөнләй иғтибар итмәгән һымаҡ. Ләкин был тәү ҡарауға ғына шулай. Асылда, һәр ҡош күҙ асып йомған арала юҡ булырға әҙер, сәбәбе генә табылһын. Шуға күрә уларға тура бармайым, күҙ ҡыры менән генә ҡарай-ҡарай ситләтеп үтәм. Ҡаршындағы йәнлеккә тура ҡарама, тура яҡынлашма, киҫкен хәрәкәт яһама, алдан күренмә - бына һунарсының төп ҡанундары. Ошоларҙы белмәйһең икән - һин һунарсы түгел. Ошоларҙы яҡшы белеп, иҫеңдә тотҡандар ғына тәбиғәт һәм унда йәшәгәндәр менән дуҫлашып китә ала...

Ҡаралы-һороло ҡоштар көтөүе ҡунған ҡайынға боролоп күҙ һала-һала ары үттем. Аҡлан инде артта ҡалды. Ошо мәл көтмәгәндә ҡапыл ҡупҡан шау-шыуға һиҫкәнеп, әйләнеп ҡараным. Әле генә ағас башында ғәмһеҙ ултырған ҡорҙар юҡ ине. Шул арала ҡайҙа булдылар һуң? Эһә, ана, әйтерһең дә ниндәйҙер серле көс уларҙың барыһын бер юлы көртҡә сумырға мәжбүр иткән. Бая ғына тип-тигеҙ һырынты өҫтө уларҙың эҙҙәре менән сыбарланған. Урыны-урыны менән хатта ҡар ҡыймылдап ҡуйғандай. Ғәжәпһенеп тирә-яғымды байҡайым. Ә-ә, бына эш нимәлә: һирәк сауҡалыҡ араһынан, ҡарға тейер-теймәҫ шыҡыйып, ҡара шәүлә үтте. Әлеге ялбыр ҡайынға етте лә ул, еңел генә көйләгә биреп, аҫҡы ботаҡҡа ҡунды. Шәүлә тигәнем шул әҙәре ҡор аулаусы ҡарсығаға әүерелде. Бына кем ҡорҙарҙың ҡотон алған һәм уларҙы йән аямай ҡар аҫтына ташланырға мәжбүр иткән. Мин, ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмайынса, туҡталып, күҙәтә башланым. Тәкәббер ҡарсыға, табышының күҙ алдында гәйеп булыуынан ҡаушап ҡалғандай, бер аҙ ултырҙы ла, еңел генә осоп, ҡорҙар боҫҡан урынға төштө. Ул иғтибар

✓ *Ҡыҙыҡ күреп, тура уларҙың өҫтәренә бара башланым. Ситке "ояға" биш-алты аҙым ҡалды тигәндә, ҡар борхотоп ҡош күтәрелде. Ул сөм-ҡара әтәс ине. Үҙе ҡайҙалыр алға осоп барһа ла, ҡыҙыл ҡашы аҫтындағы күҙе миңә төбәлгән.*



менән ян-яғына ҡаранып ала, башын бер яҡ-ҡа ҡыйшайта биреп, ниҙер тыңлай. Йыртҡыс ҡар аҫтындағы күмәк ҡыштырлауҙы асыҡ ишетә ине, буғай. Ҡорҙарҙың ҡар йырып хәрәкәт иткәнен асыҡ тоя, шулай ҙа ҡапыл ғына тотоп ала алмай. Хәләнән килмәй. Ҡарсыға - ҡыр тауығы түгел. Ул туҙанға ла күмелеп ятмай, ҡарҙы ла йыра белмәй. Ҡарсығаның мөхите һауа һәм иркенлек. Был сая ҡош осҡанда ғына көслө. Үҙен-үҙе тота белмәгән тәжрибәһеҙ ҡорҙоң күтәрелеүе булыр, шунда уҡ йыртҡыс емәнә әйләнәсәк. Ә былай, тәмле ит эргәлә генә, бөтөнләй йәнәшәлә, тик йәйәү көйө бер ни ҡылып булмай. Тауыҡ затынан булһа ла, ҡорҙар ҙа һуңғы ағрыра түгел, ҡан дошманың янында саҡта тын да алмайынса, тик кенә ятыуың хәйерле икәнен яҡшы аңлайҙар. Аңларһың да оҙағыраҡ йәшәгең килһә. Ә тәбиғәттә оҙағыраҡ йәшәгеһе килмәгән йән эйәһе бармы икән? Ана, ҡорҙар әллә ҡасан ябай ғына бер алымды үҙләштереп алғандар ҙа, хәҙер инде өҫтәренә барып баҫһаң да, ҡарсыға бында саҡта йәшеренгән урындарынан ҡыбырламаясаҡтар. Мине шуныһы ғәжәпләндерә: ҡарсығаның әле осоп китмәгәнлеген ҡар ҡатламы аша нисек белә улар?

Йылы ҡан көҫәгән ҡарсыға, килбәтһеҙ түйтанлап, улай-былай йөрөштөргәндән һуң, теләр-теләмәҫ кенә ҡабат ҡайынға күтәрелде. Уның бар ҡиәфәте ризаһыҙлыҡ белдерә ине. Ҡаурыйҙарын ҡабарта биргән йыртҡыс, моңайған һымаҡ, ағас ботағында ултырып ҡалды, мин ары ҡуҙғалдым. Минең эшем тулып ята.

Еңелдән булмаған йөгөмдө иңгә һалған көйө, тирләп-бешеп, кисләтеп кенә ҡайтып киләм. Таныш ҡайынға еттем. Ҡарсыға инде күренмәй, ә ҡорҙар, ғәжәп, һаман осоп китмәгәндәр. Ҡорҙар әле һаман ҡар аҫтында. Быныһын мин сумған соҡорсоҡтарының ситендә ҡанат эҙҙәре булмағанлыҡтан белә алдым. Ихтимал, улар ошо рәүешле таңға тиклем дә ятырҙар ине. Мин килеп сыҡмағанда.

Ҡыҙыҡ күреп, тура уларҙың өҫтәренә бара башланым. Ситке "ояға" биш-алты аҙым ҡалды тигәндә ҡар борхотоп тәүге ҡош күтәрелде. Ул сөм-ҡара әтәс ине. Үҙе ҡайҙалыр алға осоп барһа ла, ҡыҙыл ҡашы аҫтындағы йылтыр күҙе миңә төбәлгән. Ул ҡарашта мин бер аҙ ҡурҡыу ҙа, ҡыҙыҡһыныу ҙа күреп ҡалдым. Көтмәгәндә гөрһөлдәп китеүе, шулай ҙа, ярайһы ғына тертләтте. Тимәк, беҙ бер-беребеҙҙе ҡурҡытҡанбыҙ килеп сыға.

Артабан ике-өс аҙым һнаған һайын ҡорҙар берәмләп тә, ҡушарлап та, хатта өсәрләп, ҡар аҫтынан осоп сыға торҙо, һәр береһе бер яҡҡа китеп юғала торҙо. Башта һанап маташтым, ахырҙа, яңылыштым: шул ҡәҙәре күп ине улар. Эре ҡоштар күтәрелгән һайын арттыранан ойоҫҡоп ҡар туҙаны оса, ҡойонсоҡтар уйнап ҡала. Бына ҡорҙар, ниһайәт, осоп бөттөләр шикелле, урманда иҫ киткес тынлыҡ урынлашты. Мин әкренләп тау һыртына арттылдым.

Бәй, әлеге ҡорҙарым, баяғы урындан алыҫ та түгел шундай уҡ ялбыр ҡайында ултыралар. Ян-яҡҡа туҙған ҡоштар шул арала нисек итеп ҡабат йыйыла һалып алғандар тиһен! Улар әүәлгесә миңә битараф һымаҡтар ине: тыныс ҡына бөрө сүпләштерәләр. Шулай ҙа әлеге битарафлыҡтың яһалма икәнен мин яҡшы беләм.

Ҡыҙыл ҡояш ырамлы аҙымдар менән байыуға яҡынлаша. Күренеп тора - төн һалҡын ғына булмаҡсы. Шуға күрә ҡорҙарға кискелеккә яҡшылап тамаҡ туйҙырыу кәрәк. Тамағың туҡ булғанда сасҡау һыуыҡтарың да ҡурҡыныс түгел. Өҫтәүенә, анауы ҡалынлыҡ ҡар-юрғаның барында. Ошоно ҡорҙар ҙа белмәй түгелдер. Юғиһә, анауы тиклем мөкиббән китеп сүпләнмәҫтәр ине.

Ҡайтып барышлай шуны уйлап ҡуйҙым: монолит тигән ят һүҙ, тимәк, бөтөнләй ят та түгел. Хатта ҡырағай ҡорҙар өсөн дә. Улар ҙа бит, ана, шул монолит-берҙәмлек арҡаһында ғәжәп ауыр ҡыштарҙы енел үткәрә. Берҙәм булғанда һәр кем өсөн аслыҡтың да, дошмандың да ҡурҡынысы ҡырҡа кәмей. Берҙәмлектә - көс, берҙәмлектә - тереклек. Ҡайһылай хаҡ һүҙҙәр.

...Ә алып ҡайткан монолиттарым һәйбәт һөҙөмтә күрһәтте. Ағымдағы йылда арышһыҙ ҡалмаҫбыҙ, тигән өмөттәмен.

**(Дауамы бар).**

*КӨЛКӨФӨ*

# БЫЛ ХӘЛДӘР КҮҢЕЛДӘ -

## йылмайта бөгөн дә

**Минең ун йылға яҡын ғүмерем Өфөлә йәшәп үтте. Тиҫтә йыл дауамында баш ҡалала ҡүңелһеҙ йәшәмәнем мин. Иң ҡыйын саҡтарҙа ла йөмороййөморо юмор ҡотҡара ине. Бигерәк тә студент саҡтарҙа эргәлә йөрөнө ул. Юҡтан бар яһап, тормошобоҙҙо биҙәй инек.**

### КЛЮЧИ НА ВАХТЕ

Бер көн шулай ауылдан килә ятам. Ҡулда ҙур ғына ашамлыҡ тултырылған сумка - ауылдан студент буш ҡул менән килмәй бит инде. Дөйөм ятаҡҡа индем. Ғәҙәттәгесә, лифт эшләмәй. Туғыҙынсы ҡатҡа ауыр йөктө күтәреп, көс-хәл менән менеп еттем. Бүлмәбеҙ янына килһәм, ишеккә "Ключи на вахте" тип яҙылған ҡағыҙ киҫәге беркетелгән. Кире беренсе ҡатҡа төшөргә тура килде. Асҡыс вахтала булмай сыҡты. Янынан туғыҙынсы ҡатҡа күтәрелдем. Ҡараһам, ишек төбөндәге сумка юҡ булған. Ишекте эткәйнем, асыҡ булып сыҡты. Бүлмәләштәрем ауыҙ йырып, мине көтөп ултыра. Шәп шаяртыумы? Шәп, әлбиттә. Ауыҙҙары ҡолаҡтарына еткән дуҫтарыңа нисек асыуланаһың инде.

### ҠУШАМАТТАР

Бер мәл бер-беребеҙгә ҡушамат тағыу модаға инеп китте. Кем башлағандыр, иҫләмәйем, әммә был шөғөл бик килешеп ҡалды. Һуҙа баҫып атлағаны өсөнмөләр, Рәмил исемле егетебеҙгә "Дөйә" ҡушамаы йәбеште. "Маъмай", "Тараҡан", "Кандала" ҡушаматтары ла үҙ эйәләрен тапты. Бер көн ситтән тороп юрфакта уҡыған Рөстәм исемле Учалы егетенә ҡушамат эҙләйбеҙ. "Таптым! Бөгөнгө көндән һин макака", - тип һөрән һалды дуҫым. Рөстәм бер аҙ уйланып ултырҙы ла, кинәт кенә әйтеп ҡуйҙы: "Нет, я не макака, а вот ты макака из Баймака". Дуҫым ҡыҙарҙы-бүртенде, әммә рифмалап әйтелгән ҡушаматҡа ҡаршы дәлил таба алманы. Билдәле инде, ҡушамат дуҫыма йәбеште лә ҡуйҙы.

Минә, ниңәләр, ҡушамат таба алмай иҫтәре китте. Бер яҡтан ҡыуанам, икенсе яҡтан, эс тә бошоп ҡуя - башҡаларҙан кәм булғы килмәй бит. Бер ялда Тараҡан менән Маъмай Бишбүләк районына ҡунаҡҡа киттеләр. Тараҡан шул райондыҡы ине. Өфөгә ҡайтҡас, былар мине ҡунаҡҡа саҡырҙы. Ауыл кустәнәсенән ауыҙ иттерҙеләр. Күҙ ҡараштарынан һиҙеп торам: былар ниндәйҙер ғилла уйлап тапҡан.

- Мә, ошо рюмканы тот та, нинә ҡунаҡҡа саҡырыуҙың сәбәбен әйтәбеҙ, - ти Тараҡан. Тоттом.

- Беҙ һинә ҡушамат уйлап таптыҡ. Әле һин шуның хөрмәтенә тоттон. Бөгөндән башлап, һин - Һуҡыр сысҡан, урыҫса Крот булаң, - тимәһенме был.

Йәбеште. Йәбештерҙеләр.

Шуныһы иҫтә ҡалған: берәү ҙә үҙ ҡушаматына үпкәләп, кенә тотоп йөрөмәне. Әле лә осрашҡанда бер-беребеҙҙе шулай мәрәкәләп алабыҙ. Тик осрашыуҙар ғына һирәгәйгәндән-һирәгәйә бара...

### ТЕЛ МӘСЬӘЛӘҺЕ

Беренсе курста уҡығанда иң мәҙәге телдәр айырмалығында булғандыр, моғайын. Инйәр буйынысылар "анта-бынта, шулай инте-былай инте"нән һалдыра, Дим буйҙары "ҫаумы-ҫау бул", ти. Беҙ, Ҡызыл һөйләшенә өйрәнгәндәр, "уйҙайым, эштәйем, йоҡтайым", тип, ауыҙ тултырып һөйләшәбеҙ. "Сез башҡорт түгел, без башҡорт", ти асҡындар. Башҡорт теле һөйләштәргә бай бит ул. Бала саҡтан өйрәнелгән диалектта һөйләшкә килә лә ул, әммә филфакта уҡығас, әҙәби тел нормаларына күнегергә кәрәк. Хатта ки, штраф-банк уйлап табырға тура килде. Кем әҙәби норманан ситләшә, шул литрлыҡ банкаға ун тинлек аҡса төшөрә. Икмәк ул саҡта ун алты тин булыуын иҫәпкә алғанда, студент өсөн ун тин ярайһы уҡ сумма. Шулай үҙләштерҙек беҙ башҡорт теленең әҙәби матурлығын.

Һөйләш айырмаһы бер нәмә, ә бына башҡорт теленән ҡапыл ғына урыҫсаға күсеп һөйләшеп китеүе - икенсе проблема. Бөрйәндән Фәйрүзә исемле ҡыҙ уҡыны беҙҙә. Бер көн ул егеттәрҙең мунсанан ҡайтып килгәнен күргән дә, ауыҙы ҡолағына етеп, быларға "С легким паром!", тип әйтергә уйлаған. Тик теле буталып, ул егеттәргә "Счастливого пути!" тип ҡысҡырған.

### ӘЛЛӘ ҺЕҘ БАШҠОРТТАРМЫ?

Өсөнсө курстан һуң Шишмә ҡасабаһында студенттарҙың төҙөлөш отрядында эшләнек. Ял көнө Өфөгә барып килергә булдыҡ. Әмәлгә күрә, буласаҡ эш хаҡы иҫәбенән аванс биргәйнеләр. Аҡсалы студент шундуҡ шуҡҡа әйләнә бит ул. Станциялағы аҙыҡ-түлек магазинына индек. Ҡарбуз һатыла. Оҙаҡ уйламай, танһыҡ булған йыйлы яҡ тәмлекәсен алырға булдыҡ. Иң ҙурын һайланыҡ. Һатыусы ҡарбузды үлсәгескә һалғайны, үлсәме етмәне. Складтағы ҙур үлсәгескә һалып үлсәргә булдыҡ. Электричка ҡуҙғалырға ваҡыт етеп килә. Егеттәр складҡа йүгерҙе, мин перронға ашыҡтым. Электричканың ишектәре ябыла башланы. Мин аяҡты терәйем. Ишектәр пышылдай ҙа, кире асыла. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатланыуға, перронда ҙур ҡарбузды күмәкләп тотҡан егеттәр күренде. Саҡ өлгөрөп ултырып, ҡуҙғалып киттек. Кем башлағандыр, белмәйем, беҙ ҡапыл Кавказ акценты менән сит телдә һөйләшә башланыҡ:

- Хачи махарача, махарача хачим. Генацвале, биш минут хашамарачи.

Тамаҡ төбө менән билдәһеҙ телдә бар һәләтебеҙҙе һалып аралашабыҙ - шунан кинәнес табабыҙ. Төҙөлөш отряды формаһы кейгән шау-шыулы егеттәргә пассажирҙар шундуҡ иғтибар итте. Беҙ уның һайын шашабыҙ:

- Бармин харачи. Маракачи хачи.

Үҙебеҙ ҡарбузды һыйпап-һыйпап алабыҙ. Урыҫсалап һорап, бер бабайҙан бысаҡ алып, ҡарбузды бүлгеләп, күрше-тирәгә өләшеп сыҡтыҡ. Рәхәтләнеп һыйлангас, тамбурға тәмәке тартырға сыҡтыҡ. Уйын тамам булғас, башҡортсалап һөйләшеп торабыҙ. Эргәбеҙҙә тәмәке тартып торған егет:

- Һеҙ әллә башҡорттармы? - тип һорап ҡуйҙы.

### ҺАҢҒЫРАУҘАР

Шул уҡ Шишмәлә эшләгәндә үҙебеҙгә уйын уйлап таптыҡ. Шарты ябай ғына: ишетмәмеш булып, кем кемде күберәк ҡабатлата ала.

Тәрән соҡор ҡаҙыйбыҙ. Дуҫым соҡор төбөн таҙарта.

- Ошо тәрәнлек етер, моғайын, - ти ул.
- Нимә тиң? - тип, юрамал һорайым.
- Ошо тәрәнлек етер, тим.
- Ишетмәнем, нимә ти шул?
- Ошо етер... Тағы берҙе әйттерһәң, кәрәгендә бирәм.
- Әллә нимә ти?
- Кәрәгендә бирәм!..

Дуҫым тәрән соҡорҙан сыҡҡанса мин йөҙ метр араны йүгереп үткәйнем инде.

### БОГДАНОВ

Уҡытыусыларҙың да сәйерҙәре була. Әҙәбиәт теорияһынан беҙҙә оло ғына йәштәге Богданов фамилиялы профессор уҡытты. Яратҡан фәненә мөкиббән киткән фанат ине ул. Профессорыбыҙ тышҡы ҡиәфәтенә артыҡ иғтибар итмәй, йәйен-ҡышын башына ҡүн кәпәс, салғыйҙары ашалып бөткән пальто кейеп йөрөй. Ҡулында хан заманындағы ҡүн портфель. Лекцияға ингәс, ул шул портфеленән ситтәре ашалып, һарғайып бөткән ҡағыҙҙарын сығара ла, аудиторияға бөтөнләй иғтибар ҙа итмәйенсә, тәҙрәгә ҡарап һөйләй башлай. Ике сәғәт буйы туҡтамайынса һөйләп, бер тынала теманы асып һала. Шәп һөйләй - һушты алырлыҡ! Шым ғына тыңлайбыҙ, һәр бер һүҙен тиерлек дәфтәргә теркәп барырға тырышабыҙ. "Богдановтың лекцияларына конспект яҙып барығыҙ. Имтихан ваҡытында фәҡәт үҙе һөйләгәндәрҙе генә һорай", - тип, өлкән курстағылар алдан уҡ киҫәтеп ҡуйғайны.

Бер көн профессорыбыҙ аудиторияға ингәс, ғәҙәттәгесә, портфелен асты. Тик... унан ҡағыҙҙар урынына башта мунса миндеге сығарып һалды. Артабан өҫтәлгә башҡа мунса кәрәк-ярақтары сығып ятты. Иң аҙаҡтан ғына һарғайып бөткән ҡиммәтле ҡағыҙҙар килеп сыҡты.

- Ғәфү итегеҙ, мин бөгөн расписаниены бутағанмын, - тип, һис ни булмағандай, лекция уҡый башланы.

Яңы фатир алғас, әйберҙәрен күсереү өсөн ул беҙҙе ярҙамға саҡырҙы. Шунда ғына беҙ уның ысынлап та үҙ фәненең фанаты булыуына тамам ышандыҡ. Фатирында кәрәкле кейем-һалым, йыһаздан башҡаһы тик китаптар ғына ине. Былдай бай шәхси китапхананы мин башҡаса үҙ ғүмеремдә әлегә күргәнем юҡ. Профессорға ҡарата хөрмәт, хатта ғорурлыҡ тойғоһо уянды беҙҙә.

Әҙәбиәт теорияһынан имтиханды шөрләңкерәп көтөп алдыҡ. Билеттарҙы алып, урындарыбыҙға ултырғас, профессор бик ҡаты ғына итеп:

- Шпаргалки уберите, не пощажу, - тип, имтиханға үҙе менән алып килгән улына өс тәңкә тотторҙо ла, ниндәйҙер йомошо менән сығып китте.

Студент халҡы юғалып ҡала торғандарҙан түгел бит ул. Профессорҙың улына беҙ тиҙ генә ун һум аҡса йыйып бирҙек. Атаһына ошаҡлашмаһын өсөн...

### ТАМАҠ ТАМУҠҠА ТӨШӨРӘ

Киҫкә ҡарай асығыуым иҫкә төштө. Әммә бүлмәлә ашамлыҡтарҙан тоҙҙан башҡа бер ни ҙә юҡ. Ахырҙа, форточканан тышҡа ҡарай аҫып ҡуйылған түң итте алып бешерергә һалдым. (Дөйөм кухня булыуға ҡарамаҫтан, һәр бүлмәлә тиерлек йәшерен тотҡан плиткалар була торғайны). Ҡөтәм-көтәм, буласаҡ аштың ныуы ҡайнап сыҡмай ҙа ҡуя. Бер мәл плиткәнең спирале өҙөлдө. Ҡул һелтәп, ас көйөнсә йоҡларға яттым. Иртәнсәк тороп ҡараһам, өҫтәлдә ҡаны һарҡырап торған, яртылаш мөнйөлгән һөйәк ята. Баҡтиһәң, Ислам исемле иптәшебеҙ төнөн һунлап ҡайтҡан. Беҙ йоҡлап ятҡанға күрә, утты ҡабыҙып тормаған, сейле-бешле итте кимергән дә йоҡларға ятҡан. Исламға бер ни ҙә булманы. Студент ашҡаҙаны ташты ла эшкәртә тигәндәре дөрөҫтөр, күрәһең.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# СӘТЛӘҮЕК АША

■ Диабет менән яфаланыусылар әстерхан сәтләүеге ярҙамында ҡан тамырҙары һығылмалығын арттыра ала. АҠШ-тың Нью-Хейвен университеты ғалимдары белдереүенсә, был иң уңайлы һәм ябай ысул булып тора. Тикшеренеүселәр уртаса 58 йәштәрҙәге диабет сирлеләр төркөмөн күҙәткән. Сирлеләр көнөнә мотлаҡ 56 грамм әстерхан сәтләүеге ашаған һәм эксперимент аҙағына уларҙың ҡан тамырҙары һығылмалығы артҡан, дөйөм һәм "зарарлы" холестерин күләме кәмегән. Сәтләүектәрҙең юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып, дауаланған саҡта ғалимдар тән ауырлығын даими күҙәтеп торорға кәңәш итә.

■ Ҡайһы бер минералдар һәм кислоталар йоҡоно яҡшырта ала, әммә иң тәүҙә дөрөҫ туҡланырға һәм әүҙем тормош алып барырға кәрәк, ти Америка ғалимдары. Йоҡлар алдынан бер стакан һөт эсеп, бер ус сәтләүек ашаһаң, яҡшы йоҡлайһың икән. Сәтләүектәрҙән бразилия сәтләүегенә өҫтөнлөк бирегеҙ, ул калий менән селенға бай, ә һөттә кальций бар. Насар йоҡлаусылар туҡланыу рационынан майлы ризыҡтарҙы, бигерәк тә, аҡ майҙы һәм сырҙы алып ташларға тейеш.

■ Квинсленд һәм Калифорния университеты ғалимдары туберкулез булдырыусы бактериялар үсешен туҡтатыу ысулын тапҡан. Тикшеренеүселәр төркөмө холестерин берләшмәләренең холестерин бактерияларына йоғонтоһон тикшергән. Холестерин, билдәле булыуынса, бындай микроорганизмдарҙың ауырыу тыуҙырыу һәләтлегенә тәьҫир итә. Эксперименттар күрһәтеүенсә, әгәр ҙә был бактерияға гены үҙгәртелгән холестерин бирһәң, ул артабан үҫә алмаясаҡ. Әммә әлегә ғалимдар быны сәбәбен асыҡлай алмаған. Һәр хәлдә, был асыш хәүефле инфекция менән көрәшеүҙә ярҙам итәсәк. Туберкулез йоғошло сир, һәр 21 секунд һайын бер кеше туберкулездан үлә.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан эксперттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

■ Быға тиклем күпме йоҡларға тип бәхәсләшә инек. Бына Британия университеты ғалимдары ҡайҙа йоҡлау яҡшыраҡ икәнен тикшереп ҡараған. Бының өсөн эксперттар махсус һораулама төҙөгән һәм шундай һығымтаға килгән. Баҡтиһән, ял итеү өсөн диванды йә карауаттың һул яҡ өлөшө яҡшыраҡ икән. Һул яҡта йоҡлаусылар үҙҙәрен иртән яҡшыраҡ тойған, көнө буйы юғары кәйефтә йөрөгән.

■ Кишер - бик файҙалы йәшелсә, ти ғалимдар. Уның составындағы каротин хатта бешергәндән һуң да һаҡлана. Каротин сығанағы булыуҙан тыш, ул организмдан артыҡ һыуҙарҙы сығара, һыу-тоҙ әйләнешен яҡшырта. Кишерҙе салаттарға, пудинг, суфлеға өҫтәп ашау файҙалы. Шулай уҡ өлкән кеше өсөн тәүлегенә 200 мл кишер һуты эсеү кәрәк.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Сираттағы сәфәребеҙҙең маҡсаты - Балаҡатай районының Көркәй ауылында күршелә генә йәшәгән ике улының ғаиләһенә таянып, ҡартынан ҡалған йортта бер үҙе йәшәп ятыусы, башҡорттарҙың, бигерәк тә балаҡатай ырыуы башҡорттарының кейеме тураһында мәғлүмәттәр, хәтирәләр һаҡлаусы Сания апай Усманова менән осрашыу ине.**

# БУЛДЫҠЛЫ, ЕГӘРЛЕНЕҢ...

## фекере киң, теле лә бай



### Ҡулында - эш, телендә - һүҙ

90 йәшен ҡыуған ғәжәп йор телле, асыҡ зиһенле инәйҙең хәтеренең төҙөклөгө, элекке кәсептәрҙе бөгөнгөләй итеп һөйләп биреүе һоҡландырҙы. Оҙаҡ йылдар почтала эшләгән, әле лә башҡортса журнал-гәзиттәр уҡып, радио тапшырыуҙарын тыңлап йәшәгән кешенең теле диалект үҙенсәлектәрен дә юғалтмаған. Балаҡатай ырыуы башҡорттарының телендә һөйләшкән Сания инәйҙең телмәрен өйрәнеп, башҡорт теленең төньяҡ-көнсығыш һөйләше буйынса фәнни хеҙмәт яҙырға була. Тел ғалимы, башҡорт диалекттары һүҙлеген һәм картаһын төҙөгән фән докторы Нәжибә Мәҡсүтова тап ошо төбәктән күп һүҙ ынйыларын йыйып, әҙәби телде байытыу юлдарын күрһәтә. Сания инәй менән һөйләшкәндә "Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген" төҙөүҙә ҡатнашҡан ғалимә Урия ханым Яруллинаның һүҙе иҫкә төшә: "Телде һаҡлаусылар - башҡорт ҡатындары, әммә уларҙың булдыҡлы, егәрле булғаны, етеш һәм бай йәшәгәне. Ярлы йә ялҡау кешенең теле лә ярлы, ашау-эсеүҙән ары китмәй, ә ҡулы эш белгән, күҙе эш күргән, теле эште һөйләгән кешенең фекере киң, донъяһы етеш, уның күңеле лә бай, теле лә тулы..."

Ғалимәнең фекерен раҫлаған кеүек, Сания инәй шулай тип һүҙ башлап, яйлап ҡына хәтер йомғағын һүтә бирҙе: "Һөнәрҙе күп белде беҙҙең башҡорт, һәләк кәсепсән булды, һәр бер эш-һөнәренә һүҙе-атамаһы бар. Әсәйем оҫта булды, үҙе әҙерләгән киндерҙе үҙе һуғып, кейем тегеп, беҙҙе кейендерҙе. Ағыбыҙҙа әсәй әҙерләп-иләп-тегеп биргән аяҡ кейеме булды. Ифрат күп текте ул аяҡ кейемен, бөтә кеше белде уның оҫталығын..."

### Аяҡ кейемдәре тураһында



Сания Хәсән ҡыҙы үҙе бала саҡта кейгән аяҡ кейемдәрен бөгөнгөләй асыҡ хәтерләй, уларҙың нисек эшләнешен бәйнә-бәйнә һөйләп китә: "Аяҡ кейеме - сабата. Шундай әйтем бар: "Майҙап ашаһаң, сабата ла тәмле". Сабатаны Фазыл бабай йүкә ҡабығынан үрҙе. Йәш йүкә ҡабығын һыҙырып, алып барып бирһәк, яңы сабаталы булабыҙ. Йүкә ҡабығын киптереп, он итеп тарттырһаң, ул ашарға ла яраҡлы була. Уҫаҡтың, уны ауһаҡ та тибеҙ, ҡабығын да ашаныҡ. Аслыҡ бөтәһен дә ашарға мәжбүр итте...

**Ҡышҡы аяҡ кейемен** мал тиреһен иләп, инәйем үҙе тегә ине. Беҙ ҙә ҡысылып-ярҙамлашып йөрөй торғайныҡ. Инәйем арыш онон ҡайнатып, тәүҙә әсетке эшләй. Һыйыр тиреһен һыҙырып, майынан таҙартып, йылы мунсала әсеткегә һалып ултыртып ҡуя ла, тиренең йөнө ҡойолоп бөткәнсе тота. Тал ҡабығын һыҙырып, балта менән төйә, шунан уны көнө буйы һары-көрән булып буяуы сыҡҡансы ҡаҙанда ҡайната, шул буяуға теге тирене һала - һыуынғас, ул күнгә әйләнә. Был тире-күндән аяҡ кейеме - **сарыҡ, ҡата, тәпәш башмаҡ, бейек башмаҡ, ситек** тегелә.

Йыл уратаһына кейгәнебеҙ тула ойоҡ булды. Уны нисек бәйләйҙәр? Һарыҡ йөнөн йыуан итеп иләйҙәр, сыраҡтан (ҡаты агастан) дамбыр энә кеүек ырғаҡ эшләп алалар, шул ырғаҡ менән йыуылмаған йөндән быйма һымаҡ итеп оҙон ойоҡ бәйләйҙәр, шуны эҫе һыуҙа һабынлап ыуып-ыуып йыуалар. Аҙаҡ тандыр ғына мейестә киптереп алалар. Йөнө бешегә, ныҡ тартылып ултыра, шул тула ойоҡ була инде.

**Ҡынжыраҡ**, ҡынйыраҡ та тибеҙ, ул күндән тегелә. Оло малды һуйғас, уның тубыҡ өлөшө айырым тунап алына. Иң ҡаты ерен, йәғни тупсыуын тунап алалар. Уны йомшартырға кәрәкмәй, шуға әсеткегә түгел, ә тал ҡабығы буяуына һалалар. Әҙер булғас, күндән аяҡ кейеме тегелә. Табанда - тире, йөнөн тышынан ҡалдыралар, әскә - йөҙлөгөнә - күн ҡуялар. Аяҡ башына кейелә торған башмаҡ әҙер булғас, уға ялғап бышым тегәләр - ул ҡалын киндер туҡыманан ике ҡатлап тегелә, йөйө арт яҡта ҡала. Киндер бауҙы ишеп, өҫ яҡлап бышым эсенән үткәрәләр, шуны балтыр өҫтөнән тарттырып, бәйләп ҡуялар.

**Сарыҡ** та шулай эшләнә, тик уның табаны ла, йөҙлөгө лә күндән була.

**Ҡатаның** да йөҙлөгө лә, табаны ла күндән була. Ҡунысы бейек, күндән эшләнә. Ҡуныҫына бышым тегелә, өҫтәп тегеп ҡуйыла, бау менән бәйләнә. Табаны мул булһын өсөн бөрөп тегәләр.

**Тәпәш башмаҡ, бейек башмаҡ** - тоташ күндән була. Үксә түгел, әҙерәк кенә үксәлек ҡуялар.

### Ҡатын-ҡыҙ кейеме

**Һарыҡ йөнөнән һуғылған шәл ябылалар ине беҙҙең яҡта.** Уны буямай торғайнылар.

**Әҙрәс бишмәт** - ҡатындарҙың ҡунаҡтарға барғанда ғына кейә торған махсус тектергән бишмәте, уның тышлығы бәрхәттән була, уҡа йә тәңкә баҫыла, эслеге һырыла.

**Билле камзул** - ул да бәрхәт тышлы, эслек ҡуялар. Түңәрәкләп икешәр ҡат уҡа тегәләр. Туҡыманы ыңғайына бесәләр, ыңғайына тегәләр. Рәтен белеп текһәң, тиҙ туҙмай.

**Бишмәт** - сатин, бәрхәт тауарға бер ҡат эслек ҡуйып, йөн һалып, һырып тегелә. Беҙ үҫкән саҡта юклыҡ булғас, мамыҡ ҡуйып, һырыған бишмәт кейҙек. Тамғалар бишмәттә лә була торғайны.

**Сыба** - йылы сәкмән (тәйһән, тәйән кейеүгә, йәғни көндәлек кейеүгә).

**Түшелдерек** бер ҡат ситса күлдәк өҫтөнән эстән кейелә.

Йәштәргә тәғәйенләнгәнен **көүҙәле алъяпҡыс** тибеҙ. Көүҙәле алъяпҡыстың арҡа - ябыҡ, түш - ябыҡ, бер яҡтан ҡултыҡ аҫына хәтле тегелә, икенсе яҡтан - элмәле ягында - дүрт һәҙәп ҡуйыла.

### Ҡалпаҡтар



**Ҡалпаҡ** - ул ниндәй ҙә булһа биҙәк һалынған баш кейеме. Йәш ҡатындар, килендәр тик **сикә-ҡалпаҡ** кейә. Сикә-ҡалпаҡ тәпәш кенә - бер-ике иле киңлегендә, бер ярым сантиметр тирәһе, ул маңлайҙы ҡаплабыраҡ, алға төшөрөп кейелә, яулыҡ аҫтынан биҙәге генә күренеп тора. Тәңкәнән дә, уканан да, елбәҙәктән дә эшләйҙәр биҙәкте. Сикә-ҡалпаҡты тоҡон (ҡалын) еп менән елкә яғына тарттырып бәйләйҙәр, ҡуҙғалмай-нитмәй ныҡ тора, өҫтөнән яулыҡ ябыналар.

✓ *Беҙҙең яҡтарҙа муйсаларҙы совет заманында мәжбүри йыйып алғандар, трактор һатып алырға кәрәк, тип әйттеләр, тигән була торғайнылар. Музейҙарҙан килеп тә байтаҡ әйберҙе йыйып алып киткәндәр.*



**Тупый-ҡалпаҡ** теүәтәй кеүек йоморо була, башҡа көпләнеп кенә тора, уны күпселеген ҡарсыҡтар кейә. Тупыйҙы төрлөсә һырыйҙар. Ҡамсат бүрек кеүек тә һырып кейәләр. Маңлайсаһына мәрйен-аҡыҡтар тегелә, шуға күрәме, ҡайсаҡ "аҡыҡ-ҡалпаҡ" тигән булып та ебәрәләр.

**Ҡырпыулы бүрек** - һарыҡ тиреһенән йоморо бүрек тегелә лә ҡырлатып аҡ тире - тар ғына аҡ ҡырпыу ҡуйыла, шуны **ҡырпыулы бүрек**, ти торғайнылар, һарыҡ йөнө эскә ҡарап тора, бүрек тышлы була, тышы - эшбиттан (йоҡа йөн тукыма). Ир-ат шуны кейҙе. Салауат батырҙың йәшел **ҡамсат бүрке** лә ана шулай йәшел эшбит менән тышланған, ҡиммәтле шәшке тиреһе менән ҡырлатылған ҡамсат бүрек булған инде ул. Затлы тоҡом, старшина бит инде ул, байҙарса кейенгән...

## Көмөштән беҙҙең муйса



Электән кейемгә тәңкә ҡайыу булған. **Муйса** бик күп булған беҙҙең яҡта. Ҡатындарҙың күкрәген-түшен ҡаплап торған түшелдеректең бәләкәйерәге - **әмәйлек**, ҙурырағы - **муйса**. Муйса шау тәңкәнән тора, өҫ яҡлап эре көмөш тәңкәләр - һумлыҡтар тегелә, уларҙы аҫтан-өҫтән уратып, вағыраҡ тәңкәләр теҙелә. Эреһе лә, вағы ла теҙеп тегелә, тура ла, ҡыйшыҡ та китә. Свердлау, Рәүҙә (Ревда) заводтарында эшләгән ир-аттың ҡатындары көмөш тәңкәле муйса кейгән. Беҙҙең яҡтарҙа муйсаларҙы совет заманында мәжбүри йыйып алғандар, трактор һатып алырға кәрәк, тип әйттеләр, тигән була торғайнылар. Музейҙарҙан килеп тә байтаҡ әйберҙе йыйып алып киткәндәр. Шау көмөш тәңкә юҡ бит ул хәҙер. Бөгөн тәңкә зырғып (кире ҡаҡлыҡып) тора, тишеп булмай.

Йәш килендәр сикә-ҡалпаҡ кейә, өҫтөнә яулыҡ йәки ҡушъяулыҡ ябына, сәсте үрә, толомона сулпы таға. Түшенә муйса кейә. Шунан **һағылдырыҡ** таға, **ҡалпаҡ** кейә, **ҡушъяулыҡ** ябына. Һағылдырыҡ әйҙәген уратып тартылып тора, ыҫпаяҡай була - әлмәйеп, мөйын-фәләне күренмәй. Һағылдырыҡ килен булып төшкәндә үк кейелә. Бер йола бар: яңы төшкән киленде шау боронғоса кейендереп, бесән саптырғандар, ураҡҡа төшөргәндәр, оло мейес алдында ҡоймаҡ ҡойҙорғандар - тире тамһын да тиҙерәк ерекһен, тигәндәр. Насар аҡыл түгел бит? "Килен кеше - ким кеше, алабайға тиң кеше," тиһәләр ҙә, килендең ҡиәфәте бик күркәм булған. Артында сулпыһы сылтырап йөрөгән, сулпыһы булмаһа, сылтырап торһон өсөн бауҙың буйына өҫ ҡат итеп тәңкә тегеп алыр булған.

Оло әбейҙәр ҙә муйса кейә, тик тәңкә урынына таҫма тегә - рәт-рәт ҡатлап таҫма йөрөтә, еңелгә килә, тәңкә сылтырауы нимәгә ул әбей кешегә, һөйәктәре шылтырамаһа ла бик арыу.

**Уҡа** элек төрлө һәм күп булды, уны тубалсылар (ҡырҡтартмасылар) таратты, һатты, әйбергә алмашты. Ҡалпаҡ эшләмәгә төрлө нәмә алдыҡ тубалсынан. Ҡалпаҡтың маңлай тәңгәлен биҙәмәгә кәрәкле ҡый-ҡыуатты ла уларҙан ала инек.

**Өрфиә** - сүкелгән ҡалай тәңкә.

**Ҡытай** - ялтыр ваҡ мәрйен, ул бик күп булды. **Балдаҡ** тигәне - уртаһы тишек түңәрәк ялтыр тәңкә ине. **Уҡа** - алтынлы-көмөшлө төрлө яҫылыҡтағы таҫма. **Елбәҙәк** - төрлө төҫтә емелдәп торған йылтыр йоҡа таҫма. **Һырға** - көмөш тәңкәләрҙе сүкеп-яллап эшләнгән биҙәүес, һирәк булды, ҡиммәтле бүләк булып йөрөнө, муйсаға тегеп ҡуйылды, ҡолаҡҡа таҡмаға тип эшләнгәне лә бар ине.

## Ҡайыу оҫталары

**Ҡайылған кейемдәрҙе** беҙ белгәндән кейәләр балаҡатай ырыуы ҡатындары. Мәликә, Сабира инәй кеүек ҡайыусы оҫталар бөтә ауыл ҡатындарын ҡайып кейендерҙе.

Өй эсе ҡаралтылары араһында ла ҡайылған нәмәләр күп булды. **Буй ҡорма, ҡорғанаҡ** та тиҙәр, мейес башынан, ишек-тәҙрә баштарынан уратып ҡорола. Өй һәләк йәмле була. Ҡашыяҡты шаршау менән бүлеп ҡуялар. Ҡайны өйөндә шаршау менән йәш киленгә бер мөйөштө бүләләр. Элек шаршауһыҙ кейәүгә барыу - ғәрлектең дә ғәрлеге ине, ләкин ауыр замандарҙа уныһы ла онотолдо. Шулай ҙа, һүҙгә ҡалмайым тигәне, кешенән алып тороп булһа ла ҡыҙын кейәү йортона шаршау менән оҙата ине.

## Һуғылған таҫтамал



Инәйем һәләк күп һуҡты таҫтамалын да, шаршауын да. Киндерҙән, етендән һуҡҡан таҫтамал һәләк матур була. Таҫтамал һуҡҡандағы эш тәртибе **епте оҙатыу, ҡутәртеү, сүпләү**, бер биҙәктең яртыһынан йәнәшәлә икенсе биҙәк һалыныуын **түгеү, көрөҫтән алыу, ҡылыстан алыу** тиҙәр. Тал ботағын шымартып, **шәбе** яһала. Бер урынға тартылған-оҙатылғанептәрҙең араһына шәбене тығып, епте аралап-ҡутәртеп бараһың. Был бик ваҡ эш. Күҙ кәрәк, иҫ кәрәк, елкә кәрәк, тигәндәй. Таҫтамал һуғыуҙың **әрәсәһе** (мөне, мәшәҡәте) етерлек...

## Туй хәстәрҙәре

**Суптарлы ыштан** - киндерҙән ҡыҫҡа балаҡлы эске ыштан кейәү егеткә һуғыла. Туйға килешкән саҡта уҡ ҡыҙҙың бирнәһендәге кейәүгә тип әҙерләгән ошо әйберҙе күрһәтәләр. Йәнәһе, энә-еп тота белмәһәң, ҡара уны, ҡыҙый...

**Морондоҡ инәй, морондоҡ атай.** Килен төшөргән ҡәйнә, алдан әйтеп, буласаҡ киленгә морондоҡ инәйатай билдәләп ҡуя. Кейәүҙең ҡыҙ туғандары киленгә морондоҡ инәй була алмай, бары тик ир туғандары яғынан ғына морондоҡ инәй-атай - ире менән ҡатыны бергә була ала. Килен уларға тәғәйенләп бүләк әҙерләй - морондоҡ инәйгә алъяпҡыс ҡайып килтерә, морондоҡ атайға ҡайыулы таҫтамал бирә. Морондоҡ инәй менән атай был бүләктәрҙе бик ҙур хөрмәт белдереп ҡабул итә. Кейәүҙең ата-инәһе менән килендең морондоҡ инәһе-атаһы бер-береһенә **"уртаҡ"** тип өндәшә башлай. Морондоҡ инәй киленде ҡаршылап, бал ҡаптыра, май ҡаптыра, кейәҙгә баҫтыра. Аҙаҡтан да уны ул-был менән таныштырып, өйрәтеп, сер бүлешеп, ғүмер буйы ҡурсып тора торған бер яҡын кешегә әүерелә.

Киленде **һыу башлатыу** - оло йола. Уны ла морондоҡ инәй хәстәрләй - силәген-көйәнтәһен әҙерләй, килендең бүләктәрен барлап ҡуя. Морондоҡ атай ҙа киленгә, йәш ғаиләгә ярҙамға, кәңәшкә гел генә әҙер тора.

## Элдекте беҙ белдек...

**"Элдек"** - килен бүләктәре араһындағы матур бүләк, ул төрлө йөн ептәрҙән үреп-ишеп, остарына суҡ ҡуйып, бала-сағаға, йәштәргә таратырға ҡырҡ-илле дана элдек эшләнә. Һикһән-туҡһанға еткерә әкрәбәһе күп булғаны. Күрше-ҡулан тиҙ генә йыйылышып эшләп бирә уны, ҡайсаҡ таҫтамалын, алъяпҡыстарын да ҡайыша. Йәш ғаилә бәхетле йәшәһен тип теләп үрелә элдек. Элек уны эшләүгә кизе йәки етен еп тотона торғайныҡ.

Киленде һыу башлатыуға алып киткәндә морондоҡ инәй элдекте шунда ҡатнашыусыларға тарата. Кейәү егете ҡыйыҡ башына менеп тә йыйылған халыҡ өҫтөнә элдек ырғыта. Бала-сағa уларҙы ярышып йыйып ала. Һәләк күңелле була. Беҙҙә элдекһеҙ туй үтмәй. Иң көтөп алынған күренеш, иң матур иҫтәлекле бүләк - элдек. "Кем туйында булдығыҙ, элдектәре ҡандай матур", тип кинәнешеп ҡарайҙар туйҙан ҡайтҡас. Уны тәҙрә башына, көҙгөгә элеп ҡуйбыҙ...

## Килен күреү - йәшәмәгә йүн биреү

Морондоҡ инәй менән морондоҡ атай **күрнис** (күренеш) ваҡытында ла иң төп башлаусы, ойоштороусы, килендең бирнәһен күрһәтеп, уға ярҙам итеүсе, бүләктәрен таратыусы, төшкән йортонда урынлаштырыусы була. Ауыл халҡы, күрше-тирә, кейәүҙең туғандары килен күрергә, бирнәһен ҡарарға, **күрнис алырға** тип килә. Килен бүләге - ҡыҙҙарға ҡайыулы алъяпҡыстар, малайҙарға ҡайыулы ҡулъяулыҡтар инде.

Килендең ҡулдҡтәрен дә ҡарайҙар, тегелешен тикшерәләр, сағыштыралар, өйрәнәләр.

Кейәү ҡыҙҙы оҙатып алып ҡайтырға барған саҡта тышы ҡайылған **кейәү мендәрен** әләктереп, ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып сыға ҡайны-ҡейнә өйөнән. Уны еңгәйҙәр шаяртыпкөлөп кейәүгә тапшыралар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был яҙмала Сания инәй Усманова һөйләгәндәрҙе мөмкин хәтле үҙгәртмәй һаҡларға тырыштым - тере телдең көсө, дәрте, телмәр ағышы ла һиҙелер, тип өмөтләндем... Оло Эйек йылғаһы буйында "ынтымат кеше" тигән һүҙ бар: ул хәстәрле, маҡсатына ынтылышлы, йыйнаҡ, аккурат, тигәнде аңлата. Ысынлап та, ҡомарҡтыны таныған, һаҡлаған, уның асылын, дәрәжәһен, әһәмиәтен аңлаған, әләф-тәләф итмәгән, кәрәк урыны-ваҡытында йәтешле ҡуллана белгән ынтымат кешеләр халыҡ араһында айырылып тора. Сания инәй ҙә шундайҙарҙың береһе. Хоҙай уға сәләмәтлек бирһен.**

**Сәрүәр СУРИНА.**

### УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 28-се идея
## Һәр кемде шатландырып булмай

Башҡаларҙы шатландыра алмауыңды тойоп, төшөнкөлөккә бирелгән саҡтарың буламы? Ғүмер буйына башҡаларға ярҙам итергә һәм уларҙы шатландырырға маташып, алмашына тик шелтә һүҙҙәре ишетеп, һинең ҡылығыңды дөрөҫ аңламауҙарын күреп, йәнең үртәләме? Әгәр шулай икән, һеҙҙең иғтибарығыҙға Монтендың бер ҡыҫҡа ғына фекерен еткерер инем: "Кешегә үҙе хаҡында иркен фекерҙәрҙе тыңлау өсөн ныҡлы ҡолаҡтар кәрәк".

Үҙ фекерҙәребеҙҙә беҙ ни тиклем һаҡ һәм аҡыллы булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең ҡылыҡфиғелдәребеҙҙе һәм принциптарыбыҙҙы кире юҫыҡта аңлатыусылар һәр ваҡыт табыла. Берәйһе аҡсаһын йәлләмәй, уңлы-һуллы тотона икән, был кешене бушҡа аҡса туҙҙырыусы йәки эшлекһеҙ тип иҫәпләүсе мотлаҡ табыласаҡ. Әгәр, киреһенсә, аҡсаңды һаҡлап ҡына тотонһаң, кем дә булһа һине барыбер һаран тип атаясаҡ. Һиңә ҡарағанда либераль ҡарашлыраҡ булған берәйһе һине бер урында тапаныуҙа, үҫмәүҙә, консервативлыҡта ғәйепләйәсәк. Ә һинән дә ябайыраҡ булғандар һине артыҡ тәүәккәл либерал тип атаясаҡ. Әгәр кемдер беҙҙең позицияға ҡаршы сығыш яһаһа, былдай кешене беҙ тиҫкәре фекерле тип атайбыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ йыш ҡына үҙебеҙҙе ғәйеплӛр урынға, башҡаларҙы ғәйепләйбеҙ.

Әгәр кеше нимәнелер эшләмәһә, уны эшһеҙлектә ғәйепләйҙәр. Әгәр кеше нимәлер эшләй икән, уны ошо эше өсөн ғәйепләйҙәр. Бер үк кешеләр беҙҙе шул үк ҡылыҡтарыбыҙ өсөн бер ваҡыт маҡтаһа, икенсе ваҡыт ризаһыҙлыҡ белдереүе ихтимал. Кемдеңдер ғүмер буйына бер кешене булһа ла (үҙен дә индереп) даими ҡыуандырып ҡына йәшәүенә шикләнәм мин.

Һин үҙең менән һәр ваҡыт ҡәнәғәтһеңме? Ниндәй маҡсатты күҙ уңында тотоуына ҡарамаҫтан, мотлаҡ "ни өсөн тағы ла берәй нәмә менән шөғөлләнмәйһең?" тип һорауҙы табыласаҡ. Тимәк, иң яҡшыһы - хәлде үҙебеҙ аңлағанса баһалап, үҙ инаныуыбыҙға таянып, уйлап эш итеү.

Һәр ваҡыт хаталаныу ихтималлығын танырға әҙер булырға кәрәк. Ләкин башҡалар беҙҙең хаталарҙы ғәфү итеренә ышанып булмай. Әгәр беҙ башҡаларҙың беҙгә түҙемле булыуын көтәбеҙ икән, тимәк, беҙ үҙебеҙ уларға түҙемле булырға тейешбеҙ. Һәр ваҡыт аҡыллы Монтендың "Кешегә үҙе хаҡында иркен фекерҙәрҙе тыңлау өсөн ныҡлы ҡолаҡтар кәрәк" тигән һүҙҙәрен иҫтә тоторға тейешбеҙ. Әгәр берәй яҡының һинең ҡылыҡтарыңды ғәйепләй икән, "Мин һәр ваҡыт бөтә кешеләрҙе лә шатландыра алмайым" тигән ябай һүҙҙәрҙе иҫеңә төшөр. Әгәр һин бөтә кешегә лә ярарға, олтан булырға маташһаң, бер ваҡытта ла теләгәнеңә ирешә алмаясаҡһың.

Алға бар һәм нисек барһың, шулай булып ҡал; ҡайһы берәүҙәр мотлаҡ һине тәнҡитләйәсәген аңла һәм шуға һәр ваҡыт әҙер бул. Уларға рәхмәт әйт тә, ниндәй яҡшы нәмәләргә һәләтлеһең, шуның менән шөғөлләнеүеңдә дауам ит. Ысынбарлыҡ менән йәшәһәң, һине һәр ваҡыт тәнҡитләйәсәктәр.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 6 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.30 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Знахарь". [16+]
23.25 Д/ф Премьера. "Гарик Сукачев. То, что во мне". К 175-летию Русского географического общества. [18+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-10". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Берёзка". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце-2". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Ради добра. [6+]**
**17.30 "Пофутболим?" [12+]**
**18.00, 4.30 "Бай бакса". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**2.45 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 7 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.30 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Знахарь". [16+]
23.25 Д/ф Премьера. "Гарик Сукачев. То, что во мне". К 175-летию Русского географического общества. [18+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-10". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Берёзка". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 Спортивная история. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Детей много не бывает. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**2.30 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 8 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.30 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Знахарь". [16+]
23.25 На ночь глядя. [16+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-10". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Берёзка". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Д/ф "Любовь моя - мелодии души". [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Спектакль "Эх, друг Байтимер..." [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 9 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.20 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Знахарь". [16+]
23.25 Премьера. "Гол на миллион". [18+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-10". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Берёзка". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай бакса". [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15, 23.00, 4.30 Автограф. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.30 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**2.30 Спектакль "Операция". [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 10 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.45, 2.35 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.20 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Фабрика звезд". Лучшее. [12+]
23.20 Х/ф Премьера. "Близняшки". [16+]
1.00 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.50, 3.15 Т/с "Тайны следствия-10". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
23.45 Х/ф "Рябины гроздья алые". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце-2". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 4.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**17.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]**
**1.30 Уфа. Живое. [12+]**
**2.45 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

## 11 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Тамара Синявская. Созвездие любви". [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.00 "День семьи, любви и верности". Праздничный концерт. Лучшее. [12+]
18.00, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Х/ф Премьера. "Хищник". [18+]
0.55 Наедине со всеми. [16+]
2.20 Модный приговор. [6+]
3.05 Давай поженимся! [16+]
3.45 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 "Сто к одному".
11.00 Вести.
11.30 "100ЯНОВ". [12+]
12.30 "Доктор Мясников". [12+]
13.40 Х/ф "Мезальянс". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Судьба обмену не подлежит". [12+]
1.05 Х/ф "Лжесвидетельница". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Йәйләү". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Сыйырсык". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 Земляки. [12+]**
**20.30 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Спектакль "Земляки". [12+]**
**2.00 Итоги недели (на баш. яз.)./. [12+]**
**2.45 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 12 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.40, 6.10 Т/с "Тонкий лед". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.00 Премьера. "Моя мама готовит лучше!" [0+]
16.00 Большие гонки. [12+]
17.25 Русский ниндзя. [12+]
19.15 Три аккорда. [16+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". [12+]
23.45 Х/ф "Жизнь Пи". [12+]
1.50 Наедине со всеми. [16+]
3.15 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.25, 1.30 Х/ф "Мечтать не вредно". [12+]
6.00, 3.15 Х/ф "Последняя жертва". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Устами младенца".
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 "Сто к одному".
11.00 Вести.
11.30 Х/ф "Не было бы счастья-2". [12+]
15.30 Х/ф "Огонь, вода и ржавые трубы". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**10.45 "Байтус". [6+]**
**11.00 "Книга сказок". [0+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә.Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Башҡорттар. [6+]**
**15.30 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00, 4.15 Концерт НСО РБ. [12+]**
**18.45 100 имен Башкортостана. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.45 Спектакль "Путем взаимной переписки". [12+]**
**3.00 "Млечный путь". [12+]**

✓ *Һөжүмгә һөжүм менән яуап бирмәгәндән һаҡлан: ул бер ваҡытта ла һине лә ғәфү итмәйәсәк, үҙ-үҙеңде ғәфү итергә лә бирмәйәсәк.*

*(Бернард Шоу).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШЫМ ЭЙӘМ ҺИҢӘ, БАШҠОРТОҢДО КӨЙЛӨ ХАЛЫҠ ИТКӘН ҠУРАЙЫМ!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**26-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Камаз. Бикбаев. Катод. Хәбәр. Уймаҡ. Ейәнсәр. Бастион. Талаҡ. Тәнҡит. Асы. Уҡлау. Ҡарт. НАМИ. Рәсем. Взвод. Урҙа. Реклама. Уйғыр. Ойотҡан. Траулер.

**Вертикаль буйынса:** Байышев. Хөсәйенов. Ихтиандр. Бәлә. Еҙғорт. Рента. Кәкүк. Ахилл. Алатау. Таныҡлыҡ. Раджа. Завод. Нур. Урт. Утрау. Анаҡ. Алҡа. Ҡаҡ. Уймыр.

*БАҠСА*



# АЯҠ АҪТЫНДА ҮҪӘ

**Аптеканан дарыу һатып алып, аҡса сарыф иткәнсе, был үҫемлектәрҙең барыһын да һис бер ауырлыҡһыҙ баҡсала сәсеп үҫтерергә була. Һәр төрлө сирҙе дауалау ғына түгел, уны иҫкәртеүҙә лә тәбиғи үҫентеләрҙең файҙаһы ҙур, сөнки улар организмда синтетик дарыуҙар ише һәр төрлө ҡатмарлылыҡтар тыуҙырмай, ә һәр йәһәттән дә файҙаға ғына.**

● **Ҡара шалҡан** - бөйөрҙән һәм бәүел ҡыуығынан ташты һәм ҡомдо ҡыуҙыра, бронхит, катар, туберкулезды дауалай, үт һәм бәүел ҡыуҙыра, бала имеҙеүсе ҡатындарҙың күкрәк һөтөн арттыра.

● **Ирәүән** (ревень) - ашҡаҙан, эсәк сирҙәренән, эс ҡатыу, эс күбеүҙән ярҙам итә. Кеҫәл, компот, ҡайнатма рәүешендә ҡулланыла, унан бәлеш тә һалалар.

● **Петрушка** - ҡанда гемоглобинды күтәрә, теш ҡаҙнаһы ҡанауҙан, бөйөр, күҙ сирҙәре, колит, елһенеү, простатиттан, организмға көс туплау өсөн, бөжәктәр тешләгәндә файҙаланыла.

● **Редис** - балалар диатезында (төнгөлөккә ҡабул итергә), әҫпе, аҙ ҡанлылыҡ, хәлһеҙлектән, йөрәк-ректе баҫыу өсөн файҙалы. Витаминдарға бай.

● **Кишер** - бөйөрҙә һәм бәүел ҡыуығында таш булғанда, геморройҙан, янған-туңған урынды дауалауҙа, сей яра, йәрәхәттәрҙән файҙалы.

● **Кәбеҫтә** - һары ауырыуынан, йүтәл, тауыш бөткәндән, эс ҡатыуҙан, подагра, йоҡоһоҙлоҡтан, ашҡаҙан-эсәк сей яраһынан, һимереүҙән, шәкәр ауырыуынан дауа.

● **Томат** - йөрәк, ҡан тамырҙары, бөйөрҙәге таштар, енес биҙҙәре, йәрәхәт һәм авитаминоздан дауа.

● **Ҡыяр** - һимереүҙән, бауыр, бөйөр, ашҡаҙан-эсәк сирҙәренән дауа, шлактарҙы ҡыуҙыра.

● **Фасоль** - диабет, ҡан баҫымы сиренән, бөйөрҙәге ташты ҡыуҙырыу өсөн, антибиотик сифатында файҙалы.

● **Ташҡабаҡ** - экзема, эс ҡатыуҙан, орлоҡтары бабасырҙан дауалай.

● **Сөгөлдөр** - составында каротин һәм С витамины күп, ул эс ҡатыуҙан, цинга, ҡан баҫымы юғары булғанда, аҙ ҡанлылыҡтан дауа.

● **Бәрхәт үләне** - елһенеүгә ҡаршы ҡулланыла, бәүел һәм тир ҡыуҙыра.

● **Тәмәке үләне** - ҡысынманан, ҡысыныусы сабыртмалар һәм башҡа тире ауырыуҙарынан дауа.

● **Һары мәтрүшкә** - тын юлдары, үпкәләр, баш ауырыуынан (мигрень), ҡан баҫымы, әҫпе, ашҡаҙан, эсәк сирҙәренән файҙалы.

● **Аҡ сәскә** (ромашка) - бауыр, атеросклероз, бронхит, бауыр, үт ҡыуығы елһенеүе ауырыуҙары ваҡытында һәм сәстәрҙе нығытыу өсөн ҡулланыла.

● **Ҡуҙғалаҡ** - витаминдар сығанағы.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Июль (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (15) дүшәмбе | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 7 (16) шишәмбе | 3:21 | 4:51 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 8 (17) шаршамбы | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |
| 9 (18) кесе йома | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |
| 10 (19) йома | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |
| 11 (20) шәмбе | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |
| 12 (21) йәкшәмбе | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# КАЛЬЦИЙ ТУРАҺЫНДА...

## хата ҡараш




Организмды кальцийға байытам тип өҫтәмә рәүештә дарыуҙар ҡулланыуҙың бер файҙаһы ла юҡ, тип белдерә табиптар. Яңы Зеландиялағы Окленд университеты ғалимдары оҙайлы тикшеренеүҙәр үткәргән, унда өҫтәмә рәүештә кальций ҡабул иткән 50 йәште үткән ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-ат ҡатнашҡан. Ҡабул ителгән фекерҙәр буйынса, һөйәктәре һынып яфаланыусылар тәүлегенә 1000-1200 миллиграмм кальций ҡабул итергә тейеш. Әммә һынауҙар күрһәтеүенсә, был кәңәш һәр ваҡытта ла һөҙөмтә бирмәй. Баҡтиһәң, уның 1-2 проценты ғына үҙләштерелә икән. Етмәһә, кальций һөйәктәр һыныуы хәүефен булдырмай тигән раҫлауҙар юҡ. Киреһенсә, кальций ҡабул итеүҙән ашҡаҙан-эсәк тракты зыян күреүе ихтимал. Әйткәндәй, был яңылыҡ өлкәнәйгәс һөйәктәрҙе кальций һаҡламай, тигәнде дәлилләүсе икенсе асыш. 2010 йылда АҠШ-та остеопорозды иҫкәртеү һәм һөйәктәрҙең сәләмәтлеген һаҡлау буйынса киңәйтелгән эксперимент уҙғарылғайны. Ул ваҡытта ғалимдар ёләк-емештең һәм йәшелсәнең һөт аҙыҡтарына ҡарағанда организмға кальцийҙы күберәк биреүе тураһында белдергәйне. Бына шуның өсөн дә Азия илдәрендә остеопороз осраҡтары күп теркәлмәй. Япония халҡы Америка халҡына ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй һәм улар кальцийға бай һөт ризыҡтарын бөтөнләй тиерлек ҡулланмай. Ә Евросоюз илдәрендә һөт һәм һөт ризыҡтарын күп ҡулланалар һәм унда остеопороз менән күптәр ауырый.

✓ *Ҡыҙ ҡыҙлы булмаҫ, әсә ҡәҙерен белмәһә; ул уллы булмаҫ, атай ҡәҙерен белмәһә.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



ӨФӨ БАШҠОРТО

# ҮҘ АСЫЛЫН АҢЛАҒАНДАР...

## көслө була



**Баш ҡалала тыуып үҫкән Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, билдәле бейеүсе Урал Хәйрулла улы Мортазин Өфөгә бәйле хәтирәләре менән уртаҡлашты.**

**Һеҙҙең ғаиләнең Өфө ҡалаһы менән тарихы ниҙән башлана?**

- Атай-әсәйем Мәскәүҙә уҡып йөрөгән саҡтарында танышҡандар. Атайым Башҡорт дәүләт университетына эшкә ҡайтып, 4-се ятаҡтан бүлмә алғас, әсәйемә хат аша өйләнешергә тәҡдим яһаған. Күсенгәндә әсәйем бер сумаҙан менән, атайым ике сумаҙан менән килгән: береһендә әйберҙәр, икенсеһендә китаптар тултырылған булған. Шулай донъя ҡороп йәшәп киткәндәр. Ә минең ғүмер тарихы ул замандa Өфөнөң Совет майҙаны эргәһендә урынлашҡан 1-се балалар табыу йортонан башлана. Хәҙер был бинала Нариман Сабитов исемендәге музыка мәктәбе урынлашҡан.

**Бала саҡ хәтирәләрегеҙ кемдәр менән бәйле?**

- Беҙ бәләкәй саҡта кешеләр берберенә ҡунаҡҡа күп йөрөй торғайны, шуға, атай-әсәйемдәр аралашҡан бөтә башҡорт интеллигенцияһын күреп үҫтем. Ҡала балалары булһаҡ та, башҡорт мөхите, башҡорт йыры, бейеүҙәре күңелгә һеңгән. Атайым үҙенең студенттары менән яҡындан аралашты, мин дә улар араһында, уларҙың тормошсан кәңәштәрен, фекерҙәрен тыңлап йөрөй торғайным. Атай тәрбиәһенең асылы шунда: уның тормошҡа ҡарашын, фекерҙәрен, әйткән һүҙен, эшен күҙәтеп йөрөгән улы киләсәктә "Мин дә атайым кеүек булам", тип үҫергә тейеш. Мин атайымдың математика фәненә һөйөүен, ярҙамсыллығын күреп, унан өлгө алып үҫтем.

**Ә шулай ҙа атай юлын дауам итмәй, бейеүсе һөнәрен һайлағанһығыҙ...**

- Мин үҙ юлымды һайланым, тип әйтә алам. Бейеү - йәш саҡтан килгән шөғөлөм, Башҡорт дәүләт университетында уҡығанда ла бейеп йөрөй торғайным. Атайым менән етди һөйләшеү ваҡытында: "Ике ҡуяндың ҡойроғон тота алмайһың улым, йә математика, йә бейеүҙе һайла", - тигәс, бейеүҙе һайланым. Математик булараҡ атай ярҙам итермен, тип тә ҡараны хатта. Бейеүҙә ярҙам итеүсе булманы, әммә яҡшы уҡытыусыларға эләктем, талантлы бейеү ҡуйыусылар менән эшләнем. Атайым педагогтарыма әҙерәк көнләшеп тә йөрөнө һәм Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үҙ концертымды ҡуйғандан һуң ғына маҡтау һүҙҙәрен әйтте. Ныҡышмаллығым һәм һайлаған юлдан тура барыуым менән атайыма оҡшағанмын, тип иҫәпләйем. Шулай ҙа тормошомда математика ғилеменә урын әле лә бар: Өфө сәнғәт училищеһында бейеү дәрестәренән тыш ошо предметты ла алып барам.

**Өфө йылдан-йыл матурая бара, ә һеҙҙең күңелгә яҡын Өфө ниндәй?**

- Бәләкәйҙән гел Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендә йөрөргә яраттыҡ, Ағиҙел ярында төшкән ҡаралы-аҡлы фотолар ҙа һаҡланған. Мин коляскала ятам, ҡартинәйем һәм атай-әсәйем эргәлә баҫып тора. Артабан мин үҫә киләм, ә һәйкәлдең тирә-яғы үҙгәрә бара. Өфөнөң Пушкин урамындағы бер йорт Азат Мифтахов, Азат һәм Имель Тухметовтар, Азамат Моратов атлы дуҫ малайҙарҙың уртаҡ хәтирәләре менән тулы. Беҙ бер ихата малайҙары, бергә уйнап үҫтек. Тағы ла бейеү түңәрәгенә йөрөгән Комаров исемендәге пионерҙар йорто, тәүге тапҡыр сәхнәгә күтәрелгән Нефтселәр мәҙәниәт һарайы, ҡыштарын ғаиләбеҙ менән саңғы шыуған Якутов паркы күңелемә яҡын. Атайым менән икәү генә һөйләшеп, Салауат Юлаев баҡсаһында йөрөп, шул урамдан күпер яғына уҙа биргән урында "Пельменная" тигән тәғәмханаға инеп, тамаҡ туйҙырып ҡайтып китеү ғәҙәтебеҙ бар ине. Бына шулай, ҡайһы осорҙо хәтерләһәң дә, бөтә иҫтәлектәр тыуған ҡалам Өфөгә бәйле.

**Ҡала башҡортоноң рухы, миллилеге тураһында ни әйтерһегеҙ?**

- Рус мәктәбендә уҡыһам да, атай-әсәйемдең туған телемдән мәхрүм итмәүенә рәхмәтлемен. Әле үҙемдең улдарым башҡорт гимназияһына йөрөп, өйҙә башҡортса һөйләшһәк тә, үҙ-ара русса аралашып китә. Шуға ауыҙ тултырып башҡортса һөйләшәләр, тип маҡтанып әйтә алмайым. Беҙ үҫкәндә, нисектер, башҡортлоҡ, башҡорт рухы көслөрәк булған һымаҡ. Уйлап ҡараһаҡ, русса һөйләшеү менәнме инде, барыбер йөҙөбеҙгә "башҡортһоң" тип яҙылған. Үҙ асылын аңлаған кеше көслө була, ә беҙ бай тарихыбыҙға, рухиәтебеҙгә һаман ышанып етә алмайбыҙ шикелле. Беҙҙең быуын үҙе лә ошо хәҡиҡәткә инанырға, балаларына ла шуны аңлатып, күңеленә һендереп тәрбиәләргә бурыслы, тип уйлайым. Бына шул осраҡта ғына ҡала башҡортоноң рухы булыр, шул саҡта ғына тамырҙарынан айырылмаҫ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Әңгәмәсем баш ҡала тураһында хәтирәләре менән бүлешеү генә түгел, бында йәшәгән башҡорт ғаиләләренең нигеҙе ныҡлы, быуындары рухлы булыу серен дә аса бирҙе, бугай. Күптәр өсөн өлгө булырҙай шәхес тәрбиәләүҙең нигеҙе - ғаиләлә атай кешенең абруйынан тора шул.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

*УӘТ, ШУЛАЙ!*

# ФАЙҘАЛЫ УЙЫН

**Башҡортостанда республика картаһы пазлы уйыны популярлыҡ яулай.**



Ағастан эшләнгән пазл өлөштәре республика районы районына тора. Белорет, Бөрйән, Ейәнсура - карта уның ярҙамында республиканың территориаль бүленешен өйрәнеп булырлыҡ итеп төҙөлгән. Октябрьский ҡалаһы командаһы яһаған пазл Башҡортостанда йәшәүселәр араһында популярлыҡ яулай. Селтәрҙә ҡулланыусылар проектты үҫтереү варианттарын - пазлдарҙы Башҡортостанды районларға бүлеүҙән тыш, уның төп иҫтәлекле урындары менән эшләргә тәҡдим итә. Башҡортостан Республикаһында 54 район бар. Рәсәй субъекттары исемлегендә майҙаны буйынса 27-се урынды биләй (143 600 км²).

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бөхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠҺАҠ УЛТЫРМАҪ,

## һаҡау тик тормаҫ

Ҡыҙ ҡыҙлы булмаҫ, әсә ҡәҙерен белмәһә; ул уллы булмаҫ, атай ҡәҙерен белмәһә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше үҙенә яҙғанды күрә, быға хатта Хоҙай үҙе лә ҡамасаулыҡ итә алмай. Шуға ла мин үҙ яҙғанымды тыныс кисерәм. Минә бирелгән яҙмыш башҡа берәүгә китмәйәсәк.

**(Боронғо һинд аҡылы).**

Бәләкәй ҡайғыны һөйләнә-һөйләнә, олоһон өндәшмәй үткәрәһең.

**(Кесе Сенека).**

Күптәр дан тураһында хәстәрләй, ә намыҫ хаҡында ҡайғыртырға онота.

**(Публилий Сир).**

Йәшен бейек тауҙарҙы ғына ата.

**(Гораций).**

Һәр ваҡыт дөрөҫтө һөйләһәң... һиңә берәү ҙә ышанмаҫ.

**(Эшли Бриллиант).**

Алла барыһын да һаҡлай, бигерәк тә тәүбә һәм һөйөү һүҙен ул үҙ тауышылай ҡабул итә.

**(Иосиф Бродский).**

Һөжүмгә һөжүм менән яуап бирмәгәндән һаҡлан: ул бер ваҡытта ла һине лә ғәфү итмәйәсәк, үҙ-үҙенде ғәфү итергә лә бирмәйәсәк.

**(Бернард Шоу).**

Киң күңелле булам тип, үҙ урыныңды башҡаға бирергәме? Был бит уңышһыҙ кешенең девизы.

**(Айрис Мердок).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Балсыҡтан эшләнгән бәләкәй һыу көршәге өҫтәлдә ултыра. Бүлмәнең бер мөйөшөндәге карауатта ауырыу ята. Ул бик ныҡ сарсаған. "Һыу, һыу..." тигән өн сығарып-сығарып ала, ләкин уны берәү ҙә ишетмәй, өйҙәгеләр ҡайҙалыр киткән. Ауырыуҙың ялбарыуы шул тиклем ҡыҙғаныс була, хатта көршәк тә тетрәнә. Ул кешегә ярҙам итергә теләп, ныҡ итеп көсәнә һәм мөмкин булмағанды эшләй: ауырыу янына, тап уның ҡулы эргәһенә шыуып барып туктай. Ауырыу күҙҙәрен аса һәм көршәкте күрә. Бөтөн көсөн йыйып, көршәкте күтәрә һәм уны һыуһауҙан ярылған ирендәренә терәй. Шунда ғына көршәк эсендә һыу булмағанын аңлай. Ауырыу һуңғы көсөн көршәкте мөйөшкә бәреп ватыуға исраф итә...**

**Һығымтаһы шул: ҡәҙерендә белмәгәндәргә яраҡлашып, уларға ярҙам итергә тырышып, юҡҡа сығыуҙан һаҡлан. Кемдер һиңә ярҙам итергә теләп тә, ярҙамы килеп сыҡмаһа, уның тырышлығын лайыҡлы баһала".**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
2 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 524/07